ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 март (буранай) 2023

№9 (1051)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йыр йырланһын...**

үҙ телендә



5

**Аҡмулла исеменә лайыҡлылыҡ -**



уҡыу йортонон төп ҡаҙанышы

8-9

**Һәр йолабыҙ...**

берләштереүсе һутлы тамыр



11

**Ни менән мәшғүлдәр?**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 800 һум 10 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Юғары белем биреү өлкәһендә совет һәм Рәсәй мәғарифының иң яҡшы тәжрибәләрен файҙаланып, үҙебеҙҙең нигеҙ уҡытыу системаһына ҡайтыу кәрәк, тине Президент Владимир Путин. Ошо йәһәттән үҙ фекерегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине?***

***Луиза СӘМСИТОВА, филология фәндәре докторы, профессор, БР мәғариф отличнигы:*** Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһендә Рәсәй Президенты Владимир Путин юғары уҡыу йорттарында белем биреүҙең яңы системаһына күсеү хаҡында һүҙ ҡуҙғатты. Бөгөнгө көндә был яҡшы аңлашыла: заманыбыҙ үҙгәрә, шуға бәйле, тәбиғи, студенттарҙы уҡытыу кимәле лә үҫешергә тейеш, сөнки бөгөн үк әле йәш белгестәргә талаптар арта һәм үҙгәрә бара. Илебеҙгә төплө белемле, төрлө һөнәрҙәргә, ижади фекерләү һәләтенә эйә булған белгестәр кәрәк. Һәм шуныһы мөһим: улар тиҙ кәрәк. Ә Болон системаһы буйынса, 4 йыллыҡ бакалавриат барыбер ҙә тамамланмаған юғары белем һымаҡ ҡабул ителеп килде, шуға күрә лә студенттарҙың күбеһе, ауырлыҡ менән, бүлеп түләйтүләй булһа ла магистратурала тағы ике йыл белем алыуын дауам итергә тырышты. Юғары белем биреү реформаһы буйынса бакалавриат урынына элекке тәртиптә специалитет кимәле тәҡдим ителә, ә инде магистратураны бер йылға ҡыҫҡартыу һәм унын бюджет формаһы ҡарала. Иң мөһиме: магистратура йә ординатурала студент тағы ла бер яңы һөнәргә өйрәнә һәм үҙе һайлаған өлкәлә махсус йүнәлешкә (узкая специальность) эйә була ала.

Әйткәндәй, реформаға бәйле ошоға тиклем Болон системаһы буйынса уҡып сыҡҡан белгестәрҙең дипломдарына ҡарата бер ниндәй ҙә дәғүә булмаясаҡ, уларға был йәһәттән борсолорға кәрәкмәй, тип асыҡ әйтеп китте Президент. Дөрөҫ, әлеге ваҡытта Болон системаһынан сығыу менән бәйле юғары белем биреү системаһы белгестәре араһында бәхәстәр бара. Кемдер, был системанан бөтөнләй үк баш тартырға кәрәкмәй, тип иҫәпләһә, икенселәр, бакалавриат, ниндәйҙер кимәлдә ҡыҫҡартылған белем баҫҡысы булараҡ, төплө белем бирә алмай, тип тәкрарлай. Был йәһәттән М.В. Ломоносов исемендәге МДУ ректоры Виктор Садовничийҙың фекере иғтибарға лайыҡ. Юғары белем биреү эшмәкәрлеген камиллаштырыу Рәсәй системаһына - үҙ тәжрибәбеҙгә һәм традицияларыбыҙға таянып алып барыласаҡ, тип белдерә ул. Хәтерләһәгеҙ, заманында Болон системаһын индереүгә ул ҡырҡа ҡаршы булғайны һәм был йүнәлеште хаталаныу тип атаны.

Ысынлап та, башта был программа буйынса уҡып сыҡҡан бакалаврҙар Европаның теләһә ниндәй вузында магистратурала белем алыуын дауам итә ала, тигән вәғәҙәләр үҙен аҡламаны, ә инде бойомға ашҡан хәлдә лә, ул бик һирәктәр өсөн генә мөмкин булды. Бөгөн, алтын урталыҡты табып, Президент әйткәнсә, ватан юғары белем биреү системаһында кәрәкле булған "совет системаһының да, һуңғы ун йыл эсендәге тәжрибә һығымталарының да иң һөҙөмтәле синтезы"н булдырыу буйынса ең һыҙғанып эшләргә тура киләсәк.

## *ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ШАУЛАЙҘАР

Фатирҙа даими рәүештә сит тауыш ишетелһә, нимә эшләргә? "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы белгестәре аңлатыуынса, лифт йәки елләтеү системаһының тауышы ишетелһә, йылытыу ҡорамалдары йәки өйгә төкәтеп һалынған дөйөм туҡланыу ойошмаһының һыуыткыстары шаулаһа:

- Тәүҙә һеҙҙең хоҡуҡтарығыҙҙы боҙған компанияға йәки эшҡыуарға үҙегеҙҙең ризаһыҙлығығыҙ тураһында хәбәр итергә;
- Әгәр һеҙҙең талаптар ҡәнәғәтләндерелмәһә йәки иғтибарға алынмаһа, "Роспотребнадзор"ға ялыу яҙырға;
- Гигиена һәм эпидемиология үҙәге белгестәре тауыш кимәлен үлсәһен өсөн "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығына рәсми мөрәжәғәт ебәрергә кәрәк.

**Иғтибар итегеҙ!** Күрше фатирҙан көслө йыр һәм музыка тауыштары ишетелгәндә һәм башҡа осраҡта улар менән үҙаллы һөйләшергә, был һөҙөмтә бирмәһә, хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Ведомствоның Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығының ҡыҙыу линияһы: **8 (800) 77-50-170** (шылтыратыу бушлай). Яҙма мөрәжәғәттәр: **450054, Өфө ҡалаһы, Р. Зорге урамы, 58** адресы буйынса ҡабул ителә.

## *БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

# КӘНФИТТӘР...

## милләтте һүрәтләгән

**Үткән быуаттың 20-30-сы йылдарында "Ҡыҙыл Октябрь" кондитер фабрикаһы "Федератив кәнфиттәр" тигән атама менән тәмлекәстәр етештерә башлай. Кәнфит ҡағыҙының тышында милли кейемле төрлө милләт халыҡтары һүрәтләнгән була. Улар араһында - башҡорттар, татарҙар, ҡырғыҙҙар, тау халыҡтары, чечендар, мордвалар, яҡуттар... Хатта Рәсәйҙең төньяҡ Европа өлөшөндә йәшәүсе һәм фин-уғыр төркөмөнә ҡараған аҙ һанлы халыҡ - лопырҙар (лопарҙар, йәғни лапландтар) ҙа ҡалмаған кәнфит ҡағыҙында, ә бына был "карнавалда" рус халҡын йәшәгән губерналары буйынса "милләттәргә" бүлеп биргәндәр булып сыҡты, әйтәгүр: "Рязань халҡы", "Түбәнге Новгород халҡы", хатта "Пенза менән Курск милләттәре" лә һүрәтләнгән булған унда.**



**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

✓ *Эштә төшкө аш ваҡытында "Совет Башҡортостаны" гәзитен уҡып ултырһам, бер мәрйә: "Ни эшләп социализм, капитализм, революция тип яҙаһығыҙ, телегеҙҙә үҙ һүҙҙәрегеҙ юҡмы ни?" - тине.*



*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

# КӘНФИТТӘР...

## милләтте һүрәтләгән

(Башы 1-се биттә).

### Рәсәйҙең "тәмле" тарихы

Элекке кәнфит ҡағыҙҙары, шулай итеп, бөгөнгөләргә ҡарағанда күпкә ҡыҙыҡлыраҡ булып сыҡты. Әле бит тәмлекәстәр тышына тауыҡтар, һыйырҙыр, тағы әллә күпме төр хайуандар, унан ҡалһа, аңлашылып етмәгән ниндәйҙер һүрәттәр төшөрөлә, ә элек кәнфит етештереүселәр ҡулланыусыға тотош ил тарихы тураһында һөйләргә тырышҡан. Ә, ғөмүмән, фантиктар ҡасан барлыҡҡа килгән һуң? Кәнфит ҡағыҙҙары әллә ни боронғо асыш та түгел түгелен. Уның авторы, бынан тыш тағы ла фонограф менән электр лампочкаһын да уйлап сығарған кеше - Томас Эдисон 1872 йылда парафинлы ҡағыҙ уйлап тапҡан. Бер аҙ ваҡыттан һуң ул ҡағыҙға кәнфит төрөп сығара башлағандар. Ә уға тиклем тәмлекәстәрҙе ҡағыҙ эсенән ҡатлап ҡурғашҡа төрөр булғандар, ләкин ике ҡат төрөү ҡиммәткә төшкән. Өстәүенә, ябай ҡағыҙ эсендә кәнфитте оҙаҡ һаҡлап та булмаған, күрәһең. Шуға күрә лә парафинлы ҡағыҙ сыҡҡанға тиклем кәнфиттәрҙе етештерелгән көнөндә үк ҡулланыу өсөн махсус быяла һәм фарфор һауыттарға һалғандар һәм уның эсенән бәләкәй генә ҡыҫҡыстар менән әләктереп алғандар. Бында һүҙ йәмғиәттең ниндәй ҡатламы хаҡында барыуы аңлашылғандыр, шәйт. Крәҫтиәндәр иһә сәй эскәндә шәкәрҙе әҙләп кенә тешләп ашағандар, әлбиттә. Кәнфит ҡағыҙының барлыҡҡа килеүе тәмлекәстәрҙе күпләп сығара башлауға юл асҡан. 19-сы быуат аҙаҡтарына кондитер фабрикалары күбәйә башлаған, улар бер-береһе менән ярышып, һатып алыусыға нимә менәндер булһа ла оҡшарға тырышып эшләгәндәр. Рәсәйҙә ул ваҡытта тәм-том сығарыусы иң эре етештереүселәр булып "А.И. Абрикосов һәм уның улдары" менән "Эйнем" ширҡәттәре, шулай уҡ "Леновтар", "А.Сиу һәм К" сауҙа йорттары иҫәпләнгән. Кондитер ризыҡтар тышын биҙәүгә улар Михаил Врубель, Иван Билибин, ағалы-ҡустылы Васнецовтар кеүек бөйөк рәссамдарҙы йәлеп иткәндәр. Үкенескә, уларҙың күп эскиздары юғалған, шунлыҡтан, ул ваҡыттағы кәнфит ҡағыҙҙарына төшөрөлгән һүрәттәрҙең авторын билдәләүе ҡыйын.

### Милләттәр һәм халыҡтар



Фантиктар һәм кәнфит ҡумтаһы эсенә һалына торған ҡағыҙҙар ул саҡ революцияға тиклемге Рәсәйҙең милли составы хаҡында һүрәттәре менән бергә ниндәйҙер мәғлүмәттәр биргән һәм Рәсәйҙән ситтә йәшәгән халыҡтар хаҡында ла һөйләгән. "Эйнем" кондитер фабрикаһы "Ер шары халыҡтары" тигән карточкалар коллекцияһы сығарған. Какао йә шоколад һатып алып, әлеге коллекцияның тулы йыйынтығын туплауға мөмкин булған. 19-сы быуат аҙағында Япония менән әллә ни яҡшынан булмаған мөнәсәбәттәр һәм Ҡытай-Көнсығыш тимер юлы төҙөү буйынса пландар ҙа кәнфит ҡағыҙҙарында сағылыш тапҡан.

Советтар Союзы революцияға тиклемге традицияны дауам итеп, шулай уҡ граждандарға күп милләтле совет халҡы иҫәбенә ингән милләттәр һәм халыҡтар хаҡында мәғлүмәт биреүҙе дауам иткән. 1920 йылда "Ҡыҙыл Октябрь" (шул уҡ элекке "Эйнем"компанияһы) "Федератив карамель" тип исемләнгән кәнфит сығара һәм унда баяғы әҙ һанлы халыҡтар хаҡында ла, хатта (лопарҙар, мәсәлән) иҫкә алына. Тәмлекәстәр ҡағыҙында шулай уҡ бөгөн беҙҙең өсөн атыраҡ булған атамаларҙы ла осратырға тура килгән, мәҫәлән, "малоросстар". Тик бөгөн украиндар был атамаға ҡарата үпкә белдерә. Ә быуа ул саҡтағы үзбәктәр менән тажиктарҙы "һарттар" тип йөрөткәндәр.

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

**Февраль айында күптәр өсөн көтөлмәгән ваҡиға булды: 16-нда Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы "Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле тураһында" Федераль закон"ға үҙгәрештәр индерҙе. Алты көн үтеүгә Федерация Советы уны ҡарап, ризалығын белдерҙе, шунан ил Президенты уны раҫлап та ҡуйҙы.**

# УРЫҪ ТЕЛЕН...

## сит телдәр һүҙҙәренән таҙартырға!

Яңы законда һүҙ илдең дәүләт телен сит тел һүҙҙәренән таҙартыу тураһында бара, уны тормошҡа ашырыу юлдары күрһәтелә. Был хаҡта бәхәс 2005 йылда федераль дәүләт теле тураһында закон ҡабул иткәндән алып бара. Һәр бер яңылыҡ кеүек, уны яҡлаусылар ҙа, ҡаршылар ҙа бихисап. Власта ултырғандар, депутаттар, сауҙа тармағындағылар бигерәк тә ҡаршы сыға, сөнки закон, тәү сиратта, уларға ҡағыла: телендә, алтаҡталарҙа, атамаларҙа кәрәкмәгән һүҙҙәрҙән үҙҙәренә ҡотолорға кәрәк буласаҡ бит. Рәсәйҙең элекке Хөкүмәт етәксеһе Виктор Черномырдиндың бер фразаһы хәтергә һеңеп ҡалған: "Бер нәмә лә әйтмәйем, сөнки йәнә тағы бер нәмә әйтеп ҡуярмын". Йәки икенсе миҫал. Хәтерләйһегеҙҙер, билдәле "Джентельмены удачи" фильмында төрмә һүҙҙәрен ябай телгә әйләндергәс, хөкөм ителеүселәр быны бик ҡыҙыҡ күреп ҡабул итте. Шуның һымаҡ, әйләнгән һайын сит ил һүҙҙәрен ҡулланыусылар ҙа үҙҙәренә икенсе төрлө ҡараясаҡ. Бөгөн бит улар лөғәттәрендәге шул һүҙҙәр менән үҙҙәрен әллә "текә" күрһәтергә тырыша, әллә үҙ наҙанлыҡтарын йәшерә...

Мин был мәсьәләгә бынан утыҙ-ҡырҡ йыл элек иғтибар иттем. Эштә төшкө аш ваҡытында "Совет Башҡортостаны" гәзитен уҡып ултырһам, бер мәрйә: "Ни эшләп социализм, капитализм, революция тип яҙаһығыҙ, телегеҙҙә үҙ һүҙҙәрегеҙ юҡмы ни?" - тине. Быларҙың интернациональ һүҙҙәр икәнен аңлаттым да, уйға ҡалдым: ханым, бер яҡтан, дөрөҫ әйтә кеүек, ләкин улар урыҫ һүҙҙәре лә түгел бит әле, шулай булғас ул һүҙҙәрҙең башҡортса варианты беҙгә кәрәкме? Үҙебеҙҙең атай-бабайҙарҙан ҡалғандарын дөрөҫ ҡулланғанда ла көндәлек тормошобоҙҙа етә бит. Юҡ, оло ағайға оҡшарға тырышып, "маймыллангандар" ҙа етерлек арабыҙҙа. Магазин алтаҡталарын ғына алайыҡ. Сауҙа нөктәләренең исемдәре сит телдә яҙылһа, йәнәһе, улар шул тиклем "текә", минең ауылдаштар әйтмешләй, Алланың ҡашҡа тәкәләре кеүек тояларахырыһы үҙҙәрен. Үҙем шәхсән урындағы атамалы магазинға инәм, башҡалар ҙа шулай итә тиген уйҙамын.

"Урыҫ теленең таҙалығы тураһында һин башҡорттоң ни эше бар?" тип әйтеүселәр табылыр. Урыҫ теле илебеҙҙең дәүләт теле, уның аша ҙур мәғлүмәт алабыҙ, ә йәштәребеҙ көндән-көн сит телдәргә нығыраҡ ылыға бара. Аяғына ла баҫмаған балаға ҡулынан телефон төшмәй, хәҙер йәнһүрәттәрҙә лә ҡолаҡҡа яҡмаған һүҙҙәр күп осрай. Яңы законды тормошҡа ашырыу кинопродукция етештереүселәргә лә ҡағыла, тимәк, йәнһүрәт төшөргәндә, сит илдән һатып алынғандарын урыҫ, башҡорт теленә тәржемә иткәндә был закон талаптарын үтәргә тейеш

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

***Юғары белем биреү өлкәһендә совет һәм Рәсәй мәғарифының иң яҡшы тәжрибәләрен файҙаланып, үзебеҙҙең нигеҙ уҡытыу системаһына ҡайтыу кәрәк, тине Президент Владимир Путин. Ошо йәһәттән үҙ фекерегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине?***

***Вадим ЗАХАРОВ, Өфө фән һәм технологиялар университеты ректоры вазифаһын башҡарыусы:*** Рәсәй Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһендә юғары белем биреү мәсьәләһенә ҙур иғтибар бүлде. Беҙ юғары белем биреүҙә Рәсәй өсөн традицион булған нигеҙ тәртипкә - специалитет системаһына ҡайтырға тейешбеҙ, тине ул, һәм был дөрөҫ ҡарар, тип иҫәпләйем мин. Белем биреүҙең яңы тәртибе үҙендә совет осорондағы ыңғай тәжрибәләрҙе лә, шулай уҡ һуңғы йылдарҙағы ҡайһы бер яңыса йүнәлештәрҙе лә берләштерергә тейеш.

Вуздарҙа уҡыу ваҡыты дүрттән алты йылғаса дауам итергә мөмкин һәм шуныһы мөһим: бер үк уҡыу йортонда һәм бер һөнәргә өйрәнеү сиктәрендә студентҡа, уҡыу ваҡытына, киләсәктә эшләйәсәк һөнәр өлкәһенә һәм бөгөнгө хеҙмәт баҙарына бәйле төрлө программалар тәҡдим итергә мөмкин. Әгәр студент нигеҙ белемгә эйә булғандан һуң да уның өҫтәмә әҙерлеккә ихтыяжы була икән, ул уҡыуын магистратура йә ординатурала дауам итә ала. Шуға күрә илдә һуңғы йылдарҙа әүҙем ҡулланылыш тапҡан Болон системаһының да тәжрибәләре файҙаланылырға тейештер, тим. Мәғлүм булыуынса, уның бер йүнәлеше юғары белем биреүҙе бер нисә баҫҡысҡа бүлеп ҡарау ине. Ошоға тиклем белгес булараҡ сығарылған студенттар магистратурала фәҡәт түләүле нигеҙҙә генә уҡый алды һәм был икенсе юғары белемгә тиң тип ҡаралды. Бөгөн иһә был юғары белем баҫҡысында ике түгел, ә бер генә йыл уҡыясаҡтар һәм унда инеү түләүһеҙ буласаҡ.

Ике кимәлдәге белем биреү системаһы студенттарға белем алыу мәсьәләләрен үҙаллы көйләргә һәм үҙҙәренә бирелгән мөмкинлектәрҙе файҙаланып, ике төрҙәш һөнәргә эйә булырға, үҙҙәре һайлаған өлкәләрҙә белем кимәлен киңәйтергә, һәләттәрен үҫтерергә һәм ижади фекерләүгә ярҙам итәсәк. Бынан тыш, белем алыуҙың айырым бер кимәле булараҡ, аспирантура вуз уҡытыусылары һәм ғалимдар әҙерләп сығарасаҡ.

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы 1 мартта 70 йәшлек юбилейын билдәләгән Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачевты тыуған көнө менән ҡотланы һәм уға ҡотлауҙар менән бергә партия рәйесе Дмитрий Медведевтан күп йылдар уңышлы эшләгәне өсөн рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Юбиляр "Берҙәм Рәсәй"гә 20 йыл миҙалы менән бүләкләнде.

✓Рәсәй Хөкүмәтендә төбәктәрҙең һанлы трансформацияһы рейтингына йомғаҡ яһалды. Әлеге күрһәткес буйынса республика Рәсәйҙә - алтынсы, Волга буйы федераль округында икенсе урынға сыҡты. Бер йыл эсендә ул 32 баҫҡысҡа күтәрелде. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. Башҡортостан үрҙә әйтелгән йүнәлеш буйынса илдә иң юғары үҫеш темптарын күрһәтте. Хәҙер республика алдында тәүге өс лидер иҫәбенә инеү бурысы тора.

✓2019 йылда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың башланғысы менән республиканың муниципаль берәмектәрендә 40 меңдән ашыу яҡтыртҡыс ҡуйылды һәм алмаштырылды, һуңынан программа туҡтатылды, әммә ул быйыл тергеҙелә. Программаны ғәмәлгә ашырыуға ағымдағы йылда Башҡортостан бюджетынан 200 миллион һум бүленә, был социаль объекттарға, мәктәптәргә һәм балалар баҡсаларына юлдарҙы яҡтыртыуға бәйле хәлдә яҡшыртырға тейеш.

✓Red Wings авиакомпанияһы Өфөнән Белоруссияның баш ҡалаһына - геройҡала Минскиға тәүге даими рейс асты. Был хаҡта Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр иттеләр.Рейс аҙнаһына бер тапҡыр, дүшәмбе көндәрендә башҡарыла. Юлға 2 сәғәт 30 минут ваҡыт китә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 16 февралдә Рәсәйҙең тағы бер авиакомпанияһы Өфөнән Душанбегә осош программаһын асты. 17 февралдә Өфө - Сәмәрҡәнд тура авиаосоштары башланды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Салауат Юлаев" хоккейсылары менән осрашты. Республика етәксеһе Гагарин кубогы плей-офының беренсе матчы алдынан "юлаевсыларҙы" дәртләндереү өсөн "Өфө-Арена"ға килде. Уҙған йылда Радий Хәбиров Өфө хоккейсылары менән осраша алманы, сөнки улар коронавирус инфекцияһына бәйле изоляцияға ебәрелде. Шуға күрә республика етәксеһе һәм Виктор Козлов дружинаһы өсөн был күптән көтөлгән осрашыу ине.

✓ *Телебеҙҙәге йәтеш башҡорт, урыҫ һүҙҙәре сит, бигерәк тә дуҫ булмаған илдәр телдәре тарафынан сығарылып ташланып бөтмәһен өсөн ҡабул ителде лә атап үтелгән закон.*






улар ҙа. "Йығылып китеп артына ултырҙы", тигәнде инглизсәләп "бишенсе нөктәһе"нә ултырталар бит юҡһа.

Ҡабул ителгән закон театр, мәҙәниәт-ағартыу өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә лә туранан-тура ҡағылалыр. Ҡайҙандыр килеп сыҡҡан Элвин Грейҙар, исемен латин хәрефтәре менән яҙырға ятраҡан Zainetdin кеүектәр телебеҙҙе бер ҙә матурламай, уны йәмһеҙләүҙе кемдер, ҡасандыр туҡтатырға тейештер. Уларҙың береһе лә, бер ҡасан да Фидан Ғафаров уңышын ҡабатлай алмаясаҡ. Фидан ағай бер ваҡытта ла исемен сит һүҙҙәр, сит хәрефтәр менән яҙҙыртманы, интервьюны ла башҡорт телендә генә бирҙе. Ә хәҙерге йәш мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре Америка индеецтары кеүек ҡушаматтар менән сәхнәгә сыға. Әллә улар Бөйөк йылан, Етеҙ боландарҙан өлгө аламы? Ә тел таҙалығы һағында торорға тейешле Мәҙәниәт министрлығы ҡайҙа ҡарай? Яңы закон уларҙы ла эшләргә ҡушасаҡ, теләмәһәләр, министрҙан талап итергә кәрәк буласаҡ, ил башлығы ҡул ҡуйған закон бар бит. Шуныһы шатлыҡлы, әлдә яртылаш башҡорт Morgenshtern (сит ил агенты) ваҡытында сит илгә сығып тайҙы. Закон ҡабул ителеү менән интернетта күптәр уға ҡарата үҙенең кире фекерен белдерҙе, тимәк, был өлкәлә лә айыҡ аҡыллы кешеләр бар икән.

Мине иң аптыратҡаны - сауҙа һәм ҡулланыу тауарҙары өлкәһендәге мәғлүмәт. Рекламаны кем нисек теләй, шулай бирә. Әйтәйек, "Бөтә тауарға ташлама 30 процент", тип яҙалар. Ябай ғына итеп әйтһәң, бөтә тауарға ла хаҡ 30 процентҡа төшә бит. Быныһы башҡортса була, ә магазинға инһәң, өҫтә инглиз телендә ниндәйҙер һүҙҙәр яҙып эленгән. "Нәмәне аңлата ул?" тип һораһаң "Хаҡ төшөрөлә", тип әйтелгән бит, тиҙәр. "Ниңә урыҫса ғына яҙмайһығыҙ?" тип һораһаң, "Былай модала бит", тиҙәр. Модағыҙҙы күрһәтерлек күптән көтөлгән закон ҡабул ителде, иптәш сауҙагәрҙәр, хәҙер нисек йырлар икәнһегеҙ? Шопингтарҙы, брендтарҙы, дилерҙарҙы, имидждарҙы, кэшбектарҙы, прайстарҙы ни эшләтерҙәр ҙә, секонд-хендтарға кире "Комиссион тауарҙар" тигән яҙыу ҡуйырҙармы икән?

Һүҙҙәрҙе башҡортсаға тәржемә иткәндә телселәр генә түгел, ә төрлө тармаҡ белгестәре лә ҡатнашырға тейеш, сөнки тәүгеләре техник һәм башҡа терминдарҙың мәғәнәһенә төшөнөп етмәй. Мәҫәлән, мәктәптәрҙәге класс һүҙен алайыҡ. Урыҫса эшселәр синыфы, буржуаз синыф бар, улар ҙа класс тип атала. Мәктәптәге 1-се һәм унан өлкән кластар синыф булмай, сөнки улар белем һәм йәш буйынса айырыла.

Әйткәндәй, журналистар ҙа телдәр сафлығы өсөн яуап бирергә тейеш. Башҡортостан Журналистар союзы үткәргән семинарҙарҙа йыш ҡатнашырға тура килде, ул йыш ҡына кофе-брейк менән башлана ине. "Ниңә кофе-брейкта сәй менән һыйлайһығыҙ, ә кофе ҡайҙа?" тигәнгә, ойошторо-усыларҙың береһе: "Ул шулай атала бит",- тип яуапланы. Ә ябай ғына үҙебеҙсә "Ҡыҫҡа тәнәфес" тиһәң, аңлашылмаймы, йәки башҡортсалап "Сәйгә тәнәфес" тиһәң? Парикмахер һүҙе "Башҡортостан" гәзите тырышлығы менән бөҙрәханаға әйләнеп бара ине, хәҙер яйлап ҡына бьюти-салондар тарафынан ҡыҫырыҡлап сығарыла башланы. Телебеҙҙәге йәтеш башҡорт, урыҫ һүҙҙәре сит, бигерәк тә дуҫ булмаған илдәр телдәре тарафынан сығарылып ташланып бөтмәһен өсөн ҡабул ителде лә атап үтелгән закон. Ә ниндәй һүҙҙәр икәнен беҙ 2025 йылдың 1 ғинуарына тиклем беләсәкбеҙ, шул осорға уларҙың исемлеге булдырыласаҡ.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Юғары белем биреү өлкәһендә совет һәм Рәсәй мәғарифының иң яҡшы тәжрибәләрен файҙаланып, үҙебеҙҙең нигеҙ уҡытыу системаһына ҡайтыу кәрәк, тине Президент Владимир Путин. Ошо йәһәттән үҙ фекерегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине?***

***Әлфирә МӨХӘМӘҘИЕВА, магистратура тамамлаған белгес:*** Беҙҙең быуын Болон системаһы "емештәрен" татып ҡараны һәм, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, һайлаған һөнәребеҙ буйынса был беҙгә бер ниндәй ҙә "тәрән белем", ҡәнәғәтләнеү тойғоһо бирмәне. Мин университеттың сит телдәр факультетында уҡыным, ләкин дүрт йыллыҡ бакалавриат программаһында сит тел өйрәнеүгә бөтөнләй ҡағылышы булмаған бик күп предметтар менән яфаланырға тура килде. Мәҫәлән, "Заман тәбиғәт белеме концепцияһы", мәктәптә үтелгән "Тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре", "Коммуникация теорияһына инеш", "Социология" кеүек курстар урынына сит телдәрҙән ғәмәли дәрестәр, күнегеүҙәр, телмәр мәҙәниәте, өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше буйынса сәғәттәр күберәк ҡуйылһа, бик файҙалы булыр ине.

Дөйөм үҫеш өсөн кәрәк, тип әйтерҙәр был предметтарҙы, ләкин уның өсөн былай ҙа дисциплиналар, лекциялар, зачет һәм имтихандар баштан ашырлыҡ булды. Бына улар: "Хоҡуҡ нигеҙҙәре", "Политология", "Информатика" һәм башҡа шундай "үҫтереүсе" предметтар. Бушҡа үткән ваҡыт, тип атаныҡ беҙ ул курстарҙы. Уның ҡарауы, төп һөнәри фәндәрҙән күнекмә дәрестәр бөтөнләй тип әйтерлек булманы, студенттарҙың күбеһе сит телде мәктәп программаһынан да артыҡты белеп сыға алманы. Минә, ярай әле, 9-сы синыфта уҡығанда түләүле махсус курста инглиз телен тәрәнерәк өйрәнеү бәхете тейгәйне, белгәндәремде онотмаҫҡа шуның ярҙамы ныҡ ҙур булды. Магистратура тағы ла оҙаҡ ике йыл шулай уҡ үҙ яйы менән дауам итте. Унда ла кәрәге лә, кәрәкмәгәне лә күп булды предметтарҙың. Әйтерһең дә, ысынлап та, ваҡыт үткәреү өсөн тырышалар: ике йыл өсөн университет фондына байтаҡ аҡса йыйыла бит! Ҡыҫҡаһы, мин беҙҙең әсәйҙәр, атайҙар уҡыған биш йыллыҡ специалитет системаһын хуплайым һәм һайлаған һөнәрҙе тейешле үҙләштереү өсөн күнекмә дәрестәрҙең күберәк булыуын теләр инем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## УЙЛЫҒА - УЙ



# ЕР ТЕТРӘГӘНДӘН ҺУҢ..

## ғәйеплеләрҙе эҙләү кәрәкме?

**Күптән түгел булған Төркиә, Сүриәләге ер тетрәү фажиғәһе бөтә донъя халҡын тетрәтте. Емереклектәр аҫтында ҡалып, ҡырҡ алты мең тирәһе кешенең ғүмере ҡыйылыуы, әлбиттә, ҡот осмалы фажиғә.**

Быңдай хәлдәр донъяла элек-электән була килә шул. Мәҫәлән, 1948 йылда Төркмәнстандың Ашхабад ҡалаһындағы тетрәү мәлендә 110 меңдән ашыу кеше үлә. 1966 йылда ошондай фажиғәгә Ташкент ҡалаһы тарый, уның ныҡ емерелеүе хаҡында гәзиттәрҙә баҫылып сыҡҡаны бала сағымдан хәтеремдә ҡалған. Эпицентры ҡала уртаһына тап килеп, ун квадрат километр майҙандағы йорттар ер менән тигеҙләнә, 300 меңдән ашыу кеше торлаҡһыҙ ҡала, ә һәләк булғандар һаны хаҡында мәғлүмәт ишетмәнем (СССР дәүерендә ундай-бындай хәлдәрҙе артыҡ ныҡ яҡтыртмайҙар ине). Бөтә Союздан төҙөүселәр барып, Үзбәкстандың баш ҡалаһын сағыштырмаса тиҙ арала аяҡҡа баҫтырҙылар.

Һикһәненсе йылдар башында хәрби эш буйынса командировкала Дағстан республикаһында булырға тура килгәйне. Унда ла 1970 йылда ныҡ ҡына ер тетрәү булғанлығы хаҡында белдем. Урындағы кешеләр Махачкала, Буйнак ҡалаларының күп кенә йорттарын ҡабаттан төҙөүҙәре, яңы өйҙәрҙе сейсмологик көстәргә бирешмәүсән итеп ҡороуҙары хаҡында һөйләнеләр. Үҙ ваҡытында был турала матбуғат сараларында бөтөнләйгә хәбәр ишетелмәгәйне. Ғөмүмән, унда ла емереклектәр, үлгәндәр ҙә байтаҡ булғандыр. Ни хәл итәһең. Дауыл, ямғыр, ҡойон, йәшен һымаҡ уҡ ер тетрәүҙәр ҙә беҙҙән тормаған тәбиғәт күренеше. Тик мине кешелек йәмғиәтендә урын алған икенсе бер нәмә һәр саҡ уйландыра: ни өсөндөр күпләп зыян килтереүсе шундай бәлә-ҡаза тыуып китһә, "ғәйеплеләрҙе" эҙләй башлайбыҙ.

Башта иҫкә алған Төркиәнең бөтөнләйгә тиерлек емерелеп бөткән бер ҡалаһының башлығы иҫән ҡалған һәм уны ҡулға алғандар икән. Бәлки, бигүк хаҡлы ла түгелмендер, әммә ошо турала уҡығас, шул хужаны йәлләнем. Бынан тыш, йорттар төҙөүҙә һәм уларҙы ҡабул итеүҙә ҡатнашҡан ике йөҙләп кешегә "эҙләү һалыуҙары" хаҡында ишетеп, уларҙы ла йәлләнем. Был "ғәйеплеләр" нәҡ шундай уҡ йорттар менән тулы, әммә әлегә ер тетрәү кисермәгән башҡа ҡалаларҙың етәкселәре һәм бүтән күп кенә вазифалы кешеләрҙән нимәһе менән айырыла? Ҡулға алынған әлеге ҡала башлығы, моғайын, башҡалар һымаҡ уҡ, яҡындарын юғалтҡан, зыян күргән халҡы менән бергә ҡайғыра, үҙе үк киләсәктә ҡалаһын нисегерәк итеп аяҡҡа баҫтырыу, артабан сейсмототороҡло өйҙәр һалдырыу тураһында ла уйланалыр...

(Дауамы 6-сы биттә).

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2019 йылдан Башҡортостанда 6680 ғаилә газ һуҙыу өсөн сертификаттар алған. "Республикала 2019 йылдан йортҡа газ үткәреү өсөн сертификаттар тапшырыу тәртибе ҡабул ителгән. "Газпром" газды ер участкаһы сигенә тиклем килтерә, ә граждандарҙың айырым категорияларына республика иҫәбенә эштәрҙе башҡарыу һәм ҡоралдар һатып алыу өсөн сертификат бирелә", - тине республиканың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Егор Родин.

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостанда "Йәш килен" республика этноконкурсы башлана, әле ғаризалар ҡабул итеү бара. Конкурста Башҡортостандан һәм илдең башҡа төбәктәренән башҡорт телен, үҙ халҡының йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен, шәжәрәһен, милли аш-һыуын белгән 35 йәшкә тиклемге килендәр ҡатнашырға мөмкин. Тәүге һайлап алыу туры 10 мартҡа тиклем булһа, икенсе һуңғы тур 17-18 мартта Балтас районының Иҫке Балтас ауылы Мәҙәниәт һарайында үткәрелә. Конкурсты ойоштороусылар: Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Балтас районы хакимиәте.

✓КПРФ Дәүләт Думаһына мәктәптәрҙә Рәсәй флагы менән бергә Еңеү байрағының күсермәһен элеү тураһында проект индерҙе, тип хәбәр итә ТАСС. Авторҙар әйтеүенсә, закон проекты йәштәр араһында илһөйәрлек ҡараштарын үҫтереү һәм тарихты өйрәнеүҙең мөһимлегенә иғтибарҙы йәлеп итеү өсөн әҙерләнгән. Башҡортостанда Еңеү көнөндә дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары биналарына Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагтары, муниципаль берәмек флагы менән бергә Еңеү Байрағының күсермәләре лә элenә.

✓Радий Хәбиров биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән 17 ҡатын-ҡыҙҙы "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Баймаҡ, Бәҡалы, Балаҡатай, Бишбүләк, Дүртөйлө, Ишембай, Кушнаренко, Миәкә, Нуриман, Хәйбулла райондарынан, шулай уҡ Сибай ҡалаһынан 17 ҡатын-ҡыҙ наградаға тәҡдим ителгән. "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән күп балалы әсәләргә бер тапҡыр 50 мең һум аҡса бирелә. Быға тиклем ошо түләүҙең күләме 17 241 һум ине. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, миҙал 1998 йылда булдырылған.

✓ *Был хеҙмәт стажы 42 йыл тәшкил иткән 60 йәшкә тиклемге ир-егеттәр һәм 37 йыл эшләгән 55 йәштән өлкән ҡатын-ҡыҙҙар өсөн көнүҙәк. Шулай уҡ 15 йылдан кәм булмаған стажлы күп балалы әсәй ҙә хаҡлы ялға китә ала.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ВАҠЫТЫНАН АЛДА ПЕНСИЯҒА...

**Башҡортостан Республикаһы Идара итеү үҙәгендә кемдең ваҡытынан алда пенсияға дәғүә итә алыуы хаҡында һөйләнеләр.** Үҙәк хеҙмәткәре Ильяс Сәғитов "Сәләм" тапшырыуы эфирында хәбәр итеүенсә, был хеҙмәт стажы 42 йыл тәшкил иткән 60 йәшкә тиклемге ир-егеттәр һәм 37 йыл эшләгән 55 йәштән өлкән ҡатын-ҡыҙҙар өсөн көнүҙәк. Шулай уҡ 15 йылдан кәм булмаған стажлы күп балалы әсәй ҙә хаҡлы ялға китә ала. Әгәр уларҙың өс балаһы булһа, пенсияны - 57, дүртәү булһа - 56, бишәү булһа 50 йәштә алырға мөмкин. "Ваҡытынан алда пенсияға сығыу хоҡуғы йәшкә, пенсия коэффициенттарына, һөнәргә һәм башҡа бөтәһе 30-ҙан ашыу категорияға бәйле. Кешенең пенсия стажы туплауы һәм ошо льгота менән файҙалана алған йәшкә етеүе мөһим. Ғаризалар Социаль фондта - сайттағы шәхси кабинет аша, дәүләт хеҙмәттәре ярҙамында йәки күп функциялы үҙәктә ҡабул ителә. Билдәле булыуынса, 2022 йылдың декабренә республикала пенсионерҙар һаны 1 млн 151 кеше тәшкил иткән, шуларҙың 180 меңе - эшләп йөрөүселәр.

✓ **Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыу өсөн ике яңы ирекле батальон ойоштоярла.** Уларҙың береһе - Даян Мурзин, икенсеһе "Төньяҡ амурҙары" тип йөрөтөлә. Хәрби хәрәкәттәр ветераны, ирекле батальондар ойоштороу штабы начальнигы Борис Гордеев һүҙҙәренсә, "Төньяҡ амурҙары" батальонына 50 йәшкә тиклемге ир-аттар инергә мөмкин, улар махсус операцияла Рәсәй гвардияһы составында ҡатнашыр тип күҙаллана. Даян Мурзин исемендәге отрядҡа 50 йәше тулғандарҙы ла алырға әҙерҙәр. Әлегә улар республика хөкүмәте һәм Оборона министрлығы менән яңы батальондарға булышлыҡ итеү тураһында һөйләшеүҙәр алып бармаған. Ләкин тәүге ике көндә офисҡа отрядҡа инергә теләгән 30-ҙан ашыу кеше килгән. Ирекмәндәргә әлегә Өфө ҡалаһы, Әй урамы, 63 адресы буйынса яҙылырға мөмкин. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефон: 8 987 047 28 75 (шылтыратыуҙар көн һайын иртәнге сәғәт 10-дан киске 6-ға тиклем ҡабул ителә). Хәрби тәжрибәһе булған йәки уныһыҙ ҙа, хөкөм ителгән ир-егеттәрҙе, медицина хеҙмәткәрҙәрен ҡабул итергә әҙербеҙ, тип билдәләне Борис Гордеев.

✓ **Башҡортостанда 2023 йылдың 6 мартынан 19-ына тиклем рөхсәтһеҙ ағас ҡырҡыуҙы иҫкәртеү маҡсатында "Урман" операцияһы уҙғарыла.** Ул Башҡортостанда ағасты законһыҙ ҡырҡыуға юл ҡуймауға йүнәлтелгән. Был турала Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Иҫкәртеү сараларында Урман хужалығы министрлығы, полиция, дәүләт техник күҙәтеүе хеҙмәткәрҙәре, йәмәғәт инспекторҙары, казак ойошмалары (Ғафури, Нуриман, Иглин һәм Яңауыл урман хужалыктары биләмәләрендә) һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары ҡатнаша. Ағастарҙы һәм ҡыуаҡтарҙы законһыҙ ҡырҡҡан өсөн енәйәт һәм административ яуаплылыҡ янай. Граждандарға - 3-4 мең, юридик шәхестәргә 200-500 мең һум штраф һалына. Хоҡуҡ боҙоуға шаһит булғандарҙың 8 (347) 218-14-14 телефоны буйынса Башҡортостан Республикаһы Урман хужалығы министрлығының диспетчер хеҙмәтенә мөрәжәғәт итеүҙәрен һорайҙар, фото һәм видеотеркәү материалдары ла кәрәк.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# СПОРТ - ЙӘШӘҮ НОРМАҺЫ

**Башҡортостанға эш сәфәре менән килгән Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Дмитрий Чернышенко Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров менән бергә Өфөлә яңы ябыҡ футбол майҙанын асыуҙа ҡатнашты һәм футбол буйынса "Мин - герой" фиджитал турнирына старт бирҙе.**




"Спорт - йәшәү нормаһы" федераль проекты сиктәрендә Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостан менән берлектә республика балаларына иҫ киткес шәп манеж бүләк итте. Ошонда һәм әле үк уныштҡа өлгәшкәндәрҙән көс-дәрт алыуыбыҙ бик мөһим. Киләсәктә һеҙгә мотлаҡ уныштар юлдаш булыр", - тип белдерҙе Дмитрий Чернышенко. Ул Өфөнөң балалар-үҫмерҙәр командаларына яңы футбол экипировкаһына сертификат тапшырҙы. Шулай уҡ ул республика менән бергә иң яҡшы өс ауыл тренерын 1 миллион һумлыҡ сертификаттар менән бүләкләне. Вице-премьер фиджиталфутбол буйынса "Мин - герой" турнирына старт бирҙе. Яңы манежда республиканың 700-гә яҡын йәш футболсыһы туп һуғыу буйынса илдә яңы рекорд ҡуйҙы. Күмәк ҡаҙанышты теркәү өсөн Рәсәйҙең Рекордтар китабы редакцияһы саҡырылды.

Башҡортостан Башлығы Өфө халҡын яңы спорт объекты эшләй башлауы менән ҡотланы. "Бөгөн республикабыҙ тормошонда ҡыуаныслы ваҡиға. Беҙ яңы футбол манежын асабыҙ. Бындай объекттар күберәк булырға тейеш. Шуға күрә алдыбыҙҙа торған төп бурыс - тәҙеү, - тине Радий Хәбиров. - Көрәш нарайы, Фехтование һарайы, тотош республикала бик күп физкультура-һауыҡтырыу комплекстары һәм бассейндар төҙөйбеҙ. Был иһә малайҙарға һәм ҡыҙҙарға үҙҙәре теләгән спорт төрө менән шөғөлләнергә, көслө, һәйбәт кеше булырға, өлкәндәргә ихтирам итергә һәм бер-береһенә ярҙамлашып өйрәнергә мөмкинлек биререн аныҡ беләбеҙ".

Дмитрий Чернышенко киберспорт буйынса Рәсәй чемпионы Роберт Фәхретдинов менән дә аралашты. Һүҙ илдә интерактив спорт дисциплиналарын үҫтереү хаҡында барҙы.

# ЭШ УРЫНДАРЫ АРТА



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә республиканың эшҡыуарҙары өсөн лайыҡлы шарттар булдырыу, инвестиция һәм сәнәғәт ҡеүәтен үҫтереү хаҡында һөйләне.**

Шул йәһәттән әле Өфө районында төҙөлә башлаған "Зубов" технопаркы ыңғай миҫал булып тора, 10,5 мең квадрат метр майҙанда корпус нигеҙенә тәүге свайҙар ҡағылды. Технопарк майҙанында ошондай ике бина, 2,9 мең квадрат метрлыҡ административ-көнкүреш корпусы планлаштырылған. "Был иһә беҙҙең инвестиция сәғәтендә тикшерелгән өҫтөнлөклө проекттарҙың береһе. Уның хаҡы - 1,4 миллиард, үҙебеҙҙең яҡтан инженер инфраструктураһы - юл, йылылыҡ, һыу, электр уты менән ярҙам итербеҙ. Технопарктың потенциаль резиденттары пулын булдырҙыҡ. Улар иҫәбендә - "Өфө компрессор заводы" һәм "Геомеханика" фәнни-техник үҙәге. Беренсе этапта технопарка 160 эш урыны асыу күҙаллана, яҡшы үҫеш перспективаһы бар. Яңы майҙансыҡ Өфөнән алыҫ түгел, уңайлы урында урынлашҡан", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. Башҡортостан Башлығы республиканың төрлө районларында 12 индустриаль парк һәм 18 технопарк теркәлгәнен хәтергә төшөрҙө. Ошо майҙансыҡтарҙа 30,1 мең эш урыны булдырылған, 168 резидент теркәлгән. Уларҙың инвестицияларының дөйөм күләме 45 миллиард һумдан ашыу тәшкил итә.

"Сәнәғәт предприятиеларын үҙҙәренең инвестиция проекттарын тормошҡа ашырырға саҡырабыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# АТАЙСАЛҒА ЙЫЙЫЛДЫЛАР

**Дүртөйлө ҡалаһында "Минең кесе Ватаным - Атайсал" форумы булып үтте. Унда Башҡортостандың 10 районынан һәм ҡалаһынан: Ағиҙелдән, Нефтекаманан, Бөрө, Благовещен, Дүртөйлө, Илеш, Ҡалтасы, Краснокама, Кушнаренко һәм Яңауыл районларынан вәкилдәр ҡатнашты.**

Форум күргәҙмә менән асылды, унда муниципалитеттар әһәмиәтле проекттары менән таныштырҙы. Атап әйткәндә, Дүртөйлө районында программа башланғандан алып 248, былтыр иһә 180-дән ашыу проект бойомға ашырылған. Мәҫәлән, эшҡыуар Рөстәм Ғиләжетдинов Түбәнге Маншыр ауылына юл төҙөгән. Ә район советы депутаты, Ленин исемендәге токомсолоҡ заводының генераль директоры Альберт Дәүләтбаев бер нисә ҙур проектҡа спонсор ярҙамы күрһәткән: тыуған Һыуыҡҡул ауылында мәсет һалған, урындағы мәҙәниәт йортон төҙөкләндергән, хоккей майҙансығы эшләп ҡуйған һәм балаларҙы спорт формаһы менән тәьмин иткән. Мәмәҙәл ауылында апрелдә Ҡайғылы әсә һәйкәлен асырға йыйыналар.

Форумда ҡатнашыусылар махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү темаһына айырым иғтибар бүлде. Заман саҡырыуы шундай: яугирҙарға булышлыҡ күрһәтеү - "Атайсал" проектының мөһим йүнәлештәренең береһе, тип билдәләне йыйылыусылар. Нефтекаманың "Игла" компанияһы уҙған йылдың йәйенән хәрбиҙәр өсөн экипировка тегә башлаған. Быға тиклем был флистан кейем тегеү менән шөғөлләнгән микропредприятие булһа, хәҙер махсус хәрби операция өсөн: аптечкаларҙан алып бронежилеттарға тиклем тегәләр. Предприятие хужалары материалдар һатып алыу өсөн бағыусылар эҙләп таба, шунан һуң махсус кейемдәр тегеп, гуманитар йөк менән махсус хәрби операция барған зонаға оҙата. Форум программаһында түңәрәк өҫтәлдәр, йәштәр өсөн секциялар, "Тамыр" телестудияһынан оҫталыҡ дәресе, ауыл биләмәләре башлыҡтары һәм эшҡыуарҙар өсөн страт-сессиялар үтте.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө районының Дорогин ауылында, Шаҡша янында, йәмәғәт биләмәһе төҙөкләндерелә. Проект 7,5 меңдән ашыу тауыш йыйған, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығынан. Быны тормошҡа ашырыу өсөн аҡса "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты сиктәрендә бүленгән. Участкала әүҙем ял өсөн зона булдырыу күҙаллана. Проектта йәйәү йөрөү өсөн юлдар, спорт майҙансығы, балалар ҡаласығы бар, биләмәне йәшелләндереү өсөн ылыҫлы ағастар ултыртыу ҡаралған.

✓Башҡортостанда 1225 урынлыҡ яңы мәктәп асылды. Өфө районы хакимиәте башлығы билдәләүенсә, белем усағы "Миловка паркы" биҫтәһендәге һәм муниципалитет биләмәһендәге мәктәптәрҙә урындарға ихтыяжды кәметергә мөмкинлек бирергә тейеш. "Бында 3D-кластар, телестудия, көршәк яһау оҫтаханаһы, "Реаниматор" тренажер комплексы һәм балаларҙы төрлө яклап үҫтереү өсөн башҡа заманса ҡорамалдар бар", - тип билдәләне Вилорий Угаров. 2023 йылда Булгаков ауылы халҡы өсөн 825 урынлыҡ мәктәп төҙөлөшө башлана, тине ул.

✓Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығына төҙөләсәк объекттар исемлегенә ингән "Көньяҡ ҡапҡалар" проектының бер өлөшө булған Пугачев һәм генерал Рыленко урамдары киҫелешендәге транспорт сиселеше күперенең тимер урҙаларын монтажлау башланды. Улар барлығы 80 дана булырға тейеш. "Уралмостострой" акционерҙар йәмғиәте филиалының 30-сы күперҙәр төҙөү отряды баш инженеры Евгений Юткин белдереүенсә, бөгөнгә 1-се тереү 90 процентҡа әҙер, икенсе һәм өсөнсөһө тулыһынса тамамланған. Объектта 20 тирәһе техника, 120 кеше эшләй.

✓Өфөнөң 15-се балалар музыка мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Булат Мишәров Рәсәйҙең йәштәр Дельфий уйындарында ҡатнаша. Йәш таланттар форумы 21-26 апрелдә Һарытауҙа уҙғарыла. Булат Мишәров февраль аҙағында Өфөлә үткән һайлап алыу турында 16 лауреаттың береһе булды. Унда республиканың мәҙәниәт өлкәһе белем биреү учреждениеларынан 76 дәғүәсе, шулай уҡ Башҡортостандан ситтә уҡыған һәләтле йәштәребеҙ ҡатнашты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Абруйлы жюри ағзалары З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһының "Кәмһетелгәндәр" романы буйынса ҡуйылған "Шәшке уйнатыу" күренешен һоҡланып ҡараны һәм иң юғары баһа бирҙе.*



*АФАРИН!*

# ЙЫР ЙЫРЛАҺЫН...

## үҙ телеңдә

**"Йәшәү бәхете - өмөт, хеҙмәттә.**
**Йәшәү бәхете - дуҫлыҡ, хаҡлыкта.**
**Йәшәү бәхете - илең, халкың өсөн**
**Көрәш аша тыуған шатлыкта", тип яҙған Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева. Ә бына ошо көндәрҙә баш ҡаланың әҙибә исемен йөрөткән 140-сы башҡорт гимназияһында үткән "Зәйнәб Биишеваның тормошо һәм ижады" Республика ижади проекттар конкурсында ҡатнашып, йәшәү бәхете - лайыҡлы алмаш үҫтереүҙә лә булыуын күрҙек.**




Унынсы тапҡыр үткәрелгән конкурста быйыл Башҡортостандың төрлө район-ҡалаларынан йөҙҙән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Улар башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә ижади эштәр башҡарҙы, ораторлыҡ оҫталығын һынаны, әҙибәнең әҫәрҙәрен сәхнәләштерҙе. Быйыл ойоштороусылар уҡыусыларға ижади проекттарын "Ир-егеттәр иле, халҡы өсөн Азат уйҙар менән баш һала" тигән атама аҫтында илһөйәрлек темаһын сағылдырыуҙы маҡсат итеп аткарырға тәҡдим иткән. Ә бына ораторлыҡ оҫталыҡтарын һынау "Беҙ атлайбыҙ ерҙә йәшәртеп..." тип нарыҡланғайны, унда уҡыусылар З. Биишеваның әҫәрҙәренән өҙөктәрҙе яттан һөйләне, үҙ иншаларын уҡыны, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итте.

Бер тема буйынса сығыш яһауға ҡарамаҫтан, балаларҙың бер-береһен һис ҡабатламауы ғәжәпләндерҙе. Телмәр тотоусылар яҙыусының "Мөхәббәт һәм нәфрәт", "Бәхет-ҡыҙ хаҡында әкиәт", "Тылсымлы ҡурай", "Йәшел йүгән", "Яҡтыға", "Һөнәрсе менән Өйрәнсек", "Хәтер саткылары" әҫәрҙәре буйынса әҙерләнгәйне. Улар жюри алдына сығып, ҡоро һүҙ генә һөйләп торманы, сығыштарын презентация материалдары, моң менән дә биҙәне. Жюри Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 10-сы класс уҡыусыһы Вилдан Шәмсетдиновтың сығышын бер тауыштан юғары баһаланы. Ул "Тылсымлы ҡурай" драматик поэмаһындағы Кинйәбай образына мөрәжәғәт итеп, үҙенең илһөйәрлек, ир-егет өсөн дан һәм шөһрәт төшөнсәләре тураһындағы фекерҙәрен еткерҙе.

Ә бына Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Азалия Ишкинина З. Биишеваның ижадын һәм тормош юлын сағылдырған "Унышка ете аҙым" тигән онлайн марафон үткәреү проектын тәҡдим итте. Быға ярашлы, ҡатнашыусылар ете көн дауамында төрлө темаларға арналған һәм уларҙың төрлө оҫталыҡтарын күрһәткән фото-видеоларҙы социаль селтәрҙәрҙә урынлаштырып барырға тейеш. Азалия был проектын үҙе уҡыған белем усағында бойомға ашырыр алдынан тиҫтерҙәренең фекеренә лә ҡолаҡ һалған: улар ҡатнашыр инеме, йыл да үткәрергәме-юҡмы, тигәнерәк һорауҙарға яуаптар алған. Ҡыҙ был заманса проекты өсөн "Ижади ҡараш" номинацияһында еңеүсе булды.

Ораторлыҡ оҫталығы секцияһында жюри рәйесе, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, "Йөрәк һүҙе" проекты авторы Наилә Сәфәрғолова уҡыусыларҙың сығыштарын юғары баһаланы һәм: "Балаларҙың башҡорт әҙәбиәтенә булған ҡыҙыҡһыныуҙарын күреп, Зәйнәб апайҙың ижадын төптән аңлап, уны яратып һәм теләп өйрәнеүҙәренә һоҡланып ҡайттым. Балаларҙың хайран ҡалырлыҡ береһенән-береһе оҫта ижади эштәре, уларҙың үҙенсәлекле һәм талантлы булыуҙары миндә онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы!" - тип һоҡланыуы менән уртаҡлашты.

Шулай ҙа был конкурстың иң сағыу өлөшө З. Биишева әҫәрҙәрен сәхнәләштереү булғандыр. Уҡыусылар "Алтын йомортҡа", "Бүре һәм кәзә", "Яңғыҙ сыйырсыҡ яҙ килтермәй", "Яҡтыға" әҫәрҙәренә мөрәжәғәт иткән. Конкурстың был өлөшө балаларҙың телмәр оҫталығын, актерлыҡ һәләттәрен асыҡ сағылдырҙы. Абруйлы жюри ағзалары З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһының "Кәмһетелгәндәр" романы буйынса ҡуйылған "Шәшке уйнатыу" күренешен һоҡланып ҡараны һәм иң юғары баһа бирҙе. Конкурстың жюри рәйесе, журналист һәм драматург Сәрүәр Сурина һәр сәхнәләштереүгә тәрән анализ яһап, кәңәштәрен еткерҙе, балаларҙы әҙерләгән уҡытыусыларҙың эшен баһаланы. Ә беҙ "шәшке уйнатыусылар"ҙың береһе, 12 йәшлек Руфина Хәлитова менән һөйләштек: "Беҙ 5-се, 6-сы һәм 7-се кластарҙан 8 ҡыҙ ҡатнаштыҡ. Сәхнәләштереүҙе бер аҙна әҙерләнек, тиҙ генә ятланыҡ. Йыл да ҡатнашам бындай сәхнәләштереүҙәрҙә, шиғырҙар һөйләргә яратам. Бөгөн беҙ яҙ көнө һигеҙ ҡыҙҙың урамда нисек уйнауын күрһәттек. Улар ярлылыкта йәшәгәндәр, сыналыҡтар урынына ярсыҡтар ғына булған. Беҙ үҙебеҙ ҙә улар кеүек уйнайбыҙ ул, тик беҙҙең күлдәктәр ҙә матур, төрлө уйынсыҡ һауыт-һабаларыбыҙ ҙа күп. Тик бындай уйынды мин ауылға өләсәйемә барғанда ғына уйнайым, ҡалала уйнап булмай", - ти ҡыҙ.

Был сараны ойоштороусылар - З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһының уҡытыусылар коллективына, директоры, шағир Фәнил Бүләковҡа, шулай уҡ Калинин районы ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Риф Исәновҡа был күңел байрамы өсөн рәхмәт әйтергә генә ҡала. Был конкурс башҡа йылдарҙағынан йөкмәткеһе, рухы йәһәтенән бер башҡа айырылып тороуы менән хәтерҙә ҡаласаҡ. Гимназияның "Шатлыҡ" йыр ансамбле тәрбиәләнеүселәренең сара һуңында "Ҡалдыр эҙеңде үҙ илеңдә, үҙ ереңдә! Һал бар көсөңдө, йыр йырлаһын үҙ телеңдә!" тип йырлауы ла ошо белем усағының яңы һулышына, яңырыуына ишара булды.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ӨМӘЛӘР ҠАЛАНЫ ТАҘАРТА

**Өфө округы хакимиәте ҡарарына ярашлы, территорияны санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса айлыҡтар яҙғыһын - 3 апрелдән 14 майға, ә көҙ көнө 11 сентябрҙән 15 октябргә тиклем ойоштоҡола.** Дөйөм ҡала өмәләре 8 апрелдә, 15 апрелдә, 13 майҙа, 23 сентябрҙә һәм 30 сентябрҙә үткәрелә. Муниципаль хеҙмәттәргә райондарҙың биләмәләренән Яңы Черкассы ҡасабаһы янындағы ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар полигонына сүп-сар сығарыу өсөн кәрәкле техника бүлергә ҡушылды. "БашРТС" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте, "Өфө инженер селтәрҙәре" муниципаль унитар предприятиеһы, "Башкирэнерго" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең "Өфө ҡала электр селтәрҙәре" производство берекмәһе, "Өфө һыу каналы" дәүләт унитар предприятиеһы, "Газпром газ бүлеү Өфө" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең филиалы һәм ер эштәрен башҡарған ойошмаларҙың етәкселәренә 2023 йылдың 1 майына тиклем төҙөкләндереү эштәрен 100 процентҡа тамамлау бурысы йөкмәтелде. Йәйге-көҙгө осорҙа атҡарылған эштәр 10 октябргәсә тамамланырға тейеш.

✓ **Өфө фән һәм технологиялар университеты бушаған бюджет урындарына гаризалар ҡабул итә.** Ғаризаны деканаттарҙа (уҡыу бүлектәрендә) йәки күп функциялы студенттар офисында бирергә мөмкин. Дисциплинар һәм уҡыу өсөн түләү буйынса бурысы булмаған, һуңғы ике семестрҙы "яҡшы" һәм "бик яҡшы" билдәләренә генә тамамлаған студенттар бюджет урындарына күсерелә. Университеттың уҡыу, ғилми-тикшеренеү, ижтимағи, мәҙәни-ижади һәм спорт эшмәкәрлегендә айырым ҡаҙаныштарҙы раҫлаған документтар күсеү өсөн яҡшы бонус буласаҡ. Икенсе вуздан бюджет урындарына күсеү ҙә мөмкин. Әммә был осраҡта академик айырманы, йәғни элекке юғары уҡыу йортонда өйрәнелмәгән йәки аҙыраҡ күләмдә өйрәнелгән фәндәр буйынса имтихан бирергә кәрәк булыуы ихтимал. Университетта пилотлыҙ техника проектлауҫылар, виртуаль симуляторҙар һәм компьютер уйындары инженерҙары, стартап менторҙары һәм башҡа белгестәр әҙерләнә. Күп функциялы студенттар офисы адресы: 450008, Өфө ҡалаһы, К.Маркс урамы, 12, 7-се корпус. Телефон: 8-908-350-50-39, 8-908-350-50-29; Электрон почта: mfso@ugatu.su

✓ **Башҡортостанда ҡыҙылса осрағы теркәлгән. Роспотребнадзорҙың республика идаралығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, сир Тажикстандан килгән балала асыҡланған.** Уға ошо инфекцияға ҡаршы прививка яһалмаған булған. "Эпидемиологтар бәйләнештә булған кешеләрҙе асыҡланы, уларҙың барыһына ла иммунизация үткәрелде. Бәйләнештә булғандар медицина күҙәтеүе аҫтында. Эпидемиологик тикшереү дауам итә, хәл контролдә тотола", - тип белдерҙеләр республиканың күҙәтеү ведомствоһында. Ҡыҙылса - үтә йоғошло инфекция, ауырыу менән бәйләнешкә ингән осраҡта 100 процент осраҡта тиерлек йоға. Был сирҙән берҙән-бер һаҡланыу сараһы - 1 йәштә вакцинация һәм 6 йәштә ревакцинация. 2023 йылда илдең 12 субъектында ҡыҙылса осраҡтары теркәлгән. Күпселеге - Новосибирск, Һарытау, Һамар өлкәләрендә һәм Дағстан Республикаһында.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Татлы борос

❖ Татлы борос һутына яртылаш кишер һуты ҡушып сәс һәм тырнаҡ үҫеше, үҫмерҙәрҙең бите бозолғанда, арпа сыҡҡанда, тире төҫөн нормаға килтереү һәм йыуан эсәк эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн эсергә. Һутты ас ҡарынға көнөнә 1 тапҡыр сирек стакан эсергә. Хәл ныҡлап яҡшырғанға тиклем дауаланырға.

## Ҡарағай

❖ Иван Купала көнөндә йыйып алынған 10-12 тубырсыҡҡа 1 литр араҡы ҡойоп, 7-19 көн төнәтергә. Гипертония булғанда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ төнәтмәне һыуға ҡушып 1,5-2 ай дауамында эсергә. Ҡан баҫымын өҙәйлы ваҡытҡа тотороҡлай. Әйткәндәй, был төнәтмә гастриттан да файҙалы: ашарҙан алда эсергә кәрәк.

❖ 5 ҡалаҡ яңы ҡарағай ылыҫы, 2 ҡалаҡ гөлйемеш (тромбофлебит булһа - энәлек), 2 ҡалаҡ һуған ҡабығына 0,1-1 литр һыу ҡойорға. Ҡайнап сыҡҡас, тағы 10 минут тоторға һәм йылыға төрөп төнгөлөккә ҡалдырырға. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләп эсергә. Был тарҡау склероз, миопатия, баш мейеһе ҡан тамырҙары дистонияһы, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан дауа.

## Кейәү үләне

❖ Инсульт кисергәндә 8 ҡалаҡ үләнгә 0,5 литр араҡы нисбәтенән сығып төнәтмә әҙерләргә. 14 көн төнәтергә. Шуның менән төндең ойоған өлөшөн көн һайын ыуырға. Бер үк ваҡытта төнәтмәнең 30-40 тамсыһын көнөнә 3 тапҡыр эсергә лә була.

❖ Ашҡаҙан яман шеше булғанда 1 ҡалаҡ кейәү үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда сирек стакан эсергә.

## Ҡайын

❖ Шәкәр диабетынан 2-3 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөнә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 6 сәғәт төнәтергә. Тәүлек эсендә эсеп бөтөргә. Был рәүешле 1-2 аҙна, ҡанда шәкәр кимәле түбәнәйгәнсе дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Мин, мәсәлән, "Принимать внутрь - опасно!" тип тышына ҙур итеп яҙылған шыйыҡсаны эсеп үлгән кешеләрҙең үлемендә был дарыуҙы яһаусы һәм уны һатыусыларҙы ғәйепләүҙе мәғәнәһеҙлек тип һанайым.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Ҡор



Оҙаҡ ваҡыт ныҡыҡан традиция буйынса башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары тағып йөрөгән биҙәүестәрҙең айырым төрҙәрендә ҡорҙар һаны төрлөсә була. Мәсәлән, ололарҙың һөйләүенсә, селтәрҙәге ҡорҙар дүрттән артырға тейеш түгел. Беренсе фотонан күренеүенсә, селтәрҙең уртаһынан үткән горизонталь тәңкәләр рәте тап дүртәү.



Ә бына Учалы районындағы яғаларҙа алтынан алып ун дүрткә тиклем барып етергә мөмкин.

Мәғлүмәттәр аҙ булыу сәбәпле, үкенескә күрә, ҡорҙар һанындағы айырмаларҙың нигеҙендә нимә ятҡанлығын теүәл генә асыҡлауы ҡыйын. Әйтергә кәрәк, ҡор һүҙе айырым төбәктәрҙә шулай уҡ камзулдағы тәңкәләр рәтен дә белдереү өсөн ҡулланыла. Был үҙенсәлекте, мәсәлән, Учалы районында күҙәтергә мөмкин. Этнографияла "күбәләк камзулы" тигән атама аҫтында билдәле булған кейем төрөндә тәңкәләр айырыуса күп урынды алып тора. Был өлгөлә дүрт йөҙҙән ашыу тәңкә ҡулланылған.



Шулай итеп, биҙәүестәрҙәге тәңкәләрҙән торған горизонталь рәттәрҙең һаны осраҡлы рәүештә генә билдәләнмәй. Оҙайлы ваҡыт эсендә һәр бер төбәктә үҙенә генә хас булған традициялар барлыҡҡа килгән. Хәҙерге көндә биҙәүестәрҙең традицияларын тергеҙеү өҫтөндә эшләгән ваҡытта был үҙенсәлектәрҙе иғтибарҙан ситтә ҡалдырырға ярамай.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

---

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЕР ТЕТРӘГӘНДӘН ҺУҢ..

## ғәйеплеләрҙе эҙләү кәрәкме?



**(Башы 3-сө биттә).**

Әлбиттә, һүҙем әйбер урлаған, кеше ҡыйырһытҡан йә үлтергән, йорт-ҡаралтыһын үртәгән һымаҡ анығ осраҡтар хаҡында бармай. Һәр төрлө террор акттары яһаған, әллә күпме миллион урлап йә ришүәт алып тотолған әшәке кешеләрҙең эштәре тураһында ла түгел. Бынан тыш, берәй заводтан сыҡҡан зарарлы һыуҙы йылғаға ағыҙып, балыҡтарҙың, хайуандарҙың, кешеләрҙең ағыуланыуына килтергән, метил спиртынан эсемлек яһап, тышына "араҡы" тип яҙып һатыу һымаҡ енәйәт эштәре ҡылынған осраҡтарҙа ла, һис һүҙһеҙ, ғәйепле кешене тотоп, уны тейешенсә яуапҡа тарттырыу мотлаҡ. Һәм шулай итәләр ҙә: эш боҙоусыны, енәйәтсене тейешле органдар кисекмәҫтән эҙләп таба. Ә ниндәйҙер бүтән төрлө, анығ берәүҙән тормаған бәхетһеҙлек килә икән, бына шунда килеп тыуа ла инде, урыҫтар әйтмешләй, "Кто крайний?" тигән һорау.

Бер нисә йыл элек гәзитебеҙҙә "Йөйһөҙ ерҙән йөй эҙләү" кәрәкме, йәки Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр хаҡында фәлсәфә" тип аталған мәҡәләм сыҡҡайны. Телетапшырыуҙарҙы даими ҡарап барған кеше булараҡ, тәбиғәт катаклизмдарынан йә башҡа берәй ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән һуң башланған бына шундай эштәргә гел генә иғтибар итәм. Берәй өлкәлә көндәр кинәт йылынып, ҡар шәпләп ирей китә икән, яҙғы ташҡын һыу өйҙәрҙе, кәртә-ҡураны баҫыуы мөмкин. Әммә, шул бәлә-ҡазаны алдан күҙаллап, хәстәрлек саралары күрмәгән әлеге "крайний" кешенең табылыуы минә, мәсәлән, барыбер аңлашылып етмәй. Ҡар күп яуған райондарҙың береһендә, көрттә соҡоп уйнап, ишелеп төшкән ҡар аҫтында ҡалып фажиғәгә юлыҡҡан бала өсөн дә бер нисә йыл элек кемдәлер ғәйепләргә йыйыналар ине, буғай. Бала сағыбыҙҙа ни, беҙ ҙә шундай ҡар мөмәрйәләре яһарға яратыҡ ул. Бәлә-ҡазаны иҫкәртеү ниәтендә илдәге бөтә ҡар өйөмөн ҡайҙалыр ҡырға ташып сығарып бөтөү һәр саҡ мөмкин дә түгелдер тип һанайым. Уның менән генә кемдәндәр башына төшәсәк бәләне алдан күҙаллап, иҫкәртеп булмайҙыр. Был өлкәлә иң тәү нәүбәттә ата-әсәнең үҙ балаһына иғтибарлыраҡ булыуы зарур, минеңсә.

Хәтерләйһегеҙҙер, нисәләр йыл элек тәнгә һөртә торған "Энәлек" төнәтмәһен эскән һикһәнләгән кеше үлемендә ғәйепләп, һатыусыларҙы яуапҡа тарттырыуҙар хаҡында шау-шыу булып алғайны. Уға ҡалһа, магазин кештәләре тулып торған "сифатлы" араҡы эсеп тә йыл да әллә күпме менәрләгән кеше үлә. Тик был, ни өсөндөр, нормаль күренеш һанала. Мин, мәсәлән, "Принимать внутрь - опасно!" тип тышына ҙур итеп яҙылған шыйыҡсаны эсеп үлгән кешеләрҙең үлемендә был дарыуҙы яһаусы һәм уны һатыусыларҙы ғәйепләүҙе мәғәнәһеҙлек тип һанайым. Ундай кеше үҙ үлемендә фәҡәт үҙе генә ғәйепле, тигән инаныуҙамын. Бындай саралар берәй ерҙә яңғын сыҡҡан өсөн шырпы заводы директорын йә һатыусыларҙы язаға тарттырыу һымағыраҡ тойола башлай.

Ҡырҡ беренсе йыл Гитлер Германияһы һөжүм асҡас, баштараҡ Ҡыҙыл Армияның ваҡытлыса уңышһыҙлығында туранан-тура ғәйепләнеп, әллә күпме юғары хәрби начальниктар - тәжрибәле генералдарҙың атылыуы хаҡында ишеткәнегеҙ барҙыр. "Һөжүм итмәү хаҡындағы пакт" ("Пакт о ненападении") килешеүен боҙоп, аңғармаҫтан ябырылған фашист армадаһын ҡапыл да туҡтата алмаған өсөн ғәйепләнде улар. Бәлки, ҡорал, боеприпастар етмәү сәбәпле күпләп ҡырылыуҙан һалдаттарын ҡурсалап ҡалыу ниәте менән сигенергә мәжбүр булған өсөн язаға тарттырылған шул юғары офицерҙарҙы мин үҙем шәхсән "нахаҡҡа ғәйепләнгән" тип һанайым. Урыҫта ошоноң һымаҡ сараларҙы "убырҙарға һунар" ("охота на ведьм") тип шартлы атауҙарҙы ишеткәнем бар. Элегерәк, оҙайлы хеҙмәт иткән дәүеремдә шундай осраҡтар тик беҙҙең армияла ғыналыр, тип уйлай торғайным. Илебеҙ тененең айырым алып булмаҫлыҡ бер ағзаһы булған элекке әрмебеҙҙә бындай миҫалдар етерлек ине шул. Хәрби табип булараҡ, һәр саҡ тиерлек шундай хәл-ваҡиғаларҙың шаһиты булыу ғына түгел, уларҙың уртаһында ла йөрөргә тура килде. Әммә, "ғәйепһеҙгә ғәйеплеүҙәргә" сирек быуат дауамында ла күнегеп китә алманым һәм быға гелән тәнҡит күҙлегенән сығып ҡараным. Утыҙҙан ашыу йылдар элек булған шундай осраҡтар һаман хәтерҙә әле.

...Беҙҙең ракета дивизияһы полктарының береһенән кискә ҡарай госпиталгә бер һалдатты алып киләләр. Табиптар тикшереп, был егеткә ҡорһаҡ тифы ("брюшной тиф") тигән диагноз ҡуя. Әрме коллективында бындай сир табылыу осрағы ғәҙәттән тыш хәл булып һанала. Был ауырыуҙы дауалау - табип-инфекционист эше. Һалдатты инфекция бүлегендәге махсус изоляторға урынлаштырғас, табип дивизияның эпидемиологына шылтырата. Эпидемиолог вазифаһын үтәүсе медицина майоры И. (әйткәндәй, ул - беҙҙең яҡташ) шунда уҡ госпиталгә килеп, "эпид анамнез" (сирҙең ҡасан һәм ҡайҙан йоҡҡанлығын билдәләү) төҙөй, был ауырыуҙың Урта Азия республикаларының береһендә отпуск мәлендә йоҡтороп алып килеүен асыҡлай. Ир-тәгәһен таң менән хәрби ҡаласыҡтан утыҙлап саҡрым арала ятҡан полкка килә һәм подразделениеларҙа тейешенсә дезинфекция, сирле менән контактта булған һалдаттарҙы карантинлау эше һымаҡ саралар ойоштора. Бәхеткә, башҡаса ауырыусылар табылмай. Бер айҙан һуң карантин режимын туктаталар. Минең уйымса, йәғни, ябай табип фекерләүенсә, эш бына ошоноң менән генә тамамланырға тейеш. Әммә оҙаҡламай дивизиялағы шул тиф осрағы буйынса часҡа юғарынан фарман килеп төшә: "...Разобраться... Выявить виновного... Наказать... Копию приказа о наказании направить на имя..."

Өҫтән төшөрөлгән шул бойороҡто үтәү буйынса часта әүҙем эш башлана. Табиптарҙы (улар - һәммәһе лә офицер) "Офицерҙар йыйылышы"на йыялар. Командирҙарҙың кемдән "крайний"ҙы яһарға көйләнгәнлеге көн кеүек асыҡ. Әлеге яҡташыбыҙ - эпидемиолог саманан тыш йыуаш, үҙен әллә ни яҡлаша алырлыҡ хәлдә лә түгел. Урыҫса ла бигүк оҫта һөйләшмәй (татар телле мари егете ине). "...Ни өсөн шул кистә үк полкка бармай, тик иртәгәһен генә барҙығыҙ, иптәш майор, һәм ни өсөн юғарыға шунда уҡ доклад яһаманығыҙ?" - тигәндән башланып киткән һәм башҡа урынлы-урынһыҙ һораүҙар менән күмеләр майорҙы, "утлы табала" ҡыҙҙырҙылар, тағы ла ниндәйҙер "гонаһ"тарын иҫләнеләр. Сығырға тейешле бойороҡ барыбер сыҡты: "...наказать майора медицинской службы И..., объявить..." Һалдаттарҙың сирләп китеү ихтималлығын да тормошта була торған тәбиғи хәл тип ҡабул итергә кәрәк ине лә бит. Тик, ниһәлер, бының өсөн кемгәлер мотлаҡ яза биреү мөһим... Көҙ, ҡыш миҙгеле еткәс, һалдат һәм офицерҙар киҙеү (грипп) менән күпләп сирләй башлаһа ла, "ғәйепле" офицерҙы шунда уҡ таба һалып, уға тейешенсә яза бирелә торғайны...

...Әлеге фажиғә кисергән илдә лә әбер-береһен батырғылап, кемгә ниндәй яза биреү яғын ҡарарға тотоноу урынына киләсәктә төҙөлә торған һәр бер яңы йорттоң тетрәүҙәргә бирешмәй торған конструкциялы итеп һалыу юҫығын хәстәрләй башлау етер ине, минеңсә. Был донъялағы ҡатмарлы тормошобоҙ шулай ҡоролған: һәр кешенең ғүмерен уңышлыҡтар һәм уңышһыҙлыҡтар оҙатып бара. Бизмәнгә һалып үлсәү мөмкин булған хәлдә, уларҙың сағыштырмаһы, ысынында, типәтиң генә булыр ине. Тик Аллаһы Тәғәлә беҙҙең өсөн ебәргән һәр һынауҙы әҙәм балаһы фәҡәт үҙ үлсәме менән генә үлсәп, үҙ күҙлегенән сығып баһалай. Шуның өсөн дә беҙ Раббыбыҙ тарафынан бирелгән һанһыҙ ниғмәттәрҙе күпселек ваҡытта һиҙмәйбеҙ, күрмәйбеҙ, хатта күрмәмешкә һалышабыҙ. Үҙебеҙгә бүләк ителгән ғүмеребеҙ, һаулығыбыҙ, балаларыбыҙ, яҡындарыбыҙ, эшебеҙ, дәрәжәләребеҙ, йортобоҙ, малмөлкәтебеҙ, башҡа бихисап байлығыбыҙ өсөн Уға шөкөр итеп, зекерҙәр әйтеп, баш эйеп йәшәргә һәр саҡ онотабыҙ, шуның менән үҙебеҙгә үҙебеҙ золом (ғәҙелһеҙлек) ҡылабыҙ. Ә ниндәйҙер берәй бәлә-каза, юғалтыуға юлыҡһаҡ, уның беҙгә ебәрелгән һынау икәнлеген дә күптәребеҙ танымай, шунлыҡтан быны ифрат та ауыр кисерәбеҙ ("Бәлә" һүҙе ғәрәпсәнән урыҫ теленә - "испытание, беда", тип тәржемәләнә). Йығылыр урынды гел генә алдан белеп, унда һалам түшәп ҡуйыу - мөмкин түгел бит.

Һәммә хәл-ваҡиғаға реаль тормош нескәлектәрен иҫәпкә алып, объектив күҙлектән сығып ҡарап, кешеләр бер-береһенә һәр саҡ яғымлы булып, ғәҙел мөғәмәлә ҡылһа, кемдер әйтмешләй, "калай һәйбәт булыр ине". Элек "коммунизм" ваҡытында иғлан ителгән, әммә тормошҡа ашырыла алмаған "Кеше кешегә - дуҫ, иптәш һәм туған!" тигән лозунг хәҙерге ваҡытта ла тап-таман ғына булып ҡалыр ине лә бит. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

✓ *Ул замандағы Евразияның ярлылары һәм байҙары араһындағы ижтимағи контрастың ҡәберҙәрҙәге табылдыҡтар составын сағыштырғанда тағы лы нығыраҡ характерлы булыуы асыҡлана.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе кисәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



### Дах-сак-массагеттарҙың һәм исседондарҙың йәмғиәт ҡоролошо һәм тарихи яҙмышы

Был мәсьәләләр тарих фәнендә әлегә бик аҙ өйрәнелгән, әммә уларҙы объектив реконструкциялау Көньяҡ Урал ҡәбиләләрендә артабанғы дәүерҙәрҙә, XVII-XVIII быуаттарға тиклем үк, йәмғиәти тормош үҫеше үҙенсәлектәрен аңлау өсөн үтә мөһим булып тора. Әле күптән түгел боронғо дәүер тарихсылары араһында дах-массагеттар йәшәгән төбәктәр ҡәбиләләре йәмғиәтенең типик ырыу-патриархаллеге хаҡындағы фекер таралған ине. Ошо ҡарашҡа ярашлы, йәмғиәт нигеҙен башында юлбашсы торған бер нисә ҡәрҙәш ғаилә коллективы хасил иткән. Ырыуҙың үҙе көн иткән уртаҡ территорияһы, малтыуары һәм башҡа төрлө байлыҡтары коллектив милек (ырыу милеге) тип иҫәпләнгән. Бер нисә ҡәрҙәш ырыу коллективтары ҡәбилә булып берләшә, ҡәбиләләр, үҙ сиратында, һайлап ҡуйылған етәксе-юлбашсылары булған союздарға инә. Тикшеренеүселәр, Көньяҡ Уралдың иртә малсыларының ижтимағи тормошон ошо рәүешле реконструкциялауға баҫым яһауҙарына ҡарамаҫтан, айырыуса ике моментты иғтибарға ала: а) халыҡтың төп өлөшөнә аныҡ билгеле хәрби-атлы йәшәйеш рәүеше хас булған, шуға күрә ғалимдар төбәк ҡәбиләләре яугир-һуғышсыларҙан торған айырым төркөмдәр бүленеп сыға барған стадияла, йәғни ырыу ҡоролошоноң тарҡалыш кисереүе стадияһында булған, тип иҫәпләй (хәрби демократия эпохаһы); б) уларҙа, Түбәнге Волга буйы, Төньяҡ Ҡара диңгеҙ алды, Көньяҡ Себер һәм Ҡаҙағстан күскенселәре менән сағыштырғанда, ырыу ҡоролошо ҡалдыҡтары көслөрәк булған. Тәүләп ошо фекерҙе тарихсы Б.Н. Граков аныҡ билдәләй, уны башҡа бер тарихсылар ҙа хуплай. Һуңғы йылдарҙа сыҡҡан хеҙмәттәрҙә лә ошо фекер сағылыш тапты.

Тарихи факттар туплана барыу менән ошондай реконструкцияның примитив характерҙа булыуын Көнсығыш Европаның көньяғында әле ҡалған дәүерҙә малсылыҡ менән шөғөлләнгән ҡәбиләләрҙең тарихы һәм мәҙәниәте буйынса иң абруйлы белгес К.Ф. Смирнов таныҫға мәжбүр була. Ул, ошо ҡәүемдәр йәмғиәтенең ижтимағи яҡтан ныҡ дифференциацияланған булып, Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйы скифтары йәшәгән барса урындарҙа һәм Ҡаҙағстан сактарындағы кеүек үк, уларҙа ла инде ырыу юлбашсыларының ижтимағи ҡатламы, культ йолаларын үтәүсе үҙ ҡулына алған жрецтарҙың, яугир-дружинниктарҙың һәм уларҙың башлыҡтарының, ер һәм малға эйә булған эре милекселәрҙең бүленеп сығыуы күҙәтелә. Ул ырыу-ҡәбилә коллективтары эсендә төрлө ижтимағи төркөмдәр булыуы үлгәндәрҙе ерләүҙең төрлө формаларын барлыҡҡа килтергән, тип иҫәпләй, һәм ҡәбер типтарының, ҡурған өйөмдәренең һәм мәйеттәр янына һалынған инвентарҙың төрләнгән шуның менән аңлата.

Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең ижтимағи мөнәсәбәттәре үҫешенә, ғалим фекеренә ярашлы, уларҙың Урта Азия, Яҡын Көнсығыш илдәре, иң элгәре Боронғо Фарсы менән әүҙем сауҙа һәм сәйәси бәйләнештә йәшәүе хәл иткес йоғонто яһаған. Боронғо яҙма сығанаҡтар мәҙәниәттәре һәм сығыштары буйынса Көньяҡ Урал дах-массагеттарына һәм исседондарға ҡәрҙәш булған Волга буйының һәм Төньяҡ Ҡара диңгеҙ алдының, Ҡаҙағстандың һәм Урта Азияның күскенсе ҡәбиләләренең эре союздарға берләшеүен асыҡтан-асыҡ күрһәтә, хәҙерге тикшеренеүселәр уларҙы үҙенсәлекле күсмә дәүләти берләшмәләр, тип классификациялай. Мәҫәлән, б.э. тиклем 512 йылда скифтар һәм фарсылар араһында һуғыш башланыуы киң билдәле, ул фарсыларҙың башында Дарий I торған бик ҙур армияһының Төньяҡ Ҡара диңгеҙ алдына (Скифтар иленә) баҫып инеүе менән бәйле. Скифтарға күрше ҡәүемдәрҙең үҙ батшалары етәкселегендәге ғәскәрҙәре ярҙамға килә. Ошоға икенсе бер асыҡ миҫал итеп сак-массагеттарҙы килтерергә була: улар үҙҙәренең Томирис исемле батшабикәһе етәкселегендә Дарий I атаһы Кир II ғәскәренә ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтә һәм уны б.э. тиклем 530 йылда барған яуҙарҙың береһендә үлтерә.

Евразия далаларының малсы күскенселәре йәмғиәтенең синфи характерҙа булыуы хаҡындағы материалдар археологик ҡомартҡыларҙы ҡаҙып тикшереү барышында табыла. Айырым алғанда, Ҡаҙағстандың төрлө райондарында (Бесшатыр) һәм Көньяҡ Себерҙә (Аржан, Пазырык, Ҙур Салбыҡ) үлсәмдәре яғынан үтә ҙур (диаметры уртаса 80 - 110 м, бейеклеге 8 - 10 м) ҡурғандар ҡаҙып асылған, улар урындағы батшалар һәм ырыу-ҡәбилә аҡһөйәктәре ҡәберҙәре өҫтөнә өйөлгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ошондай ҡурғанды ҡороуға сарыф ителгән кеше хеҙмәтенең күләме ябай күскенсе-малсы ҡәбере өҫтөндәге ҙур булмаған ҡурғандыҡынан мең мәртәбәгә артығыраҡ.

Ул замандағы Евразияның ярлылары һәм байҙары араһындағы ижтимағи контрастың ҡәберҙәрҙәге табылдыҡтар составын сағыштырғанда тағы лы нығыраҡ характерлы булыуы асыҡлана. Ябай малсы ҡәберҙәрендә улар йә бөтөнләйгә булмай, йә иһә аҙ ғына көҙәнге предметтарҙан - бер йә ике балсыҡ һауыттан, уҡ башаҡтарынан, хәнйәрҙән һәм ит аҙығы ҡалдыҡтарынан тора. Ә бына аҡһөйәктәрҙең ҡәберҙәрендә иһә алтын һәм көмөш әйберҙәр күпләп табыла. Ошо йәһәттән Алматы ҡалаһынан йыраҡ булмаған урында ҡаҙып асылған "Иссыҡ" ҡурғаны айырыуса иғтибарға лайыҡ, ул б.э. тиклем V-IV быуаттарҙа сак ҡәбиләләренең бер төркөмөнән тороп ҡалған. Диаметры 60 м, бейеклеге 6 метр булған ҡурған бик арҙаҡлы кешене ерләү өсөн ҡоролған, әммә уның ҡәбере замандаштары тарафынан тулыһынса таланған. Уның ни тиклем бай булыуы хаҡында ҡурған итәге аҫтындағы, үҙәк ҡәбер менән сағыштырғанда, икенсел әһәмиәттәге тип иҫәпләнгән ҡәбер белдереп тора. Бында күскенселәрҙең аҡһөйәктәре төркөмөнән булған йәш ир ҡалдыҡтары табыла. Мәйеттең баш кейеме, кафтаны, аяҡ кейеме (итектәре) тегелеп беркетелгән меңәрләгән алтын пластиналар менән тоташ биҙәлгән була, шулай уҡ ҡоралы, бил ҡайышы ла алтын менән биҙәүле, башҡа биҙәүестәре лә алтындан яһалған. Бында барлығы 4 меңдән ашыу алтын предмет табыла. Унан башҡа, ҡәберҙә балсыҡ, бронза, ағас һауыттар, ағас батмустар күп була. Евразия далаларының йөҙәрләгән ҙур ҡурғандарына шундай уҡ һанап бөтөрлөк булмаған хазиналар күмеп ҡалдырылыуы хаҡында фекер йөрөтөп була, тик, ҡыҙғанысҡа күрә, уларҙағы әйберҙәр таланып алынып бөткән, һәм элекке иҫ киткес бай инвентарҙан фән ҡарамағына берәм-һәрәм генә тороп ҡалғандары эләгә.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# ҠӘМӘР БИЛБАУ



**Башҡортостан Милли музейында келәм нигеҙендәге биш билбау - ҡәмәр һаҡлана. Бөгөнгө һүҙебеҙ ОФ 3272 иҫәп тамғаһы аҫтында һаҡланған, айылдар (бляхи) һәм ҡаптырмалар менән биҙәлгән ҡәмәр тураһында.**

Уның оҙонлоғо электерелгән килеш 90 см, киңлеге 6,5 см. Ҡәмәр геометрик биҙәкле ебәк ептәрҙән торған келәм нигеҙендәге туҡыманан тегелгән. Биҙәк миләүшә төҫлө фонда ҡыҙғылт һары төшөрөлгән ромб һәм уктан тора, өҫтән һәм аҫтан зәңгәр фондағы ҡыҙғылт һары, аҡ, аҡһыл көрән һыҙатлы һәм таҫмалы геометрик биҙәк менән ҡайылған.

Ҡәмәрҙең икенсе яғында эслек бар. Декоратив элементтар һәм ҡаптырма кейеҙ бау менән нығытылған. Ул музейға 1927 йылда Өфө кантоны Ҡырмыҫҡалы өйөҙөнә ҡараған Ибраһим ауылында йәшәүсе Өмөтбаевтан һатып алынған.

Бөгөнгө көндә ҡәмәрҙе "Башҡорт халҡы этнографияһы" экспозицияһында "Байрам кейеме" залында күрергә була.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

**Хәрби белемле һәм тәжрибәле башҡорт офицеры, 58-се гв. атлы полкы командиры, гв. подполковнигы Кусимов Таһир Таип улы Днепрҙағы хәрби операцияны ғәмәлгә ашырғанда айырыуса тәүәккәл эш итә, уның яугирҙары дивизияның ғына түгел, бар корпустың ошо яуҙарҙа уңышҡа өлгәшеүенә иҫ китмәле ҙур өлөш индерә.** Т.Т. Кусимовты юғары дәүләт наградаһына тәҡдим итеү ҡағыҙында ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "Тыуған йылы 1909, башҡорт, 1932 йылдан бирле ВКП(б) ағзаһы, Ватан һуғышы фронтында 1942 йылдың апреленән бирле. Ике тапҡыр яраланған. Ҡыҙыл Армияла 1928 йылдың сентябренән, кадровый офицер. Элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнгән (1942 й.). Шәхси батырлығы йә иһә ҡаҙаныштары хаҡында ҡыҫҡаса шулар: 26 сентябрҙә полкы менән Днепрға килеп етә, Дымарка һәм Неданчичинан көнбайыштараҡ полкын йылға аша сығара, 2,5 км киңлегендә плацдарм ала, бының менән дивизияның башҡа частарын сығарыу өсөн шарттар булдырҙы. Шәхси, ат составында һәм техникала әллә ни юғалтыуҙар булмаған хәлдә дошманға тәүәккәл һәм сая һөжүм итте..." Был документҡа дивизия командиры, гв полковнигы Белов ҡул ҡуйған. Корпус командиры, гв. генерал майоры М.Ф. Малеев наградаға тәҡдим итеү документына ошондай юлдарҙы өҫтәп яҙған: "Гв. подполковнигы Кусимов 1943 йылдың 18 сентябренән бирле барған алыштарҙа 19 торлаҡ пунктын алды, Десна, Снов, Сосница һәм айырыуса Днепр йылғалары аша уңышлы сығаалды, бигерәк тә Днепрҙы беренсе булып, үҙҙәре яһап алған средстволарҙы ҡулланып сыҡты, шуның менән дивизия бурыстарын үтәүҙе тәьмин итте, шул саҡта шәхсән батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, героизм күрһәтте. Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡлы". Билдәле булыуынса, дивизия командиры Г.А. Беловҡа һәм полк командиры Т.Т. Кусимовҡа Советтар Союзы Геройы исеме 1944 йылдың 15 ғинуарында илдең Юғары Советы Президиумы Указына ярашлы бирелә.

1944 йылдың яҙында, 16-сы гвардия атлы дивизияһы Владимир-Волынский ҡалаһы янындағы яуҙарҙа ҡатнашҡан ваҡытта, Т.Т. Кусимов кавалерия командующийы, маршал С.М. Буденный тәҡдиме менән М.В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияға уҡырға ебәрелә. Ошо академиянан башҡа Таһир Кусимов 1951 йылда Генераль штабтың Хәрби академияһын да тамамлай. Һуғыштан һуң ул бер дивизияның штаб начальнигы, дивизия командиры вазифаларында хеҙмәтен дауам итә, армия корпусы командиры урынбаҫары итеп үрләтелә. 1963 йылдан 1969 йылға тиклем Башҡорт АССР-ның хәрби комиссары була. Уға 1969 йылда генерал-майор званиеһы бирелә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✔ ***Университетта хәҙер өсөнсө курстан һуң студент икенсе йүнәлеште үҙе һайлай ала. Мәсәлән, филология факультетында уҡып, өсөнсө курстан һуң икенсе профиль, хатта өсөнсө профиль алырға мөмкин.***

# АҠМУЛЛА ИСЕМЕНӘ

## уҡыу йортоноң

**Ошо көндәрҙә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты үҙенең 30 йыллығын билдәләне. 1978 йылдан уҡ уҡыу йортонда башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары әҙерләнһә лә, факультеттың тыуған көнө 1992 йылдың апреленән, айырым структура барлыҡҡа килгәндән, алып иҫәпләнә. Башҡорт теленә дәүләт статусы бирелгәс, шул уҡ ваҡытта ошо йүнәлештә уҡып йөрөгән студенттарҙың һан яғынан күп булыуы, яңы кафедралар барлыҡҡа килеүе ул ваҡыттағы институтта өр-яңы факультет формалаштырыу мөмкинлеге бирә лә инде. Был йүнәлештә иң төп эште башҡорт филологияһы кафедраһы мөдире булып эшләгән Фирҙәүес Хисамитдинова алып бара. Ошо кафедра нигеҙендә башҡорт филологияһы факультеты үҫеп сыға. Был юлы уҡыу йортоноң ошо 30 йыл эсендә башҡарған эштәре, проблемалар һәм киләсәк хаҡында факультет деканы, филология фәндәре докторы, профессор Ләйлә ХӨСӘЙЕНОВА, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире, педагогия фәндәре кандидаты, доцент Сәлимә ТАҺИРОВА, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы доценты, филология фәндәре кандидаты Зәки ӘЛИБАЕВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Әлбиттә, педагогик вуз булараҡ, республика мәктәптәренә уҡытыусылар әҙерләү эше күптән алып барыла, әммә айырым факультет эшмәкәрлеге - ул маҡсатлы йүнәлеш. Ошо осор эсендә Башҡортостандың мәғрифәтселегенә һәм фәненә факультетығыҙ ниндәй өлөш индерҙе, ниндәй ҡаҙаныштарығыҙ менән ғорурлана алаһығыҙ?**

**Ләйлә Хөсәйенова:** Педагогик вуз булараҡ, туранан-тура республика мәктәптәренә белгестәр - уҡытыусылар әҙерләү көн ҡаҙағына тура килә һәм төп маҡсат булып тора. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында республиканың һәр мәктәбе, сит өлкәләрҙә асылған милли мәктәптәр өсөн уҡытыусылар тап ошонда әҙерләнә һәм ҡабул итеү комиссияһы мәктәптәр күпләп йөшәгән өлкәләрҙән махсус рәүештә студенттар йыя, ошо төбәктәрҙә башҡорт нисә сәғәт бирелһә лә, шул программа эсенә ниндәйерәк материал индерергә, телде нисегерәк өйрәтергә - ошо үҙенсәлектәрҙе һәр хәлдә беҙҙең методистар бик яҡшы белә. Ысынлап та педагогик вуз - ҙур бер фәнни майҙансыҡ ул.

Һәм факультеттың тағы ла үҙенсәлеге - 19-сы быуаттағы мәғрифәтселәр ижадын тулыһынса тергеҙеү һәм халыҡ араһында таратыу. Был ябай ғына идея заманында кафедра мөдире Әхәт Вилдановтың кандидатлыҡ диссертацияһының төп темаһы булып тора. Ошо фәнни ҡараштан бөрөләнгән идея уҡыу йортона исем биреүгә һәм халыҡ-ара кимәлдә бөгөн Аҡмулла университеты тип аталыуыбыҙға этәргес була, бәләкәй кенә кафедрала тыуған идеяларҙың тормошҡа ашыуын раҫлаусы миҫал был. Ул исем буштан-бушҡа бирелмәгән. Бөгөн беҙ ошо XIX быуат аҙағы дә булыуы XIX быуатта мәғариф системаһының алдынғы булыуын күрһәтә. Был йәһәттән беҙҙең 30 йыл ғына түгел, хатта ул 130 йылға етерлек тәжрибәбеҙ бар. Уҡыу-уҡытыу системаһын алып ҡарағанда ла ул тап ошо ерлектән башланалыр, сөнки 1939 йылда асылған Уҡытыусылар институтының программаһы ла ошоға нигеҙләнгән. Быны ни өсөн әйтәм - беҙҙең ҙур традиция бар, ошо традицияларҙың береһен дә юғалтмайынса, артабан дауам итеү зарур. Беҙҙең педагогик вуз - ул республикала берҙәнбер педвуз һәм туранан-тура уның йүнәлеше йәки маҡсаттары педагогик кадрҙар әҙерләүгә хеҙмәт итә һәм шул уҡ ваҡытта республикаға кәрәк булған белгестәрҙе әҙерләү һәм республиканың ниндәйҙер кимәлдә туранан-тура дәүләт заказын үҫтереү буйынса төп эштәрҙе башҡара.

**Сәлимә Таһирова:** Заман ағышына тура килә тип уйлайым, сөнки Башҡортостан Республикаһы уҡытыу-методик комплекстарҙы, шул иҫәптән башҡорт теле буйынса ла, башҡорт әҙәбиәте буйынса ла тәүгеләрҙән булып Рәсәй кимәлендә реестрға индереп, тәүгеләрҙән булып раҫланған уҡытыу-методик комплекстарын тәҡдим итә. Әлбиттә, дәреслектәрҙе йыл һайын сығарып булмай, был федераль дәүләт белем биреү стандарттарына бәйле. Ошо стандарттарға ярашлы программалар һәм уҡытыу-методик комплекстар төҙөлә. Әле бөгөнгө көндә лә был өлкәлә актив эш бара, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһының өс уҡытыусыһы программалар төҙөүҙә ҡатнашты.

Ысынлап та, методика бөгөн камил, тип тынысланырға ярамай һәм бер ваҡытта ла тынысланып булмаясаҡ, сөнки ул телен туған тел булараҡ уҡытыу өсөн белгестәр әҙерләү үҙ һөҙөмтәләрен бирә. 90-сы йылдарҙа йәмәғәт башланғысындағы башҡорт теле буйынса олимпиада, башҡорт теле буйынса йыл уҡытыусыһы бәйгеһе, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү конкурсы һәм республикала булған Мәғариф министрлығы майҙансыҡтарында әҙерләнгән барлыҡ сараларҙа нәҡ беҙҙең факультет белгестәре туранан-тура ҡатнашып, артабан инде уларҙы үҫтереү буйынса үҙҙәренең өлөшөн индерә. Кадрҙар йәһәтенән мәктәптәргә генә түгел, башҡа өлкәләргә лә тәғәйен белгестәр әҙерләү һәр ваҡыт көнүҙәк булып ҡала. Әле балалар баҡсаһына белгестәр кәрәк һәм улар өсөн тәрбиәселәр, башҡорт телен белгән логопедтар һәм башҡа белгестәр әҙерләйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта башҡорт телен халыҡ-ара кимәлгә күтәреү өсөн дә ярайһы уҡ эштәр башҡарабыҙ.

**Зәки Әлибаев:** Һәм шуны ла әйтергә кәрәк: факультеттың тағы бер маҡсаты туранан-тура методик эшмәкәрлекте көҙәллай. Мәсәлән, мәктәп программаһында үтелгән барлыҡ дәреслектәрҙе алып ҡараһаҡ, һәр бер кластар буйынса ла дәреслектәр авторҙары тап бына ошо факультетты бөткән, ошо факультетта эшләп йөрөгән белгестәр. Мәктәптә туған тел булараҡ, дәүләт теле булараҡ өйрәнгән варианттарҙа башҡорт телен уҡытыуға программала - XX быуат башы мәғрифәтселәре тураһында тарихтан ғына түгел, шул ваҡыттарҙа сыҡҡан ваҡытлы матбуғат, китаптар аша бик яҡшы беләбеҙ, иҫке төрки телендә, ғәрәп шрифтында яҙылған әйберҙәрҙе әле лә табып һоҡланабыҙ икән - уларҙың, тап бына ошо университет ерлегендә һыҡлап өйрәнелеп, артабан инде фәнни тикшерелеүе, туранан-тура Аҡмулла университетына бәйле һәм был беҙгә, университеткә, факультетка халыҡ-ара кимәлгә сығырға мөмкинлек бирҙе. Беҙ әлеге ваҡытта Аҡмулла конференцияһын, симпозиумдарҙы халыҡ-ара кимәлдә үткәрәбеҙ, уларҙа сит илдәрҙән бик күпләп ҡатнашалар, сөнки мәғрифәтселек ул һәр бер халыҡ өсөн үтә торған этаптарҙың береһе. Ошо йәһәттән инде беҙҙең XIX быуаттағы көслө мәғрифәтселек мәктәбен айырым шәхестәр тип кенә ҡарарға ярамай, йәғни XIX быуатта барлыҡҡа килгән уҡыу-уҡытыу системаһы көслө булған һәм беҙ ябай ғына мәҙрәсә тип ҡараған уҡыу йорттары - бөйөк уҡыу йорттары булған. Ошо күҙлектән сығып, хәҙерге көндә тотош университет буйынса "Акмулловедение" курсы уҡытыла һәм унда башҡорт мәғариф системаһының нигеҙҙәре һәм ни өсөн уның сит төбәктәрҙә - Урта Азия республикаларын һәм Кавказды йәлеп итә алыуы өйрәнелә. Ошо методиканың тотош башҡорт ерлегендә

**Дәүләт заказы тигәндән, был бөгөн иң актуаль мәсьәлә, сөнки ауылдарҙа мәктәптәрҙә балалар һаны әҙ, йылдан-йыл кәмей һәм бер уҡытыусы бер нисә предметты уҡыта...**

**Зәки Әлибаев:** Университетта хәҙер өсөнсө курстан һуң студент икенсе йүнәлеште үҙе һайлай ала. Мәсәлән, филология факультетында уҡып, өҫтәмә биология уҡытыусыһы булырға теләйһең икән, өсөнсө курстан һуң икенсе профиль, хатта өсөнсө профиль алырға мөмкин. Шуға беҙ профилдәрҙе киңәйтергә тырышабыҙ, быға бер кем дә ҡаршы килмәй.

Ике профиль - бушлай уҡытыла һәм уларҙың стандарт сәғәт һандары билдәле. Өсөнсө һәм дүртенсе профилде алырға теләүселәр булһа - улар түләүле һәм база белеме ҡабатланмай, ә һин махсус ошо йүнәлеш буйынса ғына белем алаһың. Профилдәр гуманитар өлкәгә генә ҡағылмай, хатта физкультура уҡытыусыһы йәки ер ҡорололошо буйынса белгес һөнәрен дә һайлау мөмкинлеге бар.

**Бөгөнгө көндә бик йыш, методикалар иҫкергән, дәреслектәр иҫкергән, тигән зарланыуҙар ишетелә. Ул дәреслектәр әҙерләү, методика эшләү бөгөнгө заман ағышы темпына өлгөрәме, әллә һуңлабыраҡ барлыҡҡа киләме? Ни өсөн шундай ҡапма-ҡаршылыҡтар килеп сыға?**

шуныһы менән дә ҡыҙыҡлы фән - заман, сәйәсәт, стандарттар, ҡанундар менән бергә үҙгәреп тора. Студенттарға ла, кисә актуаль булған ысулдар һәм технологиялар бөгөн бик актуаль булмаҫҡа мөмкин, шуға күрә уңышлы юлдарҙы өйрәтергә һәм һөҙөмтәгә алып килергә тейеш икәнлегебеҙҙе аңларға бурыслыбыҙ, тип уҡытабыҙ. Беҙҙә методика уҡытыуға элек-электән игтибар ҙур булды. Мәсәлән, 1995-1996 йылдарҙа уҡыу пландарына ярашлы, 4-6 ай педагогик практикалар була торғайны. Был студенттарға шул осорҙа эш башлап, үҙҙәренең районында эш урынын табып, хеҙмәт кенәгәһен астырып, бер ни тиклем тәжрибә туплап, мин дә мәктәптә эшләй алам, тигән ышаныс ярларға мөмкинлек бирелә ине. Бөгөн дә практикалар байтаҡ, әлбиттә, әммә улар бүлгеләнгән, шуға күрә уларҙы оҙайлы итеп биреү мөмкинлеге юҡ һәм хәҙерге уҡыу пландарының үҙенсәлеге ошонда: беҙ РФ Мәғариф министрлығына ҡарайбыҙ һәм бөтә педагогик вуздар кеүек "Педагогик белем биреү үҙәге" ("Ядро педагогического образования") тигән методик тәҡдимдәргә ярашлы, бер системаға килтерелгән, берләштерелгән уҡыу пландары менән эшләй.

**Зәки Әлибаев:** Тағы бер өҫтөнлөгөбөҙ - доцент Вадим Толомбаев цифрлаштырыу аша башҡорт телен өйрәтеү буйынса махсус курстар үткәрә. Үҙе ошо йүнәлештә магистратура тамамлап, әлеге ваҡытта, мәсәлән, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыу процесында нисегерәк итеп хәҙерге заман технологияларын ҡулланырға өйрәтә. Уның республикала, сит төбәктәрҙә үткәргән курстарына бик теләп яҙылалар. Был башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуға сәғәттәр әҙ бирелгән, шулай уҡ китаптар етешмәгән, башҡа төрлө проблемалар булған ваҡытта бик актуаль.

Университет үҙе айырым, мәғариф системаһы үҙе айырым йәшәмәй, беҙ һәр ваҡыт асыҡбыҙ, аҙнаһына 2-3 тапҡыр мәктәптәргә йәмәғәт башланғысында осрашыуҙарға йөрөйбөҙ. Уҡытыусылар, уҡыусылар менән актуаль проекттар эшләйбеҙ һәм беҙҙең база мәктәптәрендә - баш ҡаланың Рауил Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһында, Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында, Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһында әҙиптәрҙең рухи мираҫын мәңгеләштереү, уларҙың ижадын төплө өйрәнеү буйынса эш алып барабыҙ, улар менән туранан-тура эшләйбеҙ.

Бына әле беҙҙең тағы ла ҙур яңы башланғысыбыҙ старт алып тора: Республика Башлығы Радий Хәбиров башҡорт телен балалар баҡсаһынан туған тел һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнергә кәрәк, тине. Ошо йәһәттән иң тәүгеләрҙән булып беҙҙең факультет ерлегендә "Остаз" тип аталған программа төҙөлдө, һәм ул Әбйәлил, Стәрлебаш, Борай райондарында һынау үтте. Ни өсөн ошо өс район, сөнки улар өсөһө өс диалектҡа ҡарай һәм был тәжрибә аша бына ошо диалекттарҙа туған телде өйрәнеү, башҡорт телен өйрәнеү нисегерәк була икәне тикшерелде. Ниндәй дәреслектәр булырға тейеш, ниндәй ҡулланмалар ҡулланырға һ.б. - быларҙың барыһы ла студенттар өсөн генә түгел, республика балалар баҡсаһы етәкселәре өсөн дә асыҡ.

**Факультетта махсус үҙәктәр ҙә бар бит...**

**Сәлимә Таһирова:** Иң билдәлеһе - Көнсығыш телдәре үҙәге, тиергә мөмкин. Уның етәксеһе - филология фәндәре кандидаты, өлкән уҡытыусы Айтуған Ҡуланчин. Кафедрала башҡорт теленән тыш, ғәрәп, төрөк, ҡырғыҙ, ҡытай телдәре өйрәтелә. Башҡорт филологияһы факультеты икенебеҙҙе иҫтә тотоп, студенттар башҡа телдәрҙе башҡорт теле аша, улар-

*✓ Бөтә нәмәне сит халыҡтар тартҡылай, тип дөрөҫ әйтәһегеҙ - яңы ғына күренекле ҡаҙаҡ профессоры үҙ сығышында Аҡмулланы ҡаҙаҡ аҡыны тип һөйләүе беҙҙең алда байтаҡ эштәр тороуын билдәләй.*



# ЛАЙЫҠЛЫЛЫҠ - төп ҡаҙанышы

ҙың уртаҡ яҡтарын ҡарап, сағыштырып, эҙләнеүҙәр алып барырға һәм эш шуның нигеҙендә ойошторолорға тейеш, тигән ҡараштабыҙ. Былтыр улар "Беҙҙең Аҡмулла" тип аталған проект менән Рәсәй кимәлендә грант алыуы был үҙәктең төп йүнәлештәренең һәм уңыштарының береһе булды. Һөҙөмтәлә "Көтөпхана" асылды.

Тағы ла тәүге кафедра мөдирҙәренең береһе Рәйсә Халиҡова исемендәге Студенттарҙың төрлө яҡлап белемен үҫтереү үҙәге эшләп килә. Исеменән үк күренеүенсә, ул студенттарҙың педагогик күнекмәләре менән бәйле. Шулай уҡ "Әсә теле" проекты төркөмө сиктәрендә башҡарылған башҡа эштәр ҙә ошо үҙәккә ҡарай.

Факультетта Башҡорт теле хеҙмәте эшләй. Ул тәржемә эштәре менән шөғөлләнә, шулай уҡ һуңғы йылдарҙа, мәҫәлән, ҡала мәктәбен тамамлап килгән, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгән студенттарға уҡыу барышына инеп китергә ярҙам итә. Ер шарының ҡайһы төбәгендә булһа ла башҡорт телен дистанцион өйрәнергә теләгәндәр өсөн 2015 йылда эшләй башланған Халыҡ-ара башҡорт телен дистанцион өйрәнеү платформаһы эшләнеп бөттө. Ул өс кимәлле һәм шуныһы ҡыуаныслы: башҡа онлайн ресурстар менән бергә уны беҙҙең студенттар ғына түгел, мәктәп уҡытыусылары ла теләп ҡуллана.

Ректорыбыҙ Салауат Сәғитовтың, белем биреү усаҡтарында стеналар ҙа тәрбиәләргә тейеш, тигән ҡарашы һәм башланғысы менән һәр бер корпуста исемле аудиториялар булдырылды. Буласаҡ уҡытыусы үҙенең йүнәлеше буйынса бөйөк шәхестәрҙе, уларҙың хеҙмәттәрен белергә һәм уларҙың эштәрен дауам итергә тигән ниәт менән мәктәпкә барһа - был дөрөҫ ҡараш. Быға тиклем Аҡмулла кабинеты бар ине, ул өр-яңынан яңыртылды, бынан тыш, тағы ла ике профессорға исемле аудитория асылды. Береһе Марат Зәйнуллинға, икенсеһе ошо факультетта оҙаҡ йылдар эшләгән Әхмәт ағай Сөләймәновҡа. Кабинеттар уҡытыусыларыбыҙға ихтирамыбыҙҙы ла, рәхмәтебеҙҙе лә сағылдыра. Был аудиториялар бикләнеп ҡуйылған аудитория түгел, лекция, дәрестәр шунда алып барыла, студенттар шөғөлләнә. Улар заманса йыһазландырылған һәм сит илдәр менән бәйләнешкә сығыу, проекттар эшләү өсөн бөтә шарттар булдырылған.

**▸ Шулай ҙа, факультетты факультет итеп йәшәтеүселәр, төп байлығығыҙ һәм төп көс - ул студенттар. Улар хаҡында ла бер-ике һүҙ әйтеп китегеҙ әле.**

**Ләйлә Хөсәйенова:** Был, ысынлап та, шулай һәм студенттарға беҙ белем генә биреп ҡалмайбыҙ, ә һәләтен төрлө яҡлап үҫтереү йәһәтенән да эшләйбеҙ. Һуңғы ваҡытта иң ҙур йүнәлеш алған яҡ - ул фәнни үҫеш. Бөгөн балалар баҡсаһына тәрбиәселәрҙән башлап бөтә баҫҡыстар өсөн кадрҙар әҙерләһәк тә, белгестәр заман менән, фән менән бергә барырға тейеш. Әйткәндәй, быйыл Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Фән һәм мәғрифәт йылын иғлан итте. Уҡытыусы һәм педагог йылында тап педвузда белем алған студенттарҙың республикабыҙҙа, хатта Рәсәй кимәлендәге ҙур фәнни форумдарҙа иң һәйбәт, йөкмәткеле, перспективалы, лайыҡлы проекттар эшләүҙәре иғтибарға лайыҡ.

Йыл һайын уҡыу, фән буйынса һәм шулай уҡ йәмғиәттә төрлө мәҙәни сараларҙа, спорт ярыштарында ҡатнашып еңеү яулаған студенттар исемле стипендияларға лайыҡ була. Былтыр - өс, быйыл бер студент Башҡортостан Башлығы стипендияһына лайыҡ булды. Ике студент - Аҡмулла, бер студент Рауил Бикбаев исемендәге стипендия ала. Шулай уҡ Рәсәй кимәлендә степендия алған студенттарыбыҙҙың уңыштары менән ғорурланабыҙ. Эшебеҙҙең бер ҡаҙанышы булараҡ йыл һайын бюджет урындары артыуын айырып әйтә алабыҙ, сөнки факультетҡа килеүселәр күп, конкурс ҙур, юғары балдар менән, олимпиада еңеүселәре килеүе ҡыуаныслы.

Студент тормошоноң иң күңелле ваҡыты - практикалар, фольклор һәм диалектология буйынса ойошторолған экспедициялар. Пандемия осоронда был эш әҙерәк кенә туҡталып ҡалғайны, былтыр Ейәнсураға, Ғафуриға барып ҡайттылар. Быйылға Силәбегә экспедиция планлаштырылған. Студенттар был экспедицияларҙы, практиканы бик көтөп алалар. Башҡортостан һәм башҡорттар йәшәгән төбәктәргә сығып, әле һаман халыҡ араһында һаҡланған телебеҙ ынйыларын табып ҡайталар.

**▸ Әңгәмәлә Рәйсә Халиҡованың исеме телгә алынғас, шундай сетерекле мәсьәләгә лә ҡағылып үтмәй булмай. Һуңғы ваҡытта ул бигерәк көнүҙәк, сөнки беҙҙең бөтөн ауыҙ-тел ижадын, фольклорҙы һ.б. ян-яҡҡа тартҡылайҙар, үҙҙәренә алырға тырышалар... Әммә барлыҡ төркиҙәр өсөн уртаҡ булған иҫке төрки теле башҡортта иҫке төрки теле булып йөрөй, ә татарҙарҙа һәм башҡа сығанаҡтарҙа ул иҫке татар теле булараҡ теркәлгән. Улар Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың, "беҙҙең татар теле сығатай һәм башҡорт теленән барлыҡҡа килгән", тигәненең "беҙҙең татар теле" тигән өлөшөнә генә иғтибар биреп, хатта Өмөтбаевты ла татар яҙыусыһы, тип ебәрәләр. Һеҙҙә фән кандидаттары, докторҙары, ғалимдар эшләй - ошо мәсьәләне ни рәүешле хәл итергә һәм башбаштаҡлыҡҡа кәртә ҡуйырға була? Сөнки Рәйсә Хәлил ҡыҙы ла заманында башҡорт теленең беҙҙең шәжәрәләр теле булыуын яҙып ҡалдырған.**

**Ләйлә Хөсәйенова:** Иҫке төрки теле - ул Урал-Волга буйы төркиҙәренең рәсми әҙәби теле, ул телдә һөйләшмәгәндәр, ул яҙма тел генә һәм яҙыу формаһында ғына һаҡланған. Һәм бөтөн Урал-Волга буйында йәшәгән төрки халыҡтары уны уртаҡ мираҫ булараҡ ҡабул итеп, шул телдә яҙып киләләр. Ә иҫке татар теле тигәне - ул революцияға тиклемге XIX быуаттағы тел. Иҫке татар яҙма теле иҫке төрки теле нигеҙендә барлыҡҡа килә, сөнки ул ваҡытта татар тигән төшөнсә, ғөмүмән, төрки халыҡтарының дөйөм атамаһы була. Бөгөнгө татарҙар һәм уларҙың яҙмаһы һәм иҫке төрки теле нигеҙендә барлыҡҡа килгән иҫке татар яҙмаһы араһында тигеҙлек билдәһе ҡуйып булмай. Революцияға тиклем ижад иткән шағирҙарыбыҙ ижадтарын ошо иҫке татар яҙма телендә баҫтырып сығарған. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевҡа килгәндә, уның хеҙмәте лә "Татар нәхүәсе" (йәғни "Төрки нәхүәсе") тип атала.

Әйткәндәй, бик актуаль тема. Ҡоролтай быйыл Фән һәм мәғрифәт йылын иғлан иткәс, шуның менән бәйле уларға ла революцияға тиклем башҡорт теле грамматикаһын иҫке төрки телендә яҙған ғалимдарҙың хеҙмәтен хәҙерге башҡорт теленә ауҙарып халыҡҡа еткереү тураһында фекер тыуҙы. Үкенескә күрә, беҙҙең грамматикалар, нигеҙҙә, революциянан һуң, рус ғалимы Дмитриевтың грамматикаһына нигеҙләнгән. Ә ул рус грамматикаһын күсергән, шуның өсөн һәр ваҡыт проблема килеп тыуа. Хәҙер, әлбиттә, рус теле грамматикаһына нигеҙләнеүҙең хата икәнен аңлайбыҙ, әммә заманы өсөн ул кәрәк булған. Әлеге күҙлектән, бөтөнләй икенсе системаға ҡараған телдең грамматикаһын күсереү телебеҙҙең күп кенә күренештәрен асыҡлау мөмкинлеге бирмәгән. Рәйсә Хәлил ҡыҙы үҙе лә иҫке төрки теле буйынса белгес булған һәм уның аспиранттары ла байтаҡ - шуларҙы табып, уларҙың хеҙмәттәре менән танышҡанда, грамматикала булған ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе лә табыр инек. Был тикшереүҙәрҙә беҙҙең Көнсығыш телдәре үҙәге төп үҙәк булып тора ала.

Бөтә нәмәне сит халыҡтар тартҡылай, тип дөрөҫ әйтәһегеҙ - яңы ғына ҡаҙаҡтар менән осраштыҡ, декабрҙә беҙҙә күренекле ҡаҙаҡ профессоры булды. Үҙ сығышында Аҡмулланы ҡаҙаҡ аҡыны тип, Аҡмулла Мөхәмәтйәр улы, Камалетдин уның үгәй атаһы, тип һөйләүе беҙҙең алда байтаҡ эштәр тороуын билдәләй. Беҙ тарихи документтар нигеҙендә Аҡмулла хаҡында мәғлүмәт бирәбеҙ, Аҡмулла Башҡортостанда ғына түгел, башҡорт ғаиләһендә тыуған, тип раҫлайбыҙ. Ошо һуңғы килгән профессорға бишбармаҡ тураһында һүҙ сыҡҡас: "Уны ла ҡаҙаҡтыҡы тиһегеҙҙер, беҙ ҙә үҙебеҙҙеке тибеҙ", - тием. Ул: "Мин башҡорттарға бишбармаҡты бирергә ризамын, ҡаҙаҡтыҡы булмаһа, булмаһын, әммә Аҡмулланы бирмәйбеҙ", - ти. Уға ике көн Аҡмулла беҙҙеке, тип һөйләнек, аңлаттыҡ. Ҡаҙағстанда бөтә дәреслектәрҙә Аҡмулла ҡаҙаҡ милләтенән тип яҙылған, тиҙәр. Был йәһәттән дә, Аҡмулла - беҙҙеке, тип әйтеү генә етмәй, бында иң беренсе бөгөнгө йәштәргә, эшләп йөрөгән ғалимдарға, телселәргә, тарихсыларға ошо йүнәлештә эҙләнеүҙәр алып барырға кәрәк. Быны Башҡортостанда ғына түгел, сит илдәргә лә таратырға, документтарҙы күрһәтергә кәрәк. Был беҙҙең эш. Ситтән ҡаҙаҡтар йәки башҡалар килеп, беҙҙең документтарҙы ҡарап ултырмай. Бында фәндең йөкмәткеле, төплө, нигеҙле, дәлилле булыуы менән алдырырға кәрәк.

**▸ Бөгөн йәштәрҙең күптәре вуз тамамлап, һөнәре буйынса эшләмәй, диплом ала ла, бөтөнләй икенсе йүнәлеш буйынса китә. Ни өсөн 5 йыл ваҡыт әрәм итеп йөрөнөң, тиһәң, атайым-менән әсәйем теләне шунда уҡыуымды, тиҙәр. Кеше үҙенең буласаҡ һөнәрен һайлап, белеп, яратып килһен өсөн нимәлер эшләп буламы?**

**Ләйлә Хөсәйенова:** Ул проблема барлыҡ вуздарҙа ла барҙыр ул. Бында төп эш һөнәри йүнәлеш һәм мәктәптә уҡытҡан уҡытыусыға төшә, тип һис икеләнмәйенсә әйтеп була, сөнки уҡытыусы 10 йыл буйына уҡыусыларының һәләтен күрә. Шуға, һәр ваҡыт мәктәптә баланың һәләтен күреп, дөрөҫ йүнәлеш биргән коллегаларға рәхмәтлебеҙ. Маҡсатлы, теләп килгән студенттар булһа, беҙгә эшләүе күпкә еңелерәк. Шөкөр, ундайҙар барыбер күпселек.

Ата-әсәләре, үҙем шунда уҡығайным, тип алып килеүселәр ҙә, балам юғары белемле булһын, кеше араһында кәмхур булмаһын, дипломһыҙ ҡалмаһын, ниндәй ҙә булһа вузда уҡыһын, тип килтергәндәр ҙә бар. Ундайҙар менән ауырыраҡ, төрлө хәл була. Әгәр уҡытыусы һөнәре уларҙыҡы түгел икән, тәүге курстарҙан уҡ китеүҙәре хәйерле. Был йәһәттән беҙҙең университет нимәһе менән айырыла - 1-се курстан уҡ мәктәпкә практикаға сығыу мөмкинлеге бар. Беҙ уларҙың буласаҡ эш урындарын күрһәтәбеҙ. Медуниверситетта ла шулай бит. Был дөрөҫ йүнәлеш, тип уйлайым.

Әлбиттә, 1-се курсҡа 72 кеше алғанбыҙ икән, барыһы ла уҡыуын тамамлаһын тип теләйбеҙ, әммә бигүк килеп сыҡмай. Ә бына 2021 йылда 56 кеше уҡырға ингәйне, 58 кеше тамамланы. Шундайыраҡ күренештәр ҙә бар. Йәшерен-батырын түгел - райондарҙан, ауылдарҙан килгән уҡыусылар күбеһе Өфөлә ҡалырға тырыша, сөнки эш урындары күберәк.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт университетының Башҡорт филологияһы факультеты һәм уның эшмәкәрлеге, яңы асылған һөнәрҙәр һәм аспирантура, башҡа яңылыҡтар тураһында әллә күпме әңгәмәләшергә, ә белгестәр үҙҙәренең эшмәкәрлеге тураһында һис ялҡмай һөйләргә мөмкин. Бөгөнгө мәғлүмәт - ул бер тамсы ғыналыр, моғайын. Ә тамсынан диңгеҙ йыйыла...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Иң төпкөл тип иҫәпләнгән ауылда йәшәүселәрҙең дә тормошон барып күрегеҙ, бөтөн уңайлыҡтары булған зауыҡлы йорттар төҙөп, етеш йәшәй улар, бары тик тәүфиҡты, иманды арттырыу йәһәтенән эшләргә кәрәк.*






**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башланғысы менән республикала үткәрелә килгән "Айыҡ ауыл" бәйгеһе йылдан-йыл популярлыҡ яулай. Сәләмәт, айыҡ йәшәү рәүешен һайлаған биләмәләрҙең йәшәйешен башҡаларға күрһәтеү, уларҙы дәртләндереү йәһәтенән был сараның әһәмиәте ғәйәт ҙур. Бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ - Хәйбулла районы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Роза Раузат ҡыҙы РӘСЕМБӘТОВА, Әбүбәкер ауылы мәктәбе директоры Наилә Рәхимйән ҡыҙы БИЛАЛОВА, райондың Ғаилә хеҙмәте етәксеһе Динә Ревмир ҡыҙы АҠҠУЖИНА менән тап ошо конкурс, уның һөҙөмтәләре, ауыл тормошон йәнләндереүҙәге роле хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**

# БЫЛ БӘЙГЕЛӘ...

## айыҡлыҡ өсөн көрәшкәндәр ҡатнаша

**➔ Айыҡлыҡ өсөн көрәш һаман да йәмғиәттең актуаль проблемаларының береһе булып ҡаламы әле? "Айыҡ ауыл" республика бәйгеһен ошо айыҡлыҡ өсөн көрәштең иң әүҙем, иң һөҙөмтәле сараһы тип әйтә алабыҙмы?**

**Р. Рәсембәтова:** Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, "Айыҡ ауыл" конкурсының бурысы - халыҡты айыҡтырыу ғына түгел. Башланғыс этабында, бәлки, шулай булғандыр ҙа. Шөкөр, ул икенсе кимәлгә күтәрелде хәҙер: халыҡты әүҙемләштереү, берләштереү һәм сәләмәт, айыҡ йәшәү рәүешенә йәлеп итеүҙе пропагандалай. Бөгөн был конкурста тап ошондай кимәлгә еткән ауылдар ҡатнаша. Былтыр райондың Вәзәм ауылы республика этабында беренсе урынға сыҡҡайны. Улар миҫалында ла әйтә алам: вәзәмдәр үҙҙәренең именлектәре өлгөһөндә башҡаларҙы ла тәрбиәләй, бына ошолай итеп тә йәшәп була, тип күрһәтә. Йәғни, ауылдар ошо именлек, сәләмәт кимәлгә етеп, шунан ғына ҡатнаша конкурста. Быйыл был сарала ҡатнашҡан Әбүбәкер ауылы ла шундайҙарҙан. Ғөмүмән, ҡоролтай "Айыҡ ауыл" конкурсын шундай юғары дәрәжәгә күтәреп, уның баһаһын арттыра алды, хатта бөгөн ниндәйҙер ауыл унда ҡатнаша икән, райондың да статусы күтәрелә, социаль йәһәттән башҡарған эштәре лә күренә. Шуға ла бәйге барышында районда араһында үҙ-ара ҡаты көрәш бара, тип әйтһәм дә яңылышмаҫмын.

**Н. Билалова:** Тулыһынса был фекер менән килешәм: Әбүбәкер ауылы күптән үҙенең йәшәү рәүеше менән әҙер ине был бәйгегә. Бөтөн халыҡ, аҡһаҡалдар ҡоро, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, ҡатын-ҡыҙҙар советы ағзалары, биләмәләге башҡа учреждениелар хеҙмәткәрҙәре бик сәмләнеп тотондоҡ был эшкә. Ниндәй генә сара үткәрмәнек: урамдар байрамы булды, йолалар күрһәтелде, хатта балыҡсылар ярышы ла үтте. Иң мөһиме, балаларҙы һәр сара уртаһында йөрөтөргә тырышабыҙ, быйыл да мәктәптә ауылдашыбыҙ, Чечня һуғышында һәләк булған Шамил Балдыбаев иҫтәлегенә ҙур спорт ярыштары булды, унда ир-егеттәр әүҙем ҡатнашты. "Әлибаев уҡыуҙары" әҙәби-ижади конкурсына йомғаҡ яһаныҡ, "Илһөйәрлек рухы һүнмәһен" тип аталған тыуған яҡты өйрәнеү уҡыуҙары әле бына тамамланып тора, уҡыусылар фәнни эшкә лә йәлеп ителә шулай. 11 йыллыҡ урта мәктәбебеҙҙе һаҡлап ҡала алдыҡ, мәктәп булмаған ауылдың киләсәге юҡ. Ағинәйҙәребеҙ тыуған яҡ ҡырҙарынан йыйылған үләндәрҙән "Әбүбәкер сәйе" әҙерләй, ул үҙенсәлекле брендҡа әүерелеп китте хәҙер. Гәләбәште тергеҙеп ебәрҙеләр, үҙебеҙҙең төбәккә хас селтәр биҙәүесе эшләйҙәр.

**Р. Рәсембәтова:** Әбүбәкер ауылы халҡы үҙенә башҡа ул, улар бик дәртле, тырыш, Наилә Рәхимйән ҡыҙы әйтмешләй, ауылдарына ғына хас шөғөлдәре бар. Лидерҙары көслө. Бәйгелә ҡатнашырға теләгән һәр ауылға "Көслө лидерҙарығыҙ булһа, уңаһығыҙ", тип әйтәбеҙ. Ауылда кемдер башлап йөрөргә тейеш. Иң мөһиме - был ауыл халҡы бөтөн нәмәне бергәләп эшләй: бергәләп саңғыға баҫалар, быйыл ауылдың һәр кешеһе ГТО тапшырырға сыҡты. "Ете егет" телевизион бәйгеһенә оҡшатыбыраҡ, ҡыҙҙар араһында "Ете ҡыҙ" тигән матур сара ойоштorҙолар.

**➔ "Ете ҡыҙ" бәйгеһенең төп маҡсаты нимәлә?**

**Н. Билалова:** Ҡыҙҙар һөнәрле булһын, үҙ мәҙәниәтебеҙгә ылыҡһын, тинек. Һөнәре булғандар насар ҡылыҡтарға бирелмәй, тормошта юғалып ҡалмай. Бәйге 7 көн барҙы. 1-се көнөндә Миңзәлә Билалова - сигеүгә, 2-се көнөндә Гүзилә Әбүбәкерова - орсоҡ менән йөн иләргә, 4-се көнөндә үҙем стилләштерелгән селтәр эшләргә өйрәттек. 5-се көнөндә райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе, район Мәҙәниәт йорто методисы Миңзифа Ишемғолова - бишек йыры, 6-сы көнөндә ағинәйебеҙ Әлфиҙә Ултыраҡова бейеү буйынса оҫталыҡ дәресе ойоштorҙо. 7-се көнөндә ауыл старостаһы Рамаҙан Назаров яндан уҡ атыу серҙәренә төшөндөрҙө. Идея авторы - мәҙәниәт идаралығы начальнигы Мәмбәтова Лариса Рәшит ҡыҙы.

**Р. Рәсембәтова:** Райондың берәй ауылы "Айыҡ ауыл" бәйгеһендә ҡатнашырға теләк белдерһә, ниндәй саралар ойоштorорға була, тип күмәкләп уйлайбыҙ. Бына был "Ете ҡыҙ" бәйгеһен башҡа ерҙә үткәреп булмаҫ ине. Ә Әбүбәкерҙә һөнәр белгән, уны башҡаларға өйрәтә алған апайҙар бар. Шуға ла уны Әбүбәкер ерлегендә күрһәтергә булдыҡ, башҡалар ҙа эләктереп алыр әле, бәлки, район кимәленә лә сығарырбыҙ.

**➔ Район "Айыҡ ҡатын" тигән проект эшләп, барыһын да аптырауға һалды, тиһәм дә яңылышмаҫмын. Күптәргә бик оҡшап етмәгән был проект ниндәй һөҙөмтәләргә өлгәшергә тейеш тип уйлайһығыҙ?**

**Д. Аҡҡужина:** Беҙ уны әле генә иғлан итеп тормайбыҙ, был хәрәкәт беҙҙә күптән бара. Тик ошо проблеманы йәмәғәтселеккә сығарыу ваҡыты етте, тип иҫәпләйбеҙ. Башҡалар ҙа күҙ йоммаһын ауылдарындағы эскән ҡатындар, эскән ғаиләләрҙең проблемаларына. Эсергә мәжбүр булғандар ҙа яңғыҙ тороп ҡалмаһын, бәлки, ғаилә хеҙмәтенән ниндәйҙер ярҙам кәрәктер, тип тә уйланылды уны ойоштorорға ҡарар иткәндә. Ысынлап та, был проектты ҡабул итмәйерәк торалар. Ул маҡсатлы аудиторияға йүнәлтелгән. Ни эшләп атамаһы шундай, тиҙәр. "Айыҡ ҡатын" тигән һүҙбәйләнештең антонимы бар - "Иҫерек ҡатын". Был үҙе үк аяныс бер фажиғә булараҡ ҡабул ителә бит.

**Р. Рәсембәтова:** Был проблема йәмғиәттә бар, тик беҙ ул һаҙлыҡтағы кешеләрҙе күрмәмешкә һалышабыҙ. Улар менән эшләргә, уларҙы айыҡтырырға кәрәк. Эскән ҡатындар Хәйбуллала ғына икән, тип уйламағыҙ, улар һәр ауылда, ҡалала бар. Был проблемала иң ҡурҡынысы - балалар йонсой. Тик берәү ҙә күршем, ҡыҙым, киленем эскесе тип әйтмәй. Башҡорттарҙың менталитеты шулай бит, бәләне тышҡа сығарыу юҡ. Ә бит ваҡытында дауалаһаң, сир улай төпкә төшөп тә китмәҫ ине. Был проекттың үҙенсәлеге нимәлә - эсеүен ташлаған ҡатындар был турала асыҡтан-асыҡ һөйләй, беҙҙең менән бергә төрлө сараларҙа йөрөй. Яңыраҡ ҡына Бөрйән, Йылайыр райондарының "Айыҡ ауыл" бәйгеһендә ҡатнашыусы ауылдары менән Әбүбәкер ерлегендә ошо йәһәттән тәжрибә уртаҡлаштыҡ. Берәү ҙә битараф ҡына тыңлап ултыра алманы.

**Д. Аҡҡужина:** Күптәр белмәйҙер ҙә, 2019 йылдан "Берҙәм Рәсәй" партияһы "Минең ғаиләм" тип аталған проект булдырҙы, уның "Яҡты юл" тигән реабилитация үҙәге бар, дауаланыу өсөн түләргә кәрәкмәй. Медикаментоз дауалау түгел, унда шәп психологтар эшләй. Теләк менән барғандарҙың, әлбиттә, һөҙөмтәһе лә яҡшыраҡ. Шулай ҙа 25 кешене ебәреп, уларҙың 5-әүһе сәләмәт йәшәүҙе һайлай икән, был да ҙур уңыш беҙҙең өсөн.

**Р. Рәсембәтова:** Бер тапҡыр 6 бала тәрбиәләгән әсәнең 1 аҙна өйҙә булмауы тураһында хәбәр килде. Опека органдары менән ул йортҡа юл тоттоҡ. Бәләкәй 5 бала, алтынсыһының, ике айлығының муйыны, саттары һөйәгенә тиклем сейләнеп бөткән, үҙемдең ҡулдарым менән алып сыҡтым уны. Бала үҫешмәгән, илай ҙа алмай, хәле лә юҡ. Өләсәйҙәре, олатайҙары иҫерек. Шул балаларҙың әсәйе дауаланды, балаларын үҙенә алды, әле ҡәҙимге генә донъя көтә. Ә 24 йәшлек бер ҡатынды ике ай буйына дауаланырға йөрөтөп тә, эскелек һаҙлығынан ҡотҡара алманыҡ, ике балаһы әсәй тәрбиәһенән мәхрүм. Ошондай ҡатындар, ошондай хәлдәр һирәк булһа ла бар. Уларҙы күргәндән һуң эскән ҡатындар проблемаһын инҡар итеп булмай. Проектта ла бит, "Әйҙәгеҙ, бөтөнләй өҫтәлгә ултыртмайыҡ спиртлы эсемлектәрҙе", тип саҡырабыҙ. Ултыртаһың, кемдер әйтмешләй, "культуралы" эсәһең икән, киләсәктә балаң барыбер эсәсәк, тигәнде аңлатабыҙ.

**➔ Мобилизацияланғандарға ла гуманитар ярҙамды былтыр йәй башында уҡ Хәйбулла ағинәйҙәре башлап ебәргәйне. Был эш нисек ойоштorолған һеҙҙә?**

**Р. Рәсембәтова:** Ағинәйҙәр хәрәкәтен мин бик юғары баһалайым. Был хәрәкәттә бит элек уҡытыусы, табип, клуб хеҙмәткәре булып эшләгән, ауылдың юғары ҡатламы йөрөй. Уларҙың һәр эше генә түгел, үҙҙәренең йәшәү рәүеше үк өлгө. Әйтәйек, эскелек менән көрәштә лә флаг тотоп көрәшеүгә ҡарағанда, үҙеңдең өлгөңдә тәрбиәләү - иң дөрөҫө. Мин, ғөмүмән, эскелеккә ҡаршы көрәш тип әйткәнде яратмайым. "Айыҡ ауыл"да ҡатнашыу эскелеккә ҡаршы көрәшеү түгел, айыҡлыҡ өсөн көрәшеү ул. Шуға ла ағинәйҙәргә: "Әйҙәгеҙ, ҡырыныраҡ баҫҡандарҙы ла үҙегеҙҙең арбаға ултыртып алығыҙ", - тип әйтәм. Ҡайһы бер ауылдарҙа шулай итәләр ҙә.

**Н. Билалова:** Ысынлап та, беҙҙең ағинәйҙәр былтыр йәй башында уҡ ойоҡбаштар бәйләй башлағайны инде. Иң тәүгеләрҙән булып Әбүбәкер ҡоротон киптереп тә, һауыттарға тултырып та ебәрҙек, егеттәребеҙгә ул барып еткән, сәләмдәрен еткерҙеләр. Бөтөн ауыл ҡатын-ҡыҙҙары йыйылып, клубта һалма ла йәйҙек, балаклава ла тектек, сәйҙәр ҙә төрҙөк. Әле бына Әбүбәкерҙең халыҡ театры Мәүлит Ямалетдиновтың "Ҡыҙыл итектәр" әҫәрен сәхнәләштерҙе лә, ауылдарға, хатта башҡа райондарға сығып күрһәтеп йөрөйбөҙ. 140 мең аҡса йыйылды, уға Әбүбәкер егете йөрөгән подразделениеға тепловизор һатып алып ебәрәсәкбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бәйге тамамланыуға табан бара, ошондай әүҙем йәшәү рәүеше ҡаныгыҙға һеңеп бөттө инде, артабан нимә эшләйәсәкһегеҙ?" - тигән шаяртыуға хәйбуллаларҙың яуабы шулай булды: "Кеше бер юғарылыҡты ала икән, ул унан төшмәйәсәк!" Роза Раузат ҡыҙы бик хаҡлы билдәләүенсә, ауылдар бөтөп бара, ауылдарҙа эш юҡ, ауылдар эскелек һаҙлығына батҡан инде, тигән һүҙҙәр ысынбарлыҡҡа тап килмәй бөгөн. Иң төпкөл тип иҫәпләнгән ауылда йәшәүселәрҙең дә тормошон барып күрегеҙ, бөтөн уңайлыҡтары булған зауыҡлы йорттар төҙөп, етеш йәшәй улар, бары тик тәүфиҡты, иманды арттырыу йәһәтенән эшләргә кәрәк. Ауыл бар, ауыл йәшәй, ауыл сәләмәт йәшәү рәүешен һайлай - бәйгелә ҡатнашыусы ауылдар ошоно иҫбатлай.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**



✓ *"Баш ите ашы" йола ғына түгел, ә халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбе, оло быуындың тормош тәжрибәһе булып күҙаллана. Хәйер, ҡайһы ғына йолабыҙҙы алып ҡарамайыҡ, улар халыҡты берләштереүсе һутлы тамыр бит ул.*



# ҺӘР ЙОЛАБЫҘ...

## берләштереүсе һутлы тамыр

**Аллаһы Тәғәләнең беҙгә төйәк итеп биргән һәр ере матур, йән һәм тән өсөн шифа. Шул ерҙәрҙе йәмләр, уға ҡот-бәрәкәт өҫтәр кешеләр булыуы менән беҙ ғорурланабыҙ. Халҡыма замандың төрлө һынауҙарын үтергә тура килә. Ләкин үҙенә булған ышанысы, тормошто яратыуы, донъяһын матур итеп ҡора белеүе уны һәр саҡ көслө һәм маҡсатлы иткән. Стәрлебаш районының Түбәнге Аллағыуат ауылы тураһында ла шулай тип кенә әйтергә була. Унда йолаларыбыҙҙы тотҡан, хеҙмәт менән дан алған егәрле һәм рухлы халыҡ көн итә.**

Дөйөм хужалыҡтар тарҡала башлаған 90-сы йылдарҙа күптәр юғалып ҡалды, был хәл ауыл тормошона, кешеләр психологияһына йоғонто яһамай ҡалманы. Шул уҡ ваҡытта үҙ ағышына ҡуйылған тормош дилбегәһен үҙ ҡулдарына алған ир-егеттәребеҙ ҡалҡып сыҡты. Ергә, хеҙмәткә булған мөнәсәбәт тап шунда сағылды ла инде. Аллағыуат ир-егеттәре лә шул мәлдәрҙә тәүгеләрҙән булып үҙ иңдәренә яуаплылыҡ алды. Бөгөн Түбәнге Аллағыуатты фермерлыҡ йәһәтенән ныҡ үҫешкән ауыл, тип атайҙар. Ер ҡәҙерен беләләр, эшкәртелмәгән, буш ятҡан аяҡ баҫыр урын да юҡ, тиҙәр. Фермер хужалығы үҫешкәс, әлбиттә, эш урындары ла бар. Хеҙмәтте бүлешә белеү мәсетте һалған саҡта ла күренгән - кемеһелер бура ҡайтарған, кемеһелер төҙөгән, кемеһелер йылытыу системаһын булдырған. Шыңғырлап торған бүрәнәләрҙән һалынған иман йорто йылы ла, яҡты ла. Мәсеттән тыш, ауылға һулыш бирер икенсе усаҡ тураһында ла әйтергә кәрәк: мәктәп тормошо гөрләй. Мәктәпте һаҡлап ҡалыр өсөн шулай уҡ көс һалырға тура килгән. Ә бит был мәктәптең данлы тарихы бар. Беҙ унан сыҡҡан бик күп шәхестәрҙе ғорурлыҡ менән телгә ала алабыҙ. Матур традициялар һаҡланһын, йәш быуындың заманға әйтер һүҙе булһын, тип теләргә генә ҡала.




Түбәнге Аллағуат ауылы үҙе тураһында быйыл республикаға ла ишеттерергә ҡарар итте. Үткән аҙнала унда "Айыҡ ауыл" республика конкурсы сиктәрендә йомғаҡлау сараһы үтте. Абруйлы ҡунаҡтар - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы ағзаһы, "Айыҡ ауыл " республика конкурсының ойоштороу комитеты рәйесе Сәлиә Мырҙабаева, режиссер, "Йөрәк һүҙе" телевизион шиғриәт программаһы авторы һәм етәксеһе, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Наилә Сәфәрғолова, журналист, йәмәғәт эшмәкәре, республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин ошо сарала ҡатнаштылар.

Бик тығыҙ һәм йөкмәткеле булды әҙерләнгән программа. Алда аталған сара эсендә район кимәлендә "Йөрәк һүҙе" конкурсы үтте. Түбәнге Аллағыуат ауылы клубы өс тиҫтәнән ашыу шиғыр һөйләүсене үҙенә йыйҙы, олоһо ла, кесеһе лә ҙур теләк менән ҡатнашты сәмле һәм ғәмле ярышта. Тетрәндергес, уйға-моңға һалыр шиғри юлдарҙы тыңлағанда ирекһеҙҙән күҙгә йәштәр ҙә төйөлдө. Баһалама ағзалары "Иң яҡшы шиғыр авторы" тип Зөлфирә Булатованың исемен атаны. Гран-приға лайыҡ булған Наҙгөл һылыу Туҡтамышева республика кимәлендә үткән "Йөрәк һүҙе"ндә тағы ла бер тапҡыр осрашырыбыҙға шик юҡ. Һәр кемдең күңелендә әйтер һүҙе, хис тойғоһо була. Бына шул һүҙҙе ваҡытында әйткән кеше ҙур хөрмәткә лайыҡ

Йәш быуынға иғтибар спорт ярыштарында асыҡ сағыла. Стәрлебаш районында еңеү яулаған һәм "Айыҡ ауыл-2023" республика конкурсына сыҡҡан Түбәнге Аллағыуатта спорт ярыштары гөрләне. Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ һәм Федоровка райондары батырҙары милли көрәш буйынса район-ара турнирҙа иң көслө, дарманлы һәм таһыллыларҙы асыҡланы. Бында бөтә иғландар ҙа башҡорт телендә яңғырауы шулай уҡ күңелдә ғорурлыҡ тойғоһо уятмай ҡалманы. Гөлфиә Янбаева "Айыҡ ауыл" конкурстарында ир-егеттәрҙең әүҙемләшеүен бик урынлы һәм хаҡ билдәләне. "Ауылдарҙа күп кенә ир-егет шөғөлдәрен тергеҙҙеләр, йәштәрҙе, балаларҙы үҙебеҙҙең халыҡҡа ғына хас спорт төрҙәренә йәлеп иттеләр", - тине ул.

Спортҡа ла, рухи ҡиммәттәргә лә әһәмиәт биргән аллағыуаттарҙың иң "тәмле" һәм бай эстәлекле йола байрамын үткәреүен айырым бер йылылыҡ менән телгә алырға кәрәк. Һүҙ, әлбиттә, "Баш ите ашы" байрамы хаҡында. Баш ите ашына саҡырыу беҙҙең халыҡта борон-борондан йәшәп килгән. Уны, ғәҙәттә, яҙ еткәс үткәрер булғандар. Борон ҡара ергә, йәки күгүләнгә иҫән-имен аяҡ баҫҡандары өсөн ҡыуанғандар, бер-береһенә изге теләктә булғандар, мал-тыуар үрсеһен, йылдың ҡото-бәрәкәте артһын тип, доғалар ҡылғандар, йолалар башҡарғандар. Шундай йолаларҙың береһе лә инде яҙғылыҡҡа һаҡлап ҡуйылған мал башын өтөп, таҙартып, ашын бешереп, ыуыҙ ҡоймағын да өҫтәп, бар ауыл халҡын һыйлай торған "Баш ите ашы" табыны ҡороу.

Дөрөҫ, ҡайһы бер яҡтарҙа был байрам онотола төшкән. Шуға ҡарамаҫтан, яҙ килеүен белдергән күркәм йолабыҙҙың хәҙер тергеҙелә барғанын да күрәбеҙ. Йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлау, килер быуындарға еткереү буйынса республиканың һәр районы, ауылында ағинәйҙәр һөҙөмтәле эш алып бара. Тағы ла шуға шаһитбыҙ - был байрамда һәр төбәктең үҙенсәлеге сағыла. Аллағыуаттарҙың баш итенә ҡунаҡ саҡырыу йолаһында беҙ ҡәйнә һәм килендәрҙең нисек итеп һәр береһенең үҙҙәренә бирелгән бурыстарҙы теүәл үтәүен күрҙек. Быны дөйөм хеҙмәт һәм уртаҡ байрам ҡыуанысы, тип атарға кәрәктер. Балалар ҙа ҡунаҡ ҡаршылап, һөйөнсөләп, үҙҙәренә бирелгән рол-дәрҙе оҫта атҡарҙы.

Байрам булғас, байрам инде: хаһыҡсан шаяртыуҙарға ла ҙур урын бирелә. Әммә һәр һүҙҙәр тәрбиә, һабаҡ һәм дәрес булараҡ ҡабул ителде:

- Мейеһе һеҙгә, балалар, аҡыл-зиһен өҫтәһен, ошо йола, һеҙ үҫкәс тә, бөтмәһен, онотолмаһын.

- Илдар көрәшсегә ҡаптырайыҡ эйәктән, йәштәрҙе өгөтләп торһон, китмәһендәр төйәктән.

- Ҡолағы силсәүиткә, барын ишетеп торһон, яҙыҡ юлдан йөрөгәнде тиҙ ара кире борһон.

Шулай уҡ ҡәйнәнең әйткәне иҫтә ҡалырлыҡ, ышандырырлыҡ: "Күҙҙәрен үҙемә алам, күҙ ҡараһындай ирем. Икәүләп ашап ҡуйырбыҙ иң затлы ғына ерен".

Һәр бер һүҙҙә тәрбиә, фәһем. "Баш ите ашы" йола ғына түгел, ә халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбе, оло быуындың тормош тәжрибәһе булып күҙаллана. Хәйер, ҡайһы ғына йолабыҙҙы алып ҡарамайыҡ, улар халыҡты берләштереүсе һутлы тамыр бит ул. Һутлы тамырҙар ил-йортҡа ырыҫ-ҡот, йәшәүгә көс-илһам бирә. Беҙ ошо илһамлы юлдың юлсылары булдыҡ. Һәм, үҙ сиратыбыҙҙа, сәмле, сағыу тормош алып барған, киләсәккә яҡты маҡсаттар ҡуйып йәшәгән аллағыуаттарға изге ынтылыштарында уңыштар ғына теләйбеҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

*СӘЙЕР ҒӘҘӘТ*

# ҠОЙМАҒЫҢ...

## тәмлеме?



**Шундай сәйер ғәҙәтем бар: ҡатын-ҡыҙҙы бешергән ризығына ҡарап баһалайым. Хатта йәмғиәттәге иң шәп, уңышлы ханымдарҙы ла ошо ҡалыптарға индергән булам. Ҡайҙан беләһең уның нисек бешергәнен, өйөндә ҡунаҡ булғаның бармы, тиерһегеҙ. Һуң, интернет бар ҙаһа. Үҙҙәре ҡуя бит бар бешергән нәмәләрен кеше иғтибарына, бына мин бөгөн ҡоймаҡ бешерҙем, бөгөн бәлеш, тип яҙып ҡуя. Мода бит шундай, нимә ашағаныңды ла, шул-шул ризыҡтарҙы бешерә белгәнеңде кешегә "һөйләргә" кәрәк.**

Әйткәндәй, бер танышым кешенең нисек һалма йәйеүен ҡарай ҙа йөрөй. "Әллә кем булып, хәбәр һөйләмәһен, күрҙем инде йәйеп киптерергә һалып ҡуйған һалмаһын, өҙөк тә йортоҡ", - тип әйткән һүҙе ошо сәйер ғәҙәтемдә иҫкә төшөрҙө лә инде. Мин күберәк ҡоймаҡҡа иғтибар итәм. Ҡоймаҡтың уңыуы-уңмауы уның йөҙөнә "яҙылған" була. "Йомро-йомро йомғағым" әкиәте иҫегеҙгә төштөмө? Йомғаҡ эҙләп, өйөнә килеп ингән ике ҡыҙҙан да ҡоймаҡ ҡойҙороп ҡарай бит әбей, уларҙың күңеленең сафлығын ошолай һынап ҡарай.

Тағын бер баһалаусы критерийым бар: картуфты нисек әрсей, шыма ғына итепме, әллә юнып, күҙҙәрен йәмһеҙ итеп соҡопмо. Картуф та әрсергә өйрәнә алманы бит ул, тип уйлаған саҡтарым күп була ҡайһы бер таныштарға ҡарап. Иң ҡыҙығы, "Эй, тағын уңмаған ҡоймағының фотоһын һалған, иренә ошоно ашатып йәшәй инде", тип, ирен йәлләп алам да китәм. Йәки: "Үәт, ҡоймағы уңа башлаған да инде!" - тип ҡыуанам. Сөнки ашарға бешереү - ул ҡатын-ҡыҙҙың төп бурыстарының береһе. Һәм, әгәр ҙә ул бик тәмле итеп бешерһә, был уға ҙур уңыш килтерә, тип өйрәтә.

"Ир-егеттең күңеленә юл ашҡаҙаны ашы үтә" тигән мәҡәл дә бар. Ашарға тәмле бешерһәң, ирең ҡәнәғәт була, тәмһеҙ бешерһәң, нык ҡәнәғәт булмай икән, тип өҫтөн генә фекер йөрөтөргә кәрәкмәй. Мәҡәлгә тәрәнерәк аҡыл йәшерелгән. Ризыҡ - ул матур, тәмле булырға, витаминдарҙан, аҡһымдан, майҙан, углеводтарҙан торорға мөмкин. Тик ризыҡтың ошо тышҡы билдәләренән тыш, эске энергетикаһы ла бар, тип өйрәтә ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һүрәтләгән боронғо китаптар. Дөрөҫ энергетика менән әҙерләнгән ризыҡ аша иренде лә үҙгәртеп, уға рухи йәһәттән үҫешергә булышлыҡ итеп була икән. Тимәк, ошо ризыҡты ашаған ирҙе йәлләү тойғоһо бик урынлы бында. Яҡты уйҙар менән, иренә, балаларына изге теләктәр теләп бешеренгән ҡатын-ҡыҙҙың ошо ыңғай энергияһы матдилашып, алдыбыҙға ризыҡ булып ултыра. Ә һеҙҙең ниндәй сәйер ғәҙәттәрегеҙ бар? "Киске Өфө"ләге ошо рубриканы тағы ла йәнләндереп ебәрәйек әле. Бер ҡыҙыҡ булһын әйҙә!

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



## ҠЫЯРҘЫ ЙӘЙ АША

■ "Телефонда күп ултырма, күҙең боҙола", - тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Смартфон, планшет, компьютерҙарҙың күреү һәләтенең насарланыуына булышлыҡ итеүе ысынмы? Саламанка университеты (Испания) белгестәренең һуңғы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, электрон ҡоралдар, дөрөҫөрәге, уларҙы самаһыҙ ҡулланыуҙың күреү һәләтен боҙоуҙа туранан-тура ғәйебе юҡ. Миопия, күҙҙең йыраҡтағы әйберҙәрҙе насар күреүе күҙ алмаһы оҙонлоғонoң ҙурайыуы һәм шунның арҡаһында күҙ алмаһының алғы өлөшө менән күҙ ясмығы яҡтылыҡты күҙҙең селтәрле ҡабығына түгел, ә унын алдына фокуслау менән бәйле. Ҡайһы саҡта күҙ мөгөҙсәһе, йәки күҙ ясмығы, йәки уларҙың икеһе лә боҙолған була, был да яҡтылыҡтың дөрөҫ төшмәүенә сәбәпсе булып тора. Линзалар ошо тайпылыштарҙы төҙәтә һәм яҡтылыҡ мәғлүмәтен кәрәкле урынға, йәғни күҙҙең селтәрле ҡабығына йүнәлтә. Күҙҙең сәләмәтлеген һаҡлау өсөн уны даими күнектереп торорға кәрәк, йә йыраҡтағы, йә яҡындағы объекттарға сиратлап ҡарарға. Шуға ла экранға оҙаҡ итеп ҡарап торһаҡ, күҙ яҡындағы объекттарҙы яҡшы күрә, әммә йыраҡтағын улар насар күрә. Бигерәк тә күреү һәләте формалашҡан һәм үҫешкән ваҡытта был зыянлы. Тимәк, балаларҙы телефонда ултырыуҙан мотлаҡ тыйырға кәрәк.

■ Петербургта бер төркөм ғалимдар биткә яңы крем уйлап тапҡан. Ул үрмәксе ауынан яһалған. Яңы крем йыйырсыҡтарҙы шымартырға булышлыҡ итәсәк, тип белдерәләр Милли технологик инициативаларының матбуғат хеҙмәтенән. Ғалимдар ауҙың үҙен түгел, ә ау яһалған аҡһымды ҡулланған. Аҡһымдың төп үҙенсәлеге - ул яңы күҙәнәктәр барлыҡҡа килеү тиҙлеген арттыра. Лаборатор тикшеренеүҙәр үткән, әле ғалимдар патент алыу өҫтөндә эшләй. Яңы крем сит ил компанияларынан һуң бушап ҡалған косметика йүнәлешен тулыландырасаҡ. Әлеге мәлдә был баҙарҙың 80 процентын сит ил брендтары алып тора.

■ Помидор, ҡыярҙы йыл әйләнәһенә ашап күнегеп тә киттек. Ҡышын теплицала үҫтерелгән был йәшелсәләрҙең файҙалы матдәләре лә юҡ кимәлендә, шулай уҡ миҙгеленә ҡарағанда витаминдар һәм микроэлементтар ҙа аҙыраҡ. Етмәһә, теплицаларҙа нитраттар күпкә тиҙерәк барлыҡҡа килә. Шуға ла ҡыярҙы, томатты бигерәк тә йәйен-көҙөн ашарға кәрәк. Ҡыш-яҙ иһә, мәҫәлән, торма һәм уның бер төрө - дайкон файҙалы. Дайконға салат япраҡтары өҫтәргә була. Авокадо ла уның менән яраша, унда майлы кислоталар ҙа күп. Тағы ла бик файҙалы йәшелсә бар, ул да булһа - кәбеҫтә. Хаҡы ла ҡиммәт түгел. Кишер, алма ҡырып һалһаң, бынамын тигән салат килеп сыға. Йәшел тәмләткестәр ҙә өҫтәргә була. Тоҙланған кәбеҫтә лә әлеге миҙгелдә витаминдарға ҡытлыҡ кисергән организмға ярап ҡала. Балан, мүк еләге лә уны тәмләндерә. Кем юғары ҡан баҫымынан яфалана, уларға тоҙло әйберҙе күп ашарға ярамай. Сөгөлдәр - бетаин һәм бетаниндарға, фолий кислотаһына бай. Кунжут, сыр, һарымһаҡ өҫтәһәгеҙ, сөгөлдөр салаты файҙалы ла, тәмле лә була.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# НИ МЕНӘН МӘШҒҮЛДӘР?

### Их, сергетыштары!

**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары тергеҙгән "Бөрйән сергетышы" тигән бренд тауары, этнографик монаяты республиканың мәҙәни тормошонда айырым бер урын алыуға өлгәште инде.**



Эштәребеҙ даими рәүештә һәр кимәлдәге күргәҙмәләрҙә биҙәй. Был йәһәттән "Кәрәҙ" халыҡ клубы ағзалары арлы-бирле ҡорама ҡорап, сергетыш йүрмәп, бөтә ҡомарткының бәҫен ебәреүсе уртаҡулдарға төп традицияны боҙмау, сергетышты янырттып эшләү яғынан матур өлгө күрһәтә килә. Былтыр йәй һабантуйҙа ҡатнашыусылар Бөрйән тирмәләренең сергетыштар менән биҙәлешендә бығa ысынбарлыҡта шаһит булдылар ҙа инде. Сергетыштың бәләкәй варианттары ултырғыс, машина креслоларына түшәктәр өсөн тәғәйенләнде һәм бик популяр булып китте. Бөрйәндә ҡышҡы ат ярыштары үткәрелгән яланды тултырып сергетыштар әлеү ҙә йолаға әүерелде. Шулай уҡ был байрамда аттарҙы сергетыш менән биҙәү өсөн тулы комплект-амунициялар әҙерләүселәр ҙә бар хәҙер, ул тәжрибәне лә таратаһы бар.

Район хакимиәте, мәҙәниәт идараһы ла был эшкә яуаплы һәм ентекле тотонған оҫталарҙы дәррәү ҡеүәтләп тора. Быйылдан башлап байрамды биҙәү сират буйынса ауыл биләмәләре хакимиәттәре яуаплылығына тапшырылды. Сөнки хәҙер ауылдарҙа был монаятты әҙерләү буйынса оҫталар күбәйҙе. Улай ғына түгел, шөкөр, беҙ башлаған был кәсеп райондан ситкә лә тарала башланы. Былтыр Баймаҡ районында үткән "Башҡорт аты" фестивалендә "Кәрәҙ" халыҡ клубының эштәре беренсе урын алғайны. Әле генә Әбйәлил районында ошо уҡ фестивалдең әҙерлек этабында "Айыҡ ауыл" конкурсында үҙ көсөн һынаусы Исламбай ауылы ағинәйҙәре лә ҡатнашып,"Башҡортостан Республикаһының туризмды үҫтереү үҙәге"-нең дипломына һәм башҡорт атын һаҡлау һәм үҫтереү буйынса "Ирәндек" мәрхәмәтлек фондының рәхмәт хатына лайыҡ булды.

Бөрйән ағинәйҙәренең "Сергетыш" проекты маҡсатлы һәм оҙайлы ваҡытҡа тәғәйенләнгән. Ул хәҙер Бөрйән ағинәйҙәренең төп кәсебенә әйләнә тиерлек. Шулай уҡ беҙҙең ағинәйҙәр әлеге мәлдә районда һаҡланған сергетыш стилендәге боронғо өлгө нигеҙендәге шаршауҙарҙы тергеҙеүгә тотондо. Был эштәре менән дә оҫталарыбыҙ аптыратасаҡ, һоҡландырасаҡ әле.

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

### Беҙ - балалар менән!

**Ейәнсурабыҙҙың бай тарихы, ожмахҡа тиң тәбиғәте, тарихи йолалары, ҡаһарман батырҙары, һоҡланғыс шәхестәре бар. Шуларҙы өйрәнеү, йәш быуынға еткереү, уларҙа ил, тел, тарих, ғөрөф-ғәҙәт, тәбиғәткә һөйөү, һаҡсыл ҡараш, ихтирам тәрбиәләү - беҙҙең ағинәйҙәрҙең төп бурысы.**



Йәш быуынды халҡыбыҙҙың ысын вәкилдәре итеп тәрбиәләү ысулдарының береһе - уларҙы илһөйәрлек рухына йәлеп итеү. Был тәрбиә иң тәүҙә ғаиләлә һалынырға тейеш. Шунын өсөн иң тәү сиратта беҙ ата-әсәләр менән эш алып барабыҙ. Мәҫәлән, Ейәнсура башҡорт гимназия-интернатына район ауылдарынан йыйылған уҡыусыларҙың ата-әсәләре алдында милләт, тел, милли рух тураһында әңгәмәләр үткәрәбеҙ, ғаилә байрамдары уҙғарабыҙ. Ағинәйҙәр ойошторған "Бишек йыры" конкурсында йәш әсәләрҙең әүҙем ҡатнашыуы, сығыштары ҡыуандырҙы. Тимәк, балаларыбыҙ бишек йыры сынын ишетеп үҫә. "Өләсәйем һандығы", "Исемен матур - кемдәр ҡуйған" , "Сөмбөлә", "Науруз" , "Фольклор байрамы", "Талҡан байрамы" кеүек сараларҙы ойошторған Иҫәнгол, Өмбәт, Үрген, Иҙәш, Аҡкондоҙ, Самаҙы, Малиновка ауылы ағинәйҙәре, Ибрай ауылы ағинәйҙәре ойошторған "Һырғалаҡ байрамы" ла ауыл тормошон йәмләндереп, йәнләндереп ебәрҙе. Йыл һайын ойошторолған "Йәйләү" ял лагерында ла ағинәйҙәр көтөп алынған ҡунаҡ.

Илһөйәрлектең тамыры - халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсә килгән йолаларында, туған телдә, йырҙарыбыҙҙа. Беҙҙең ағинәйҙәр балаларға Ейәнсура ерлегендә тыуған йырҙар, легендалар, таҡмаҡтар өйрәтә, улар менән бергә "Урал батыр" эпосын сәхнәләштерә, яттан һөйләй. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, һөйөү тәрбиәләүсе "Ҡәкүк сәйе", "Ҡарға туй", "Ҡар һыуына барыу" кеүек байрамдар ойоштороу, балалар менән шишмә буйҙарын, иҫтәлекле урындарҙы тәртипкә килтереү, йола байрамдары үткәреү ҙә матур тәрбиә өлгөһө булараҡ раҫланды.

Милли кейем өләсәйҙәребеҙҙең киләһе быуынға ҡалдырған аҫыл аманаты ул. Шуға ла оҫтабикәләребеҙҙән - Үрген ауылынан Гүзәл Аксурина, Өмбәттән Гөлфирә Хәмиҙуллина, Юнайҙан Клара Урманбетованың милли биҙәүестәр буйынса оҫталыҡ дәрестәре йәш ҡыҙҙарыбыҙҙа ұғата ҡыҙыҡһыныу уята. Үтәгол ауылынан кейеҙ баҫыу оҫтаһы Фәүзиә Йосопованың түбәтәйҙәренә, камзулдарына ла, тимәк, ошо кәсепкә лә ҡыҙыға ҡыҙ балалар. Шулай уҡ Ейәнсура ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо килгән килемле, килешле кәсебе - шәл бәйләүгә лә ылыҡтырабыҙ ҡыҙҙарыбыҙҙы. Йыл да үткәрелеп килгән "Ейәнсура шәле" төбәк конкурсарында енеү яулаған ағинәйҙәребеҙ янында йәш ҡыҙҙар булыуы үҙе ҙур өмөт уята. Милләт усағының утын күңелдәребеҙҙә яндырып, йәш быуында баҙлатып йәшәйбеҙ шулай. Киләсәгебеҙ йәш быуын менән бәйле икәнен бер ҡасан да онотмайбыҙ.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА,**
**Ейәнсура районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

### Һарыҡ йөнөн һанлайҙар

**Башҡорт халҡы борон-борондан күпләп һарыҡ көткән һәм уның итен генә түгел, дауа өсөн - эс майын, кейем өсөн йөнөн, тиреһен файҙаланған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, халыҡты ашатҡан да, кейендергән дә малдың, бигерәк тә уның йөнтире сеймалының ҡәҙере китте һуңғы йылдарҙа. Ә бит аҫрау өсөн дә аңһат бит улар: бесән күп кәрәкмәй, элек улар ҡыш көнө тибендә йөрөп тә үҙҙәренә аҙыҡ тапҡан.**



Иң тәүҙә Белорет районының Сосновка ауылы ағинәйҙәре (етәкселәре Земфира Кәримова) иҫкә төшөрҙө был малдың баһа-ҡиммәтен. Улар район ауылдары ағинәйҙәрен йыйып, "Йөн байрамы" йолаһын үткәреп, өләсәйҙәребеҙҙең күркәм кәсептәрен иҫкә төшөрҙө. Күпереп торған мамыҡтай һарыҡ йөнөнөң йәшәйеш өсөн кәрәкле, һаулыҡ өсөн файҙалы әйберҙәргә әйләнеүен тамаша ҡылыусылар иҫе китеп күҙәтте. Бер төркөм ағинәйҙәр иҙәндә өйөлөп ятҡан йөндө тетеү, эшкәртеү менән була, икенсе төркөм орсоҡ сөйөртөп тетелгән йөндө иләй, өсөнсөләре йырлай-йырлай уны сирата, аялай - эш ҡайнай. Сәхнә ситенә иһә йөндән бәйләнгән, баҫылған, тиренән тегелгән әйберҙәр теҙелгән: оҫ кейемдәре, башалтай-ойоҡбаштар, кофта-камзулдар, ҙур матур шәлдәр, кейеҙ-баҫтар, быйма, тәпешкә, быймабаштар... Ситтәрәк Үткәл ауылынан Ришат Хәйбуллин үҙе эшләгән туҡыу станогында иләнгән һарыҡ ебенән балаҫ һуға. Хәҙерге көндә күп ғаиләләрҙең һарыҡ йөнөн эшкәртмәй сарыф итеүҙәренә әсендере торған бер күренеш хасил була шулай...

Был йоланы башҡа ауылдар ағинәйҙәре лә күтәреп алып, һәр береһе үҙҙәрендә үткәрә хәҙер. Әлеге көндә Манышты ауылы ағинәйҙәре (етәкселәре Зилә Сәмситдинова) "Һарыҡ - бәрәкәтле мал" исемле йола әҙерләй. Йола үткәреүҙә генә түгел хикмәт, ул

✓ *80 проценттан ашыу башҡорттар, татарҙар йәшәгән ауылда ошо көнгә тиклем мосолман зыяраты булмау күңелдә өйкәп торған бер сетерекле мәсьәлә. Күҙ алдыбыҙҙа күпме мәрхүмдәрҙе алыҫ райондарға алып китергә мәжбүрҙәр.*



ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ошо боронғо кәсепте тергеҙеүгә дәртләндерә. Махсус операцияла йөрөгән улдарыбыҙға китә хәҙер һарыҡ йөнөнән бәйләнгән кейемдәр, әйберҙәр. Ағинәйҙәр уларға йөҙҙәрсә пар йылы ойоҡбаш, бирсәткә, свитерҙар бәйләп оҙатты ла инде. Өй йылыны, әсәй-өләсәй йылыны булып, тәндәрен дә, күңелдәрен дә йылытһын улдарыбыҙҙың, тигән теләктә улар.

**Зөбәржәт СУФИЯНОВА, Белорет районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

## Үҙ һүҙе бар

**Бөгөн йәмғиәттә ағинәйҙәрҙең үҙ урыны, үҙ һүҙе бар. Беҙҙең Баймаҡ район биләмәһендәге бер сара ла уларһыҙ үтмәй, уларҙың тәрбиәүи һүҙе урамда ла, мәҙәниәт йорттарында ла, мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында ла - һәр урында яңғырай, һәр урында үҙенең тәрбиәүи әһәмиәтен раҫлай килә.**



- Һәр заманда ла ағинәй дәрәжәһендәге ҡатын-ҡыҙҙар айырым урын биләгән, ҡәүемдең усағын да, рухын да, йола-кәсептәрен дә һаҡлаған, һәм ул бөгөн дә шулай, - ти Баймаҡ районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Гүзәл Монасипова. - Ә хәҙер беҙҙең иңгә тағы ла бер бурыс өҫтәлде: махсус хәрби операцияға юлланган ир-егеттәребеҙҙе халҡыбыҙҙың йолаларына ярашлы оҙатыу, доғалар бағышлау һәм уларға һәр яҡлап ярҙам итеү. Бөгөн бар эшебеҙ, бар шөғөлөбөҙ ошо бурысты еренә еткереп үтәүгә йүнәлдерелгән, яугирҙарҙың ғаиләләре менән дә ныҡлы бәйләнеш булдырылған. Ошондай ҡатмарлы заманда тиҙ генә ойошорға, берҙәмлек һаҡларға, ниндәйҙер кәсепэште атҡара һалырға беҙҙең быға саҡлы тиҫтә йыл буйы атҡарған эштәребеҙ, өйрәнгәндәребеҙ, аралашыу ғәҙәтебеҙ ярҙам итә...

Ысынлап та, бөгөн йәмғиәтебеҙҙә ошо "Ағинәй" ойошмаһы ағзалары әүҙемлектәре менән барыһынан да айырылып тора. Сөнки улар ошо ойошманы бар иткәне бирле халҡыбыҙҙың бик күп ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, кәсептәрен тергеҙҙе. Иң тәүҙә, аралашырға өйрәнде улар. Аралашыу - үҙеңдең йортоңда булдырған комфортлы биләмәңдән сығыу, үҙ уйҙарың, үҙ ваҡытың, үҙ шатлыҡ-борсолоуҙарың, хатта үҙ ризығыңдан башҡалар менән дә уртаҡлашыу ул. Был матур ғәҙәтебеҙ онотола төшкәйне бит. Ә бөгөн ағинәйҙәр үҙҙәре булдырған мөхиткә - мәҙәниәт йорттарындағы, китапханаларҙағы бүлмәләренә көн дә тиерлек эшкә йөрөгәндәй йөрөй. Әйткәндәй, ауыл биләмәләре башлыҡтарының ярҙамы менән 14 ауылда ағинәйҙәрҙең үҙ "кабинеты" булдырылған. Быңдай бүлмәләре булмағандарҙың да китапханаларҙа үҙ мөйөшө бар. Ағинәйҙәр бүлмәләрен этномузей менән дә сағыштырырға мөмкин. Уларҙы шулай уҡ тәрбиә биреү үҙәге тип тә атарға була. Былтыр районда "Иң яҡшы ағинәй бүлмәһе" конкурсы ла булып үтте һәм был уларҙы артабан йыһазландырыу, зауыҡ менән биҙәү, күберәк экспонаттар менән байытыу мөмкинлеге бирҙе.

"Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһының бынан ун йыл элек Баймаҡта үткән ойоштороу йыйылышында бик күп бурыстар менән бергә: "Был ойошма ниндәйҙер датанан датаға, байрамдан байрамға тиклем генә эшләй, йылына бер-ике тапҡыр ғына йыйылып, ниндәйҙер сара үткәрә торған кешеләрҙе түгел, ә көн һайын, һәр һулышы һайын Ағинәй булып йәшәүселәрҙе туплаған ҡор булырға тейеш", - тигән талапты һәр саҡ хәтерҙә тота был инәйҙәр, апайҙар. Улар ысынлап та был йылдарҙа ағинәйлек сифаттарына өлгөшеүҙе көсәп, үҙтәрбиәне алға һөрҙә, совет заманында үҙләштерә яҙған сит ғәҙәттәрҙән арынырға тырышты. Улар эшләгән бар эштәр - милли кейемдәрҙе дөрөҫ итеп тергеҙеү, һанламай ташлап ҡуйған ҡорама ҡорау, кейеҙ баҫыу, балаҫ һуғыу кеүек шөғөлдәрҙе аяҡҡа баҫтырыу, башҡорттоң милли аш-һыуҙарына ҡайтыу, халҡыбыҙҙы дауалау ысулдарын иҫкә төшөрөү - былар барыһы ла Ағинәйҙең күңелен, фиғелен, ваҡытын биләгән көнитмешкә әйләнде лә ҡуйҙы.

Баймаҡ ағинәйҙәре тотона икән, был эш ысынлап та еренә еткерелеп, хатта профессиональ кимәлдә башҡарыла. Был - кире ҡаҡҡыһыҙ факт. Мәҫәлән, район ағинәйҙәренең байтағы Сибай ҡалаһында балаҫ һуғыу буйынса ойошторолған фестивалдә ҡатнашып, өс көн барған оҫталыҡ дәрестәрендә төрлө станоктарҙа балаҫ һуғырға өйрәнеп, "Балаҫ һуғыу оҫтаһы" тигән танытмаға эйә булып, станоктар һатып алып, ауылдарында балаҫ һуғыу кәсебенә тотондо ла киттеләр. Ҡорама ҡорау кәсебен дә, милли биҙәүестәр, аяҡ кейеме - сарыҡ эшләүҙе лә шулай һәр ауылда оҫталар һәм оҫтабикәләрҙән һабаҡтар алып, юғары кимәлдә, хас та борондан ҡалған ҡомартҡыларҙың төп нөсхәһендәгеләй эшләргә өйрәнделәр. Ә бит уларға берәү ҙә "Шуны эшләгеҙ, быны эшләмәгеҙ" тип ҡушмай, ауыл, тотош йәмғиәт файҙаһына атҡарылған бихисап хеҙмәттәре өсөн берәү ҙә түләмәй - был да халҡыбыҙҙы ошо Ер йөҙөндә иҫән-имен йәшәтеү мәктәбе ҡағиҙәһе: үҙойошоу, үҙтәрбиә, үҙ һәләтлектәреңде тормошҡа ашырыу. Былар - элек-электән беҙҙең тарафтарға килеп-китеп йөрөгән сәйәхәтселәрҙе аптыратҡан, һоҡландырған сифаттар. Шул сифаттар беҙҙе йәшәтә лә инде. Шөкөр, улар ағинәйҙәр өлгөһөндә киләһе быуындарға ла тапшырылыр, тип ышанайыҡ.

**Лилиә ТАКАЕВА, Баймаҡ районы "Һаҡмар" гәзите хәбәрсеһе.**

## Ауыл хәстәрҙәре уртаһындабыҙ

**Башҡортостан Республикаһының "Үҙ йортом" проекты буйынса төҙөлөп, бюджет өлкәһендә эшләгән белемле, ғилемле йәш ғаиләләр тупланып гүмер иткән Өфө районы Шамонин ауылында 2018 йылдан эшләй башлағайны "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы.**



Ошо ойошманың етәксеһе бурысы йөкмәтелгәс, мәҙәниәт йорто ла, физкультура-һауыҡтырыу комплексы ла, мәсете лә булмаған ауылда нисек итеп ойошоп эшләп китергә икән, тип уйға ҡалдым. Барып төртөләр, ултырып фекер алышыу урыныбыҙ булмау ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы. Мәктәптең бик ҙур, матур тамаша залы, коронавирус зәхмәте килеп сығып сикләүҙәр индерелгәнсе, әлбиттә, йәш уҡытыусылар, балалар менән эшләргә уңайлы шарттар булдырҙы. Дәртләнеп, рухланып, янынан-яңы хыялдар менән тотондоҡ был бурысыбыҙҙы үтәүгә. Дәрестәр тамамланыуға мәктәпкә йыйылабыҙ, сараларҙың, уйындарҙың сценарийҙарын төҙөйбөҙ, ҡабатлайбыҙ, йырлайбыҙ, эҙләнәбеҙ, оҫталыҡ дәрестәре үткәрәбеҙ, байрамдарҙа ҡатнашабыҙ. Тиҙ арала ғына милли кейемдәребеҙҙе тектереп, биҙәүестәребеҙҙе эшләп алдыҡ. Балалар күп, уҡытыусылар ҙа, тәрбиәселәр ҙә йәштәр, ә беҙҙең "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары барыһы ла ҙур тәжрибә туплаған уҡытыусылар, тәрбиәселәр, хоҡуҡ хеҙмәткәрҙәре, һатыусылар, ашнаҡсылар.Коллегаларыбыҙға ярҙам булһын тип, тәрбиәүи сараларҙы йәнләрәк, халҡыбыҙ педагогикаһына нигеҙләнеп ойошторорға тырыштыҡ: тәбиғәт ҡосағында уйындар, өмәләр ойошторабыҙ, балалар ҡатнашлығында йолалар атҡарабыҙ, йәрминкәләрҙә, һабантуйҙа, өмәләрҙә, йыйындарҙа йәш ата-әсәләр менән аралашып, кәңәштәр бирәбеҙ. Улар ҙа, уҡытыусы-тәрбиәселәр ҙә республика кимәлендәге конкурстарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашалар, бөтә ауыл дәррәү тауыш биреү ойошторабыҙ. Йәш әсәләрҙең "Бәхетле әсәләр" ойошмаһы менән күп сараларҙы бергәләп үткәрҙек, янғындан зыян күргәндәргә ярҙам ойошторҙоҡ.

Ауылыбыҙҙы "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнаштырыу башланғысын да хуплап сыҡтыҡ һәм унда еңеп сығыу өсөн ҡулдан килгән бар сараларҙы күтәрмәләргә тырыштыҡ. Иң эре ауылдар араһында II урын яулап, 3 миллион грант алыу ауылдаштарҙы тағы ла берләштерҙе, дуҫлаштырҙы. Халыҡтан тағы ла аҡса өҫтәп йыйып, ике балалар майҙансығы төҙөп ҡуйҙылар. Халыҡты күберәк йәлеп итеү маҡсатынан ватсапта төркөмдәр булдырғанбыҙ: хәбәр һалабыҙ, фекер алышабыҙ, әрләшеп китәбеҙ, килешәбеҙ. Был төркөмдәр аурыуҙар көсәйеп, сикләүҙәр индерелгәс, бигерәк әүҙемләште. Төҙөлөп бөтөп килгән мәсет өсөн аҡса йыйыу, өмәләргә сығыу, балаларға сана шыуыу өсөн тау таҙартыу... Бөтә был эштәр ауыл халҡы менән килешеп, хәбәрләшеп атҡарыла. Мобилизацияланғандарға гуманитар ярҙам ойоштороу, йылы ойоҡбаштар, бейәләйҙәр бәйләү ҙә төштө беҙҙең өлөшкә. Ауылда почта булмаһа ла, үҙебеҙгә кәрәкле гәзит-журналдарға яҙылырға ла тырышабыҙ.

Нисек кенә булмаһын, ауылдағы рухи мөхитте күҙҙән ысҡындырмаҫҡа, ниндәйҙер бушлыҡ килеп тыуа, шунда беҙҙең ярҙам кәрәк икән, ситтә ҡалмаҫҡа тырышабыҙ. Үҙебеҙ йәшәгән төйәккә битараф булмау - ул беҙҙең быуындың ҡанында бит инде. Мәҫәлән, 80 проценттан ашыу башҡорттар, татарҙар йәшәгән ауылда ошо көнгә тиклем мосолман зыяраты булмау күңелдә өйкәп торған бер сетерекле мәсьәлә. Күҙ алдыбыҙҙа күпме мәрхүмдәрҙе алыҫ райондарға алып китергә мәжбүрҙәр. Мәхәллә менән бергә 2018 йылдан алып ауыл хакимиәтенә зыярат өсөн ер бүлеүҙе һорап, хаттар яҙабыҙ. Вәғәҙәләр әлегә һауала эленеп тора. Бына шулай, ҙур ауылдарҙың проблемалары ла ҙур. Беҙ, ағинәйҙәр ҙә, шуларҙың уртаһында.

**Рәйфә ВӘЛИЕВА, Өфө районы Шамонин ауылы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

(Дауамы. Башы 8-се һанда).

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

## Байҙарҙан өйрән

Кем аҡса тота белмәй, ул бер ҡасан да бай булмай. Бер ҡыҙыҡлы һынау үткәрелгән. Бай миллионерҙар автомобиль өсөн ниндәй күләмдә аҡса сарыф итеүен өйрәнгәндәр. Асыҡланыуынса, уларҙың барыһы ла үҙенең йыллыҡ килеменең 7,6 процентын ғына автомобиль өсөн тотона. Бөтөн дөйөм килеменең 0, 68 процентын ғына. Ә беҙ хәҙер нимә күҙәтәбеҙ? Аҡсаһы булмаһа ла, һәр кемдең автомобиле бар. Йәғни, кешегә башҡалар араһындағы статусы мөһимерәк.

**Мөһим кәңәштәр:**

● Ике айлыҡ килемегеҙҙән артығыраҡ торған машина алмағыҙ.

● Был формулаға ярашлы автомобиль һеҙгә оҡшамаймы? Тимәк, был һеҙгә күберәк аҡса эшләй башларға стимул булып торасаҡ.

● Әгәр ҙә әле үҙегеҙгә оҡшаған автомобилде кисектереп түләү, лизинг тураһында килешеү йәки кредит менән алаһығыҙ икән, алдан уҡ үҙегеҙгә "бүләк" эшләйһегеҙ. Ә нимәгә ынтылырға һуң улай булғас?

● Ҡайһы берҙә шундай хәлдәр була, аҡса бөтөнләй икенсе нәмәләргә китә. Ярты йылда түләп бөтәм тигән кредитығыҙҙы ҡаплай алмауығыҙ ҙа бар.

● Күпмелер күләмдә аҡса йыйғансы, яңы автомобиль алмағыҙ. Яңы автомобилдәрҙең ике йыл эсендә хаҡы яртылаш төшә. Ике йыллыҡ машина яңыһынан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Ул шулай яҡшы йөрөй, шулай булғас, ни эшләп икеләтә ҡиммәт хаҡ түләргә?

● Һәр автомобилегеҙҙе ҡулаҡсаға һатып алығыҙ. Ҡулаҡса сығымдың күләмен аңларға булышлыҡ итә.

## Әле йәшә!

Аҡса экономиялау тураһында һүҙ сыҡһа, күптәр: "Мин бит бөгөн, әле йәшәйем. Ҡартайғас, сәстәр салланғас байырға түгел, ә хәҙер йәшәргә теләйем. Тормоштоң бөтөн матурлығын бөгөн алғым килә", - тиҙәр. Ғәҙел, әлбиттә. Иртәгә йәшәйем тип, иртәгәгә әҙерләнеп йәшәп булмай ҙа инде. Ҡәнәғәтлек алып йәшәргә лә, бер үк ваҡытта байырға ла теләр инегеҙме? Күңел асыуҙар өсөн иҫәп асығыҙ. Уға ай һайын килемегеҙҙең 5-10 процентын һалып барығыҙ. Быны ай башында эшләү яҡшыраҡ. Һәм ошо иҫәптә күпме бар, тотоноғоҙ. Эйе-эйе, дөрөҫ уҡынығыҙ: тотонорға! Беҙ әле йәшәйбеҙ һәм бынан ҡәнәғәтлек алырға тейешбеҙ. Үҙебеҙҙе һәм яҡындарыбыҙҙы һөйөндөрә алабыҙ. Аҡсанан ҡәнәғәтлек алабыҙ. Аҡсаның ни тиклем шәп нәмә икәнен аңлар өсөн тотонабыҙ.

Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙар аҡсаны күп тотона. Әммә үҙенә аҡса йәлләүселәр ҙә күп. Улар үҙҙәренә берәй нәмә алһа, үҙен ғәйепле тоя башлай. Былай экономияларға ярамай, быны менән һин үҙеңдең баһаң юҡ икәнен күрһәтәһең. Үҙенең күңелен күрә белгән ҡатын башҡаларға ла күберәкте бирә. Әгәр ҙә был аҡсаны тотонмаһам, яҡшыраҡ булыр ине, тип уйламағыҙ. Үҙегеҙ өсөн аҡса ҡалдырығыҙ. Бөгөн үҙегеҙҙең күңелегеҙҙе күрегеҙ. Үҙегеҙгә бүләк эшләп өйрәнегеҙ.

**Бодо ШЕФЕР.**



**13 МАРТА
ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20 Х/ф "Дело было в Пеньково". [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Раневская". [12+]
22.40 "Большая игра". [16+]
23.45 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
0.15, 0.55, 1.35, 2.15, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Акушерка. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Байык" представляет... [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45, 14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Спортивная история. [12+]
12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 Преград. Net. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 История одного села. [12+]
18.00 "Бай". [12+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Д/ф "Военкоры". [16+]
0.45 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Цыпленок из букваря". [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 Следопыт. [12+]

**14 МАРТА
ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Раневская". [12+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.55, 0.35, 1.15, 1.55, 3.20, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
2.35, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Акушерка. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45 Надо знать. [12+]
11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Детей много не бывает. [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
17.00 Автограф. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Елкән. [6+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]
23.30 Бәхетнамә. [12+]
0.45 Спектакль "Не улетайте, журавли". [12+]
2.15 История одного села. [12+]
2.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]

**15 МАРТА
СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Раневская". [12+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.55, 0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Акушерка. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
10.30, 17.45, 3.00 История одного села. [12+]
10.45 Әлләсе... [6+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 МузКәрәҙ. [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 "КультУра". [6+]
16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Автограф. [12+]
23.45 Бәхетнамә. [12+]
1.00 Спектакль "Перед свадьбой". [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

**16 МАРТА
ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Раневская". [12+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.55, 0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Акушерка. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Алтын тирмә". [0+]
10.45 Надо знать. [12+]
11.00 Автограф. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Сулпылар. [0+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Городок АЮЯ. [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Финликбез. [12+]
17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Башкорттар. [6+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.15 Спектакль "Судьба, выбранная мной". [12+]
3.00 "Курай даны". [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 "Это моя профессия". [12+]

**17 МАРТА
ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
23.30 Х/ф Премьера. "Мой кузен". [16+]
1.30, 2.10, 2.50, 3.25, 4.00, 4.35, 5.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Моя Мелодия. [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Сколько стоит счастье". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]
10.30, 18.00 "Йома". [0+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]
12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]
12.45, 5.00 Үткән гүмер. [12+]
13.15 Курай даны. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).
13.45, 5.30 Автограф. [12+]
14.15, 19.45 История одного села. [12+]
15.00 "АйТекә!" [6+]
15.15 "КультУра". [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Финликбез. [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 "Курай даны". [12+]
19.00, 3.00 Честно говоря. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 "Образцовая башкирская семья". Церемония награждения победителей Открытого республиканского конкурса. [12+]
23.00 Д/ф "Батальоны". [16+]
0.00 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]
2.15 Алтын тирмә. [0+]
3.45 "Ете егет". [12+]
4.30 Бай. [12+]

**18 МАРТА
СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.40 Т/с "По законам военного времени-2". [12+]
16.45 Премьера. "Играй, гармонь!" Концерт в Кремле. К 75-летию Геннадия Заволокина. [12+]
18.40 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50, 0.30, 1.10, 1.50, 2.30, 3.10, 3.45, 4.20, 4.55, 5.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Впереди день". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Не будь моей женой". [16+]
0.40 Х/ф "На качелях судьбы". [12+]
4.30 Х/ф "Муж счастливой женщины". [12+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 Это моя профессия. [12+]
9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
10.00 Елкән. [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Преград. Net. [6+]
11.00 МузКәрәҙ. [0+]
11.30 "Не игрушка". Репортаж с презентации подросткового сериала. [6+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 "Башкорт йыры". [12+]
19.00 Формула меда. [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Концерт народного артиста РБ Расуля Карабулатова. [12+]
2.15 Спектакль "Посетитель". [12+]
3.30 Д/ф "Батальоны". [16+]
4.30 Тормош. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Мистический Башкортостан. [12+]

**19 МАРТА
ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 2.20, 3.00, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Х/ф "Белый снег". История лучшей лыжницы XX века. [0+]
16.25 Д/с "Век СССР". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.35 Русский вызов. Турнир сильнейших фигуристов. Битва поколений в уникальном соревновании за звание лучших на льду. [0+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

6.00, 3.10 Х/ф "Эта женщина ко мне". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены.
12.45 Т/с "Впереди день". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Хороший день". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [12+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Курай даны". [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [0+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Атайсал. Знай наших!" [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.30 "Дорога к храму". [0+]
16.00, 4.30 Историческая среда. [12+]
16.30 "Честно говоря". [12+]
17.15 Концерт народной артистки РБ Риммы Амангильдиной. [12+]
19.15, 3.45 Әлләсе... [6+]
20.00, 2.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
20.30 Территория женского счастья. [12+]
20.45, 2.30 Спортивная история. [12+]
21.15 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 1.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Спектакль "Дурочка". [12+]
1.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
3.00 Честно говоря. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ-АРА ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР КӨНӨНӘ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**7-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Баобаб. Йосопов. Франк. Алмаш. Юлдаш. Ырыуҙаш. Йылайыр. Алҡым. Шабала. Һарыҡ. Ҡом. Ҡамҡа. Алҡа. Шарт. Шағир. Ат. Ойоҡ. Иваново. Асман. Хәсәнов. Ҡытлыҡ.

**Вертикаль буйынса:** Йәнһүрәт. Аллаярова. Йолҡош. Йома. Волхв. Шыршы. Саф. Ҡатын. Оя. Әйт. Абушахманов. Йот. Бивак. Ваҡ. Юша. Ҡашҡа. Лупа. Ысыҡ. Шәм. Айран.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (21) дүшәмбе | 6:09 | 7:39 | 13:30 | 17:33 | 18:13 | 20:43 |
| 14 (22) шишәмбе | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 17:35 | 19:15 | 20:45 |
| 15 (23) шаршамбы | 6:04 | 7:34 | 13:30 | 17:36 | 19:16 | 20:46 |
| 16 (24) кесе йома | 6:01 | 7:31 | 13:30 | 17:38 | 19:18 | 20:48 |
| 17 (25) йома | 5:59 | 7:29 | 13:30 | 17:39 | 19:20 | 20:50 |
| 18 (26) шәмбе | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:41 | 19:22 | 20:52 |
| 19 (27) йәкшәмбе | 5:54 | 7:24 | 13:30 | 17:42 | 19:24 | 20:54 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ҡәҙерле Мама Заря! Ысын күңелдән һеҙҙе тыуған көнөгөҙ менән ҡотлайбыҙ! Ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, гармония һәм бәхет, тормошоғоҙҙа тик яҡшы ваҡиғалар һәм уңыштар ғына булып тороуын теләйбеҙ! Туғандарығыҙҙың һәм дуҫтарығыҙҙың сәләмәтлеген, күңел йылыһын, иғтибарын тойоп йәшәгеҙ!

**Ҡотлау менән һеҙҙең команда: Айбулат, Миңзәлә, Руслан, Радмила, Лиана, Айһылыу.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 март Премьера! "Ете быуын. Һаҡлаусылар"** спектакль-вербатим. 16+

**17 март Премьера! "Ете быуын. Йәштәр"** спектакль-вербатим. 16+

**18 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

**19 март "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 март "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 11.00 6+

**17 март "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (Кейт ДиКамилло), мөхәббәт тураһында әкиәт. 12.006+

**18 март "Пеппи Длинный Чулок"** (А. Линдгрен), әкиәт. 12.00 0+

**19 март "Аҡмулла"** (З. Бураҡаева), ҡисса. 18.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**19 март Премьера! "Золушка"** (В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**15 март "Нескучная классика".** 11.00, 13.00 6+

**"Диалог эпох. Посвящение Шаляпину".** 6+

**18 март "Музыку слушаем вместе".** 11.00 0+

**"Башҡорт легендалары этно-рок стилендә"** концерт. 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 март Премьера! "Футлярҙағы кеше. Мөхәббәт тураһында"** (А.П. Чехов), иллюстрациялы хикәйәләр. 13.00 12+

**17 март Премьера! "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова), шиғри драма. 12+

**18 март "Сказка о царе Салтане"** (А.С. Пушкин), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**18 март "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов", комедия. 18.00 12+

**19 март "Познавайка в стране Узнавайка"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драмаһы менән 13 март - Түбә ауылында, 14 март - Өфө ауылында, 15 март - Амангилде ауылында, 16 март - Хәлил ауылында гастролдәр. 16+

**17 март "По истокам времени"**, оҫталыҡ дәресе. 12.30 0+

**"Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы"** (Д. Юлтый, З. Бураҡаева инсц.), драма. 12+

### БР Милли музейы

**14-17 март "Яҡташтар - Бөйөк Ватан һуғышында Ҡырымды азат итеүселәр"** сара. 15.00 6+

**15 март "Этно стилдә панно"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 12+

**"Матур тусовка в музее"** йәштәр өсөн сара. 18.00 16+

**18 март "Уралдың ер аҫты байлыҡтары"** интерактив экскурсия. 14.00 6+

ЗАУЫҠ

# ҠОРОУ БЕЛМӘЙ, ҺАМАН ТУЛЫ

## Урал батыр ҡотоғо

Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА



### Хәтеребеҙ - ҡоба йырыбыҙҙыр

Хәтеребеҙ - ҡоба йырыбыҙҙыр,
Тарих тәрәнлеге, дәүлегебеҙ,
Ҡоро ерҙе эҙләп табыусылар -
Йәнбикәбеҙ менән Йәнбирҙебеҙ.
Хәтеребеҙ - ҡоба йырыбыҙҙыр,
Донъяларға һалған оранығыҙ:
Үҙ ғүмерен ҡорбанлыҡҡа биреп
Ергә ғүмер бөрккән Уралыбыҙ.
Хәтеребеҙ - ҡоба йырыбыҙҙыр:
Йөрәк елегебеҙ, аҡ майыбыҙ,
Белем шишмәһенә юл күрһәткән
Ҡояш ҡыҙы - изге Һомайыбыҙ.
Хәтеребеҙ - ҡоба йырыбыҙҙыр:
Аҡыл менән тулы хистәребеҙ,
Хаҡ юлдағы булат ҡылысыбыҙ,
Аҡбуҙатлы ғәййәр ғәскәребеҙ.
Хазинабыҙ - Урал тоҡомдары
Ғәзиз Иҙел, Нөгөш, Яйығыбыҙ,
Туфандарҙан беҙҙе алып сығыр
Әжәлдәрҙән һаҡлар ҡайығыбыҙ.

### Уйланылыш

Тереһыуҙы уртлаған ул,
Шүлгәнде лә йотҡан ул,
Икеһе лә терек һыуы,
Эсмәгеҙ, тип ҡушҡан ул.
Икеһе лә бәндә өсөн
Яман эсемлек тигән,
Кәүҙәләрҙән тере мәйет
Яһар ысынлыҡ тигән.
Уртлағанын йотмаған ул,
Ер өҫтөнә һипкәндер,
Дейеүҙәре менән ҡуша
Илгә ғүмер бөрккәндер.
Батырлығын ҡылған Урал,
Ҡырған яуыз нәҫелен:
Вәхшилеген ҡылалмаған
Йылан-саян йәшерен.
Дөрөҫ итеп уйланылған
Уралыбыҙ гәмәле:
Йәнтөйәкте йәшәт, тиеп
Әйҙәй һаман әләме.

### Байлыҡ

Аждаһалар - туфан һыуы,
Тауҙар - дейеү кәүҙәһе...
Халҡыбыҙҙың аңындағы
Тарихтыр был тәүҙәге.
Билен ҡылыс өҙә сапҡан
Тау ярығы - йылғалар:
Башҡаларҙан айырмалы
Үҙебеҙҙең тамғалар.
Һомай менән Уралыбыҙ
Тоҡомо - аҡҡош тыуы...
Ошо тыуҙың еребеҙҙә
Туҡталмаҫ ғүмер туйы.
Һаман да беҙ Аҡбуҙатлы,
Маллы, ерле халыҡбыҙ.
Йәнебеҙҙең шишмәһенә
Хас түгел ул һайығлыҡ.
Һаман дейеү аңдый беҙҙе,
Китмәй һаман үткәнгә,
Урал батыр һөйәктәре
Алтын булып киткәнгә.
Талап булмаҫ байлығыбыҙ -
Йәнебеҙ үә тәнебеҙ.

Урал батыр тоҡомдары -
Мәңгелек мәғдәнебеҙ.

### Йәншишмә

Тәүге тыйым, тәү васыят
Йәнбирҙе, Йәнбикәнән
Алдағы бар замандарға
Ерҙә тәү кешеләрҙән.
Сарсағанды аҡ һыу котә:
Һыуһынына ҡан эсмә!
Тереклекте һаҡлай бары
Ғүмер һыуы йәншишмә!
Именлеккә яҫҡынғандың
Билдәле исемдәре:
Тыйылынған ҡанды эсә
Яуызлыҡ нәҫелдәре!
Азатлыҡтан азат итә
Бәндәне ҡан ҡолдары.
Йәншишмәне бөркә илгә
Бөйөк намыҫ улдары.
Йәнбирҙенән, Йәнбикәнән
Килгәс улар тоҡомо,
Ҡороу белмәй, һаман тулы
Урал батыр ҡотоғо.

### Аватар

*"Кеше, тиһәм, Тәңреһең".*
*"Урал батыр" эпосынан*

Үҙе кеше, үҙе Тәңре -
Бойорғандан балапан.
Кем тиһәгеҙ, Урал батыр
Иң боронғо аватар.
Аты Урал булған саҡта
Булыр бәндә затынан,
Ашырыр ул бойорғанды,
Үткәрер үҙ башынан.
Аты Тәңре булған саҡта
Кешелеккә бойорор,
Күнелдәрҙең сөнгөләнә
Һөйөү булып уйылыр.
Берләштерер Йыһан аңын
Әҙәмлек аңы менән,
Арбар шағирҙарҙың йәнен
Илаһи сағы менән.
Кеше, Тәңре берҙәмлеге
Дөрөҫ булһа, хаҡ булһа,
Алып сығыр ҡараңғыла
Аҙашҡанды аҡ юлға.
Һаҡлап тора башҡортомдо
Асманда шундай сатыр:
Үҙе Тәңре, үҙе кеше
Аватар Урал батыр.

### Зәрҡүм

Аҡ йыландарҙың батшаһы,
Ҡаһҡәһә улы Зәрҡүм,
Үлде тиһән, төрлө төҫтә
Терелә алған мәрхүм.
Аяҡһыҙ ҙа йөрөй алған,
Ҡанатһыҙ ҙа осор зат,
Дейеү менән нәҫелдәш ул.
Юха менән тоҡомдаш.
Шүлгән батша биләмәндә
Әҙрәкә ялсыһы ул,
Туфандарҙың ҡоралы ул,
Ут-һыуҙың ҡамсыһы ул.
Йылан тиһән, аждаһа ул,
Егет тиһән, ул йылан.
Тере йән ул, бер ҡараһаң

Күҙҙе бәйләгән томан.
Әле балыҡ, әле кешел -
Һәр дәүерҙә әүермән.
Ектән сыға йәшеренеп
Өр-яңы тире менән.
Мәңгелекте хасил итә
Башы ҡойроғон тешләп,
Көтөп торған ҡәберенә
Үлемде тыға бөкләп.
Сер һарайы асҡысы ла
Йөрәгендә Зәрҡүмдең:
Кеше ашап баш үҫтермәҫ
Тылсымы бар һәр кемдең.

### Йылан иле

Түңәрәк ер шары буйлап
Һулға киткән, ти, Урал,
Уңға юлын тотҡан Шүлгән, -
Сыҡҡандар ерҙе урап.
Яҡшылыҡтың илен эҙләп
Киткән, ти, Шүлгән матур.
Яманлыҡ төйәген эҙләп
Киткән, ти, Урал батыр.
Үлемде табып үлтермәк
Булған улар маҡсаты.
Айырған был бер туғанды
Уңлы, һуллы юл саты
Осраштырған, ти, уларҙы
Алыҫ Ҡаһҡәһә иле:
Ҡанатлы йылан - аждаһа
Ҡитраһы, ҡәһәт иле.
Ҡатил атлы булған, ти, ул
Был батшалыҡ батшаһы,
Яһил булған ҡушаматы,
Ҡанһыҙлығы таҡмаһы.
Һарайына ошо залим
Йыл да халыҡ алдырткан,
Егеттәрҙе утҡа яҡҡан,
Ҡойоға ҡыҙ һалдыртҡан.
Ер түңәрәк булған өсөн
Урал, Шүлгән осрашҡан,
Биниһая юлдар үтеп
Үлемде эҙләп тапҡан.
Тик мин генә аңламайым
Дөмөкмәҫ йылан илен:
Ерҙә һаман һуғыш бара,
Ни тере һаман үлем?

### Бирәбеҙме Уралыбыҙҙы?

Сит яҡтарҙа мал табабыҙ:
Бирәбеҙ Уралыбыҙҙы,
Тир түгәбеҙ ят тупраҡҡа,
Һатабыҙ оранабыҙҙы!
Ил табабыҙ туйған ерҙә,
Ташлайбыҙ Уралыбыҙҙы,
Ялсылыҡта уҙҙырабыҙ
Килмешәк тиҙаныбыҙҙы.
Иҫебеҙҙән сығарабыҙ
Уралдан тыуғаныбыҙҙы,
Онотабыҙ ер хужаһы,
Аҫаба булғаныбыҙҙы.
Бирәбеҙ Уралыбыҙҙы,
Йәшәткес хыялыбыҙҙы,
Аҡылһыҙлыҡ таштарына
Ҡайрағас ҡоралыбыҙҙы...

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ДОНЪЯ БАҪҺА...

### тоҙ ҙа алтынға әйләнә

Йылан йөҙ йыл йәшәһә - аждаһаға, аждаһа йөҙ йыл йәшәһә - юхаға әйләнә, имеш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ир кешегә мотлаҡ ҡатын кәрәк, сөнки ул донъялағы бар ғәйепте бары тик хөкүмәткә генә япһара алмай бит.

**(Леонард Левинсон).**

Өлкәндәр - үлемдән, балалар ҡараңғынан ҡурҡа: ике осраҡта ла был ҡурҡыу әкиәттәр аша тыуҙырыла.

**(Фрэнсис Бэкон)**

Бысраҡ әйберендә өйҙә йыуыу яҡшыраҡ.

**(Мексика мәҡәле).**

Аҡылы менән балҡыусылар һәм аҡылы менән ялтырауысылар була. Тәүгеләре - балҡыта, икенселәре - һуҡырайта.

**(Мария Энбер-Эшенбах).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер егет үҙенең икенсе яртыһын таба алмай ҡаңғыра икән. Уға гел йә йәмһеҙ, йә аҡылһыҙ, йә усал, йә ялҡау ҡыҙҙар ғына осраған. Бөтә яҡлап та килгән, йәғни үҙе матур, үҙе егәрле, үҙе йомарт ғүзәл затты эҙләүҙән арыған ир аҡыл эйәһенән кәңәш һорарға булған. Аҡһаҡал уны иғтибар менән тыңлаған да:**
**- Күреп торам, бәләң бик ҙур. Шулай ҙа әйт әле миңә: әсәйең менән мөнәсәбәтең нисек? - тип һорап ҡуйған.**
**Егет бик ныҡ ғәжәпләнгән.**
**- Бында әсәйемдең ни ҡыҫылышы бар? Әлләә, белмәйем... Ул йыш ҡына үҙенең теләнә ниндәй һораҙҙары, артыҡ хәстәрләүе, мыжыуы һәм үтенестәре менән йәнемә тейә. Уны яратам тип әйтә алмайым, - тип яуап биргән.**
**Аҡыл эйәһе бер аҙ уйланып торған да:**
**- Минең һиңә мөхәббәттең төп серен асҡым килә. Һөйөү ҙә, бәхет тә һинең йөрәгеңдә ул. Уларҙың орлоғон күңеленә тормошоңдағы иң мөһим кешең һалған. Ул - һинең әсәйең. Уға ниндәй мөнәсәбәттә булһаң, донъялағы бар ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата шундай мөнәсәбәт һаҡланасаҡ. Сөнки әсәйең - ул һинең беренсе мөхәббәтең, беренсе булып, һине үҙ ҡосағына алған кеше. Әсәйеңде яратһаң һәм хөрмәт итһәң, башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла хөрмәт итергә өйрәнәсәкһең. Шул ваҡытта ҡасандыр һиңә оҡшаған ҡыҙҙың наҙлы ҡарашын, ирҡә йылмайыуын үҙең дә тойорһоң, йылы һүҙҙәрен ишетерһең.**
**Ата-әсәгә мөнәсәбәтебеҙ - бәхетебеҙҙең үлсәүе ул..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 март 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 311